ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискә Өфө

24-30 июнь (һөтәй) 2023

№24 (1066)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

## Йыңғай йүнәлеш алынды түгелме?



2

## Яҡшы кеше булып...

оҙаҡ уйнап булмай



8-9

## Ҡыҙыҡлы тарихы бар...




10-11

## "Хәҙер мәсет юлындамын"



12

*Алға - өмөт менән, артҡа - рәхмәт менән, өҫкә - доға менән, аҫҡа - тәүбә менән, эске донъяңа - иғтибар менән, тирә-яғыңа һөйөү менән баҡ.*

*(Сәхифәнән).*

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Һеҙҙең ғаиләлә ниндәй милли һәм дини йолалар күҙәтелә?

***Морат ЛОҠМАНОВ, тележурналист:*** Нәҫелебеҙҙә электән килгән йолаларҙы тотабыҙ: исем ҡушыу, никах мәжлестәре, Ҡөрьән уҡытыу, мәрхүмдәрҙе иҫкә алыу, Ураҙа, Ҡорбан ғәйеттәрен билдәләү һ.б. Үҙемә Ураҙа һәм Ҡорбан ғәйеттәрен һәр ваҡыт ғаиләнән әҙерәк айырылып үткәрергә тура килә, сөнки баш мөфтөй Тәлғәт хәҙрәт һөйләгән вәғәзде, ғәйеттең нәсихәтен бөтә илебеҙгә телевидение аша еткереү бурысымды үтәйем. Бынан һуң дуҫ ғаиләләр менән йыйылышып ҡорбан салабыҙ, яҡындарыбыҙға ҡотлау һүҙҙәре еткерәбеҙ, хәл белешәбеҙ, ә икенсе көнөнә ғаиләбеҙ менән тәмле аштар бешереп, табынға йыйылабыҙ. Ғәйеткә тиклем зөлхизә айының ун көнлөгөндә Ҡөрьән уҡыйбыҙ, күберәк изге ғәмәлдәр башҡарырға тырышабыҙ, саҙаҡалар бирешәбеҙ, ә Ғәрәфә көнөндә (ул быйыл 27 июнгә тура килә) теләк теләйбеҙ. Ҡыҙыбыҙ быйыл 11-се синыфты тамамлай һәм Берҙәм дәүләт имтихандары тапшыра, шуға уға Аллаһы Тәғәлә үҙе ярҙам итһен, тел аҫыстары бирһен тип, дүртенсе бөткән улым менән һынау көнөндә намаҙ уҡыныҡ, кеҫәгә аҫса һалып алып, юлда хәйер биреп китеү йолабыҙ ҙа бар бындай осраҡтарҙа. Әйткәндәй, элек биш тинлекте аяҡ кейеменә һалып кейә торғайныҡ бит әле, ә ул аҡсаны кемгәләр биреп ҡыуандырһаң, тағы ла яҡшыраҡ икән.

**Миллилек - динебеҙҙең бер терәге ул. Сөнки һәр халыҡ үҙ юлы буйынса үҫешә, был юл сөннәт тип атала һәм уны Мөхәммәт бәйғәмбәр салаллаһу ғәләйһи үә сәләм ҡушҡан. Ул һәр халыҡты үҙенең йолалы менән дингә саҡырырға кәңәш иткән. Сөнки кеше аңына һеңгән милли йолалары аша ғына Аллаһы Тәғәләне таба ала.**

Беҙ башҡа халыҡтарҙың йолаһы аша динде дөрөҫ күрә, тура юл таба алмайбыҙ. Шуға милли һәм дини йолаларыбыҙ бергә уҡмашҡан, башҡа халыҡтарҙыҡы менән сағыштырғанда айырылып тора. Башҡорттарҙа өҫтәл тултырып һыйхөрмәт күрһәтеп, доғалар ҡылып, Ҡөрьән ашына йыйылалар һәм шунан кешенең күңеле булып ҡайта икән, икенсе халыҡта башҡасараҡ үтәләлер был йола.

Һуңғы йылдарҙа киң таралған тағы ла бер бик матур ғәҙәтебеҙ - яндан уҡ атыу. Беҙ уны милли йола ғына икән тиһәк, баҡтиһәң, Мөхәммәт бәйғәмбәр балаларҙы уҡ атырға, һыбай йөрөргә өйрәтегеҙ, тип әйткән. Халҡыбыҙға электән хас был шөғөл динебеҙгә һис ҡаршы килмәй. Милли кейемдәребеҙ ҙә шулай уҡ шәриғәт ҡанундарына ярашлы, зауыҡлы һәм үҙенсәлекле булған. Хатта түбәтәй тигән баш кейемен алғанда ла, башҡорттарҙа ул бер төрлө, Индонезия яғындағы мосолмандарҙа панама кеүек, ғәрәптәрҙә яулыҡҡа тартым итеп эшләнгән. Тағы ла буҙа ҡойоп эсеп, боронғоса мөнәжәттәр әйтеп, йырлап ултырыуҙар, милли уйындар ҙа беҙҙең күңел асыу һәм ул диндә һис тыйылмаған. Былар күңелдәребеҙгә нур өҫтәй торған ғәмәлдәр. Шуға, тыуған көндәрҙе ҡыуанып ҡаршы алыу, яҡындарыбыҙҙың шатлығын уртаҡлашыу, ҡотлау һүҙҙәре еткереү һәм шул йәшкә еткергән өсөн Хоҙайға рәхмәттәр әйтеү ҙә мөһим ғәҙәт. Быны дингә бәйләп тыйыу һис яраған эш түгел. Тик бына шундай нескә минуттарҙа шайтан ҡотортоуына бирелмәҫкә, тормошобоҙҙағы иҫтәлекле ваҡиғаларҙы айыҡ, тәртипле үткәрергә генә кәрәк. Милли йолалар дөрөҫ башҡарылғанда динебеҙҙе көсәйтә генә, ә дин - милләтебеҙҙең көсөн арттыра.

АФАРИН!

# ШАХМАТСЫ ЙОНДОҘҘАР

**Ете йәшлек Өфө ҡыҙы Реана Кинйәбулатова Рәсәйҙә йәш шахматсылар рейтингында беренсе урынға сыҡты, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Спорт министрлығынан. Өфөнөң "Толпар" спорт клубы тәрбиәләнеүсеһе 2016 йылғы шахматсы ҡыҙҙар рейтингында 1409 балл йыйған.**




Рейтингты Рәсәй шахмат федерацияһы баҫтырып сығарған. Шахмат федерацияһы реестрына бөтәһе 2626 ҡыҙ ингән. "Реана бәләкәйҙәр араһында беҙҙең берҙән-бер талантлы шахматсыбыҙ. Олораҡ төркөмдәрҙән халыҡ-ара шахмат федерацияһы мастеры, ФИДЕ-ның ҡатын-ҡыҙҙар мастеры 20 йәшлек Юлия Григорьева, композиция буйынса Европа чемпионаты призеры 18 йәшлек Камилла Байбурина, донъя чемпионатының көмөш призеры 16 йәшлек Урал Хәсәнов, Рәсәй йыйылма командаһы ағзаһы, блиц буйынса Европа чемпионаты призеры 14 йәшлек Ләйлә Табермакова, 12 йәшлек Артур Ғәниев һәм башҡалар бар. Ғөмүмән, беҙ шахмат "йондоҙҙарын" һәр йәштә тәрбиәләргә тырышабыҙ", - ти "Толпар" спорт клубы директоры Әмир Даукаев. "Реана төрлө кимәлдәге турнирҙарҙа уңышлы сығыш яһауы һөҙөмтәһендә рейтингын эҙмә-эҙлекле күтәрҙе. Ҡала һәм республика чемпионаттарында еңеүҙәрҙән башлап, донъя чемпионатында икенсе урын яуланы һәм юғары күрһәткескә өлгәште", - тип билдәләнеләр республиканың Спорт министрлығында.

**Эдуард ҠУҪҠАРБӘКОВ.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БУШЛАЙ ҺӨНӘР АЛ

**Башҡортостан халҡы бушлай һөнәри белем алыу курстарына яҙыла ала. Бының өсөн "Рәсәйҙә эш" порталын ҡулланырға кәрәк. Порталда "Мәшғүллеккә булышлыҡ итеү" федераль проекты буйынса бушлай ҡайтанан белем алыу программаһына яҙылып була.**

Программала нисек ҡатнашырға? Порталда авторизация үтегеҙ; белем биреү программаһын һайлағыҙ һәм ғариза бирегеҙ; өс көн эсендә үҙегеҙҙең мәшғүллек үҙәгендә һөнәри йүнәлеш алығыҙ. Ғаризаны ҡарау ваҡыты - ете көн; ғаризағыҙҙы хуплағандан һуң 10 көн эсендә һеҙҙе төркөмгә индерәләр.

Шуныһы мөһим: һәр төбәк өсөн һорау менән файҙаланған курстар һайлап алынған. Ҡайтанан белем алыуға: өс йәшкәсә балаһы менән декретта ултырған әсәләр; мәктәпкәсә йәштәге балалары булған һәм эшләмәгән әсәләр; пенсия алды йәшендәгеләр һәм эшһеҙҙәр; эштән сығарыу хәүефе янаған хеҙмәткәрҙәр яҙыла ала. Уҡытыу "Демография" милли проекты сиктәрендә уҙғарыла.

12+

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

✓ ***"Ҡайҙа тыуғанһың - шунда кәрәкһең" тигән халыҡ аҡылын иҫкә төшөрөп, Владимир Путин граждандарға үҙ аҡсаларын илдә тупларға, бында, үҙ өйөңдә аҡса эшләргә кәрәк, тип ҡабатланы.***



ДОНЪЯ ШАНДАУЫ

**Эйе, бөгөн дуҫ ҡәҙерен белер, икеләтә, өҫләтә һынар, баһалар мәл, әйтерең бармы. Көнбайыш илдәр властары үҙҙәренең мәкерле санкция ҡоршауын Рәсәй муйынына кейҙереп, уны бөтөн мирҙан айырып, япа-яңғыҙ ҡалдырырға, иркен сикләп, ил тормошон тар-мар итергә, тамам тонсоҡторорға күпме генә тырышмаһын, ниәттәре барып сыҡманы: кемдер әйтеүенсә, был кире һөҙөмтәгә килтерә башланы һәм күбеһенсә Көнбайыштың үҙенә "баш ауырыуы" булып әүерелде. Дөрөҫ, Рәсәй өсөн донъя "дуҫтар" һәм "дуҫ түгелдәр"гә бүленде, ләкин Ер йөҙөндә илебеҙ яңғыҙ тороп ҡалманы: байтаҡ булып сыҡты улар - Көнбайыш залимлыҡ иткән ошо осорҙа үҙҙәренә ҡарата төбәләсәк санкция уҡтарынан ҡурҡмайынса, Рәсәй менән мөнәсәбәттәр ҡорорға йөрьәт иткән дуҫ илдәр. Ниһайәт, беҙ ошо илдәр вәкилдәрен генә түгел, хатта ҡайһы бер "дуҫ булмаған" тарафтарҙан да килеп еткән эшмәкәрҙәрҙе үҙебеҙҙең илдә күрҙек, сығыштарын, фекерҙәрен тыңланыҡ, ниндәйҙер һығымталар яһаныҡ.**

# ЫҢҒАЙ ЙҮНӘЛЕШ АЛЫНДЫ ТҮГЕЛМЕ?




Һүҙ 14-17 июнь Санкт-Петербургта булып үткән 26-сы халыҡ-ара иҡтисад форумы хаҡында барғаны аңлашылалыр, сөнки тап ошо көндәрҙә тормошобоҙ бик күп күмәк сараларға бай булып та, Питерҙағы йыйынға еткәне барыбер булманы. Быйыл унда барлығы 130 илдән 17 мең вәкил ҡатнашты. Шуларҙан айырым иғтибарға лайыҡ Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренән генә лә 200 вәкил, Ҡытайҙан - 147, Һиндостандан - 58, Мьянманан - 50, Ҡаҙағстандан - 40, Кубанан - 39, АҠШ-тан 27 кеше килде һәм Алжир Президенты Әбделмәжит Теббун ҡунаҡ булараҡ ҡатнашты. Форум делегаттарының да, телетамашасыларҙың да төп иғтибары РФ Президенты Владимир Путиндың сығышына төбәлгәйне. Был ваҡиғаны хатта сит илдәрҙә лә һәм шул уҡ әлеге Көнбайыш тарафтарҙа ла иғтибар менән тыңлауҙары хаҡында мәғлүм ине.

"Суверенлы үҫеш - ғәҙел донъя нигеҙе. Киләсәк быуындар хаҡына көстәрҙе берләштерәйек!" тигән девиз менән барҙы форум. Рәсәй Президенты үҙенең сығышында Рәсәйҙең һуңғы йыл ярым эсендәге үҫешенә иҡтисади һығымта яһаны, киләсәккә пландар билдәләне һәм хөкүмәт ағзаларына аныҡ бурыстар йөкмәтте. Ил үҫеше өсөн былтырғы йылдың 2-се кварталы иң ауыры булды, тине ил етәксеһе. Ләкин дәүләт тарафынан дөрөҫ һайланған стратегия үҙ емештәрен бирә башланы: инфляция тарихи минимумға яҡынланы - 2,9 процент. Эшһеҙлек кимәле лә хәҙерге Рәсәй тарихында иң түбәне - 3,3 процент. Былтырғы күрһәткестәр буйынса 1,7 млн кеше фәҡирлектән арынды. Рәсәй нефть "энәһенән" азат була бара, нефть һәм газ килеменең үҫеше быйыл ғинуарҙа 9,1 процент тәшкил итте. Дәүләт финансы "бер аҙ ҡытлыҡҡа" ҡарамаҫтан, тотош алғанда тотороҡло килә. "Беҙ ирекле эшҡыуарлыҡты кинәйтеү юлын һайланыҡ, - тине В. Путин. - Быны иң төп һөҙөмтәһе - беҙҙең баҙарҙан киткән сит ил корпорацияларын алыштырыу булды". Әгәр бизнес эшселәргә һәм башҡа кешеләргә зыян килтермәй эшләй икән, уларҙың эшмәкәрлеген даими тикшереүҙәрҙе туҡтатырға кәрәк, тине ил етәксеһе. "Ҡайҙа тыуғанһың - шунда кәрәкһең" тигән халыҡ аҡылын иҫкә төшөрөп, Владимир Путин граждандарға үҙ аҡсаларын илдә тупларға, бында, үҙ өйөңдә аҡса эшләргә кәрәк, тип ҡабатланы һәм хөкүмәткә төп тармаҡ активтарын илгә ҡайтарыуҙы тиҙләтергә ҡушты.

**Президенттың тағы ла киләсәктә илдә эш хаҡтарын күтәреү мәсьәләһен ҡуҙғатыуы йөрәккә май булып яғылды, ләкин...тәү сиратта хәл ителә торған мәсьәләләр шул тиклем күп һәм мөһим, өҫтәүенә, ҡаҙна ҡытлығы ла янап ҡына тора - тимәк, юғары эш хаҡтарын күпме көтөргә кәрәк булыр - билдәһеҙ, сөнки был хаҡта Президенттан башҡа һүҙ ҡуҙғатыусы бер генә спикер ҙа, хөкүмәт ағзаһы ла булманы...**

Рәсәй Президенты үҙ сығышында махсус хәрби операция хаҡында ла һөйләмәйенсә булдыра алмай ине, әлбиттә, сөнки илдең иҡтисади проблемалары тап шул мәсьәләгә барып ялғана бит. Бөгөнгө Украина нацистарының кем икәнлектәрен һәм уларҙың кемде герой итеп күтәреүҙәрен тағы бер тапҡыр донъяға фаш итер өсөн Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында бандеровсыларҙың йыртҡыслыҡтары тураһында һөйләүсе видеоролик күптәргә Бандераның һәм уның ҡуштандарының ысын йөҙөн асҡандыр. Бөгөн Украина властары тап шуларҙы идеаллаштыра. "Беҙ быға ҡаршы көрәшергә тейешбеҙ", - тине В. Путин.

Петербург иҡтисади форумы һәм унда Рәсәй етәксеһенең сығышы билдәле сит ил мәғлүмәт сараларында сағылыш тапты һәм донъя шандауы булып яңғыраны. Ә бына Францияның Le Figaro, Испанияның El Pais һәм El Mundo, Италияның IIMessaggero гәзиттәре шулай ҙа форумдың төп темаһы булған иҡтисад мәсьәләләрен урап үтеү яйын ҡарап, нигеҙҙә Украина конфликты һәм "йәһүд халҡы өсөн ғәрлек" булған Зеленскийға ҡағылышлы эпизодтарҙы яҡтыртыу менән генә сикләнде. Уның ҡарауы, форум барышында сит илдәр вәкилдәре менән дөйөм сумаһы 3 триллион 860 млрд һум тәшкил иткән 900 килешеү төҙөлөүе донъя күләмендә Рәсәй менән һәр яҡлы хеҙмәттәшлектең отошло һәм ышанысло, шулай уҡ ике яҡ өсөн дә файҙалы булыуы хаҡында асыҡ раҫлап тора. Сәйәсмән Сергей Марков һүҙҙәре менән әйткәндә, "Путин бик тәүәккәл һөйләне, был уның башҡа сығыштарынан айырылып торҙо. Иң мөһиме - иҡтисадта ыңғайға табан йүнәлеш алынды".

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Һеҙҙең ғаиләлә ниндәй милли һәм дини йолалар күҙәтелә?

***Фәүзиә ҠОТЛОГИЛДИНА, Ғафури районы Ватан ауылы старостаһы, ағинәй:*** Дини һәм милли йолаларҙың икеһенә лә берҙәй тигеҙ иғтибар бүлергә, алтын урталыҡ һаҡлап йәшәргә кәрәк, тип иҫәпләйем. Береһен генә тотоп, икенсеһен һанға һуҡмау ярамай. Ғаиләбеҙҙә лә шулай итәбеҙ. Мәүлит көнө, Ураҙа, Ҡорбан кеүек дини байрамдарҙа ҡарт өләсәй-олатайҙарыбыҙҙы иҫкә алып, аяттар уҡытабыҙ. Балаларыма һәр кем үтәй торған дини ғәмәлдәрҙе, тәү сиратта башҡорт телендә һөйләшергә, башҡорт ғаиләләре төҙөргә кәрәклекте күндереп үҫтерҙем. Хәҙер инде ейән-ейәнсәрҙәремә шул уҡ тәрбиәне бирәм, уларға туған телебеҙҙе, башҡорт йырҙарын, бейеүҙәрен өйрәтәм. Эй күңелем була шул балаларға, сөнки берәй байрамға, тыуған көндәргә йыйылһаҡ, "Әйҙәгеҙ, үҙебеҙҙең йырҙы йырлайыҡ", тием дә, күмәкләп йырлап ебәрәбеҙ. Бәғзеләрҙең "Мосолмандарға йырлап-бейеп йөрөргә ярамай" тигәндәрен төптө дөрөҫ түгел, тип иҫәпләйем. Ата-бабаларыбыҙ борондан оҙон көйҙәр йырлап, ҡурай уйнап, шаян таҡмаҡтар әйтеп, тыпырлатып бейеп, күңелдәрен асҡан бит.

Ауылыбыҙҙы әле "Ватан" тип йөрөтһәк тә, ул ғүмер буйы Родина тип аталып, төрлө милләт кешеләре йәшәгән төбәк. Шуға беҙҙең башҡорттарыбыҙ ҙа урыҫ йолаларына таянып туй яһай, хатта балаларыбыҙ христиандарҙың Пасхаһында йомортҡа йыйырға сыға торғайны. Был хәлгә күнегеп тә бөткәйнек. Бер нисә ауылдаш ҡатын-ҡыҙ менән "Ағинәй" йәмғәт ойошмаһының эшмәкәрлегенә ҡушылдыҡ та, милләттәштәргә үҙебеҙҙең башҡорт йолаларын өйрәтә башланыҡ. Шунан кешеләр улдары өйләнгәндә килен төшөрөргә, һыу юлы күрһәтергә беҙҙе саҡыра башланы. Йоланы бик боронғоса уҡ итеп башҡармаһаҡ та, матур теләктәр әйтеп, Селтер шишмә юлын күрһәтеп, көмөш тәңкә һалдырабыҙ һәм йәш килендәр һыу алып ҡайта. Әйткәндәй, яҡынтирәләге атамаһыҙ һыу сығанаҡтарына ауыл балалары менән башҡортса исем ҡушып, яҙыулы билдәләр ҙә ҡағып сыҡтыҡ. Был үҙе үк бер матур йолаға әүерелергә тейеш ғәмәл, сөнки ер-һыу атамаларын руссаға йәмһеҙ итеп әйләндереп ҡулланыуҙар, йә бөтөнләй яңы русса атама ҡушып, башҡортсаһы онотолған осраҡтар күп. Ҡарға бутҡаһы, Кәкүк сәйе, Ямғыр һорау кеүек матур милли йолаларҙы ла ауылдаштар менән бергә күркәм байрам итеп ойоштороп торабыҙ. Улар ҙа тәбиғәткә ҡарата һаҡсыл ҡараштa булырға өйрәтә. Милли аш-һыуҙар бешереү, үҙебеҙҙең милли эсемлектәрҙе эшләү ҙә боронғо ғөрөф-ғәҙәтте, йоланы тотоу тип иҫәпләйем. Бына шулай, һәр нәмәлә алтын урталыҡ һаҡлап, дини һәм милли йолаларыбыҙҙы берҙәй тотоп йәшәргә тырышабыҙ.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумында Рәсәй төбәктәрендә Инвестиция мөхите торошоноң милли рейтингы һөҙөмтәләре иғлан ителде. Уны йыл һайын эшҡыуарҙарҙың фекерҙәренә таянып, Стратегик башланғыстар агентлығы әҙерләй. 2022 йыл йомғаҡтары буйынса Башҡортостан дүртенсе урынды алды. Рейтингтың тәүге ике баҫҡысында - Мәскәү һәм Татарстан, ә өсөнсө урынды Мәскәү, Түбәнге Новгород һәм Төмән өлкәләре бүлеште. Башҡортостан тәүге тапҡыр рейтингтың 4-се урынында, быға саҡлы ике йыл рәттән бишенсе урынды биләгәйне.

✓Башҡортостан делегацияһы Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумының 70 сараһында ҡатнашты. Башҡортостан майҙаны 400 квадрат метрлыҡ стенд әҙерләгәйне. Экспозицияны 5 мең кеше ҡараны. Ошонда уҡ форумда иң яҡшыһы тип танылған башҡорт аш-һыуы рестораны эшләне. Форумда бизнес менән 100 миллиард һумлыҡ 27 килешеү төҙөлдө. "Магнит" федераль селтәре менән магазин кәштәләрендә Башҡортостан фермерҙары һәм агрокомпаниялары продукцияһының өлөшөн арттырыу тураһында һөйләшеп килешелде.

✓Дәүләт Думаһы икенсе уҡыуҙа "Мәғариф тураһында" законға төҙәтмәләр ҡабул итте. Уға ярашлы, махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар ҡабул итеү имтихандары һөҙөмтәләре буйынса айырым квота сиктәрендә юғары уҡыу йорттарына бюджет урындарға инә ала. Түләүле нигеҙҙә уҡып йөрөгәндәр бушлай уҡыуға күсергә мөмкин. Шулай уҡ документта юғары уҡыу йортона ингәндә саҡырыу буйынса хәрби хеҙмәтте ҡаҙаныш тип иҫәпләргә тигән тәҡдим бар.

✓Башҡортостанда йыл һайын аҡсалата премия алырға хоҡуҡлы уҡытыусылар исемлеге киңәйтелде. 2023 йылдан алып туған тел уҡытыусылары һәм полилингваль мәктәп педагогтары ла ошо исемлектә бар. Йыл һайын юғары һөҙөмтәләр күрһәткән 50 башҡорт һәм рус теле уҡытыусыһына 50 мең һум тапшырыла. Былтыр сентябрь айында үткән төбәк-ара туған тел һәм әҙәбиәт уҡытыусылары форумында республика етәксеһе Радий Хәбиров туған тел уҡытыусыларының Башҡортостан Хөкүмәтенең аҡсалата дәртләндереү конкурсында ҡатнашыу мөмкинлеген әйтте.

✓ **Афған һуғышында ун йыл эсендә Советтар Союзынан ун биш меңгә яҡын һалдат үлгән булһа, бөгөнгө статистика мәғлүмәттәренә ярашлы, Рәсәйҙә алкоголь арҡаһында бер йылда илле меңдән ашыу кеше донъянан киткән!**



УЙЛЫҒА - УЙ




# "МИСТЕР СИДР" ҮЛТЕРӘ.

## Алкоголь ҡорбандары былар ғына түгел

**Ошо арала күрше өлкәләрҙә йөҙгә яҡын кешенең "Мистер сидр" тип аталған алкоголь суррогаты менән ағыуланып, шуларҙың утыҙҙан ашыуының үлеме хаҡында шау-шыу бара. Был хәл бер нисә йыл элек энәлек төнәтмәһе менән булған ваҡиғаны хәтерләтеп ҡуя. Әлбиттә, был эсемлектәрҙең ярлығында айырма бар барлығын, әммә кеше үлеме - үлем булып ҡала инде. Тәнгә һөртә торған төнәтмәнең тышына уның эсергә ярамағанлығы һәм ғүмер өсөн хәүефле булыуы хаҡында яҙылған булһа, "Мистер сидр"ҙың тышында ундай яҙыуы ла юҡ, имеш. Иҫләүемсә, энәлек эсеп үлгән кешеләрҙең һаны (иҫкәртеүле яҙыуы булған хәлдә лә!) сидр ҡорбанынан хатта мәртәбәләргә күберәк ине. Урыҫта ошондай бер әйтем йөрөй: "Кто ищет, тот всегда найдет". Хәмер эскән кеше үҙенең эҙләгәнен барыбер таба инде ул...**

Сидр яһыусы шәхси эшҡыуарҙың ҡулға алыныуы хаҡында ла хәбәр ишетелде. Ғәйебе асыҡланғас, закон буйынса ул үҙ язаһын да алыр, тик әлеге үлгән кешеләр был яҡты донъяға ҡабат бер ҡасан да әйләнеп ҡайтмаясаҡ. Һәр саҡ иҫерткес нәмә эсергә "тамағы ҡырҡылдап торған" бәғзе әҙәм балаһының ана шул хәҡиҡәтте һаман аңларға теләмәүе үкенесле. Мин табип булып хеҙмәт иткән стратегик ракета часында төрлө аппаратура деталдәрен һөртөп таҙарта торған метил спирты (метанол), этиленгликоль, автотранспорттың радиаторына ҡойорға тәғәйенләнгән "антифриз" тип аталған шыйыҡсаны һалдаттар эсеп үлгән бер нисә осраҡ менән танышмын. Был малайҙарҙы ҡотҡарырға маташып та, күпселек осраҡта реанимацион саралырыбыҙҙың ыңғай һөҙөмтә бирмәгәнен хәтерләйем. Шуныһы хаҡында ла әйтеү кәрәк: егеттәребеҙҙең береһе лә яңылыш ҡына йә иһә суицидаль маҡсат менән эсмәгән, ә фәҡәт - иҫерәү өсөн... Шундай хәлдәрҙе миҫал итеп килтереп, ана шул шыйыҡсалар менән ағыуланыу бөйөр эшмәкәрлегенең тулыһынса туҡталыуы һәм үлемгә килтереүе хаҡында частарҙа даими рәүештә инструктаж булып тороуына ла ҡарамаҫтан, барыбер ҡуймайҙар бит, ауыҙыңа... май булғыры! Хәрбилектән бушанғаныма ла инде ике тиҫтә йыл үтеп китте, бәлки, бөгөнгө һалдаттар уның менән булышмайҙыр... Әрмелә, ғәҙәттә, һалдат үлеме өсөн һәр саҡ командирҙы ғәйепләү ғәҙәткә ингән. "За слабый контроль над личным составом", "За безответственное отношение к исполнению служебных обязанностей" тигән һымаҡ формулировка бирепр, төрмәсә яуапҡа тарттырылыу ҡурҡынысы хаҡында белмәгән офицер юҡ. Тормош шулай китеп бара, ә, әлеге әйтмешләй, "сидрҙар" һаман сидрлыҡ итә бирә...

Алкоголь суррогаттары килтергән шундай бер нисә үлем хаҡында хәбәр ишетелеп ҡалһа, мин һәр саҡ "таптаҙа" араҡынан да илебеҙҙә йыл һайын тиҫтә, йөҙәрләп кенә түгел, ә меңәрләгән кешенең үлеп тороуы хаҡында уйланырға мәжбүр булам. Ысынлап та, ҡәҙерле дуҫтар, шундай "һәйбәт" шарап араҡыһында килгән һәр бәлә-ҡаза һайын "саң ҡаға" башлаһаҡ, бөтә гәзит-журнал биттәре, шуның менән тулыр ине бит! Һуғыш яланында һәләк булғандарға ҡарағанда ла күберәк был хәмер ҡорбандары тураһында һөйләүселәр һирәк. Күрәһең, был ғәҙәти хәл генә булып бара. Ә шулай ҙа нормаль хәмерҙән ағыуланып үлгән кеше хаҡында "ул еңелсә генә үлде" тип әйтеп булмай ҙа баһа! Үлем – барыбер үлем, мәрхүмдең ғаиләһе, яҡындары өсөн - оло ҡайғы булып ҡала бит инде. Мәҡәләләремдә йыш ҡына ошондай сағыштырыуҙар килтерәм: Афған һуғышында ун йыл эсендә бөтә Советтар Союзынан ун биш меңгә яҡын һалдат һәм офицер үлгән булһа, бөгөнгө статистика мәғлүмәттәренә ярашлы, Рәсәйҙә алкоголь арҡаһында былтыр ғына, йәғни бер йылда илле меңдән ашыу кеше донъянан киткән! Уларҙың барыһы ла сидр-фәлән һымаҡ суррогат эсеп үлмәгән, хатта күпселеге ифрат та "һәйбәт" араҡынан һәләк булған. Был иҫәпкә, әлбиттә, спиртлы эсемлек менән ағыуланыуҙарҙан, алкоголь фонындағы инфаркт-инсульттарҙан тыш, эскелек менән бәйле булған төрлө аварияләр, суицид осраҡтары ла ингән. Әммә улар ҙа барыбер хәмер сәбәпле тип һанала бит инде. Һин дә мин йөрөп ятҡан "ыҙдарауай" ир-егеттәр күҙ асып йомғансы юҡ була ла ҡуя.

Оҙайлы хәрби хеҙмәтемде тамамлап, тыуған яҡҡа йәшәргә ҡайтҡас, оҙаҡ йылдар күрмәй торған бәғзе таныштыы осратып, "Фәлән кеше ни хәлдә әле?" тип һораша башлаһаң, "Ул ни әллә ҡасан мәрхүм инде" тигән яуапты йыш ҡына ишетеп, бошона инем. Үкенесле, әммә, хәҙер эскелек менән бәйле шундай осраҡтар, исмаһам, гүзәл затыбыҙҙы ла ситләтеп үтмәй башлаған бит. Сәскәләй матур, бер ҡарауҙа ғашиҡ булырҙай һылыуы, шат йөҙлө булып хәтерҙә ҡалған (хатта йәш сағында күҙең төшөп йөрөгән) берәй таныш ҡыҙҙың донъя көтә башлағас, эскелеккә һабышып китеүе, шул афәттән ҡотола алмай һәләк булыуы хаҡында хәбәрҙәр булып тетрәнәһең. Шулай уҡ, бер ғаилә эсендә генә ҡасандыр арыҫландай көслө, "ер емертеп" баҫып йөрөгән, һабантуйҙағы көрәштәрҙә ал бирмәгән дүрт-биш ағай-эненең хәмер арҡаһында бер-бер артлы тиге донъяға киткән осраҡтарҙың күп булыуы аяныслы. Эскелектән ирле-ҡатынлы (береһе иртәрәк, икенсеһе - һуңыраҡ) үлгән, ә балалары артабан ата-әсә традицияһын дауам итеп, шул уҡ һаҙлыҡҡа бата барған ғаиләләр менән кем таныш түгел? Ағыуланып, кемдер әйтмешләй, "бахмурҙан" үләме, йә "алкоголь психозы" мәлендә үҙ-үҙенә ҡул һаламы, тышта туңып һәләк буламы, бер-береһен юҡ итәме, былар - барыһы ла "хәмерҙең эше" бит инде. Бындай миҫалдарҙы эҙләп, әллә ҡайҙа бараһы юҡ, улар һәр ауылда етерлек.


**(Дауамы 6-сы биттә).**


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Һеҙҙең ғаиләлә ниндәй милли һәм дини йолалар күҙәтелә?

***Ринат РАМАҘАНОВ, "Арғымаҡ" этно төркөмө етәксеһе:*** Милли һәм дини йолалар беҙҙең атай-олатайҙарҙан мираҫ итеп тапшырылған йәшәү рәүешебеҙ инде. Ҡөрьән-Кәримдә ҡушылғанса, сөннәткә бәйле дөрөҫ дини йолаларҙы мотлаҡ үтәйбеҙ. Бына, мәсәлән, яҡынлашып килгән Ҡорбан ғәйетен дә байрам итмәй ҡалдырғаныбыҙ юҡ. Быйыл ғаиләбеҙгә шатлыҡ өҫтәп, өсөнсө балабыҙ донъяға килде һәм ошо ваҡиғаға арнап, ҡорбан салырға тигән ниәтебеҙ ҙә бар. Бындай байрамдарҙа матур итеп табын әҙерләйбеҙ, яҡындарыбыҙҙы, дуҫтарыбыҙҙы саҡырып, ҡәҙер-хөрмәт күрһәтәбеҙ. Ғөмүмән, һәр йоманы ла ниндәйҙер тәмле ризыҡтар бешереп, уйындар ойоштороп, балаларға иғтибарҙы күберәк бүлеп үткәрергә ғәҙәтләнгәнбеҙ. Улар йоманың бәрәкәтен белә, был көндөң байрам икәнен аңлай һәм был көндөң бала саҡтарынан күңелдәренә яҡын, яҡты бер йола булып һаҡланырына иманыбыҙ камил.

Халҡыбыҙҙың һәр ғөрөф-ғәҙәте, йолаһы дини йолалар менән йәнәш, тығыҙ бәйләнгән. Күптәр хәрәфәттәр тип ышанмағандарының да төп асылы тәрбиәүи яҡтан әһәмиәтле. Мәсәлән, балаларға өйгә ингәндә-сыҡҡанда ҡайһы аяҡты алдан баҫырға, ашап торғандан һуң өҫтәлде йыйыштырырға, һауыт-һабаны йыуып ҡуйырға, ризыҡты ҡаплап ҡуйырға кәрәк, тигән ябай ғына ҡағиҙәләрҙе өйрәтергә, өлкәндәргә ҡарата хөрмәт, әҙәп-әхлаҡ, үҙ-ара матур мөнәсәбәттәр тәрбиәләргә тырышабыҙ. Аҡмулланың: "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!" - тип өндәп, үҙ өҫтөндә эшләү, аҡыллыңы үҫтереү, әхлаҡлы булыу кәрәк тип иҫкәртеүен дә әйтеп кенә торабыҙ. Улар доғаларҙы, намаҙ һәм тәһәрәт алыу тәртиптәрен белә, салауаттар, зекер әйтәләр, насар төш күрмәҫ өсөн йоҡлар алдынан доға уҡып яталар. Шөкөр итеп йәшәргә кәрәк, тип өйрәтәбеҙ үҙҙәрен.

Ә инде милли йолаларға килгәндә, бик матур байрам саралары күп һәм уларҙа ҡатнашып торабыҙ. Улым һәм ҡыҙым йөрөгән балалар баҡсаһында, хәҙер Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһында тәрбиәселәр, уҡытыусылар башҡорт мөхитен йәнләндереп, төрлө саралар үткәрә. Быны яныраҡ Ғаилә көнөнә, Салауат Юлаевтың тыуған көнөнә арналған саралар, улым йөрөгән йәйге мәктәп лагерында "Һылыуҡай" конкурсы үтте. Башҡортса һөйләшеп, башҡорт мөхитендә үҫһендәр өсөн тырышабыҙ. Шуға өйөбөҙҙә лә төп талап - башҡортса һөйләшеү. Баштарына суҡып тормаһаң, балалар тиҙ арала русса ҡатыштырып һөйләшергә, йә тиҫтерҙәре менән русса аралашыуға күсергә әҙер тора. Беҙҙең балаларҙың йәмәғәт урындарында ҡыҫҡырып башҡортса "атай", "әсәй" тип өндәшеүенә үтеп барған осраҡлы кешеләр ҙә иғтибар итә, әйләнеп ҡарай, ололар килеп маҡтап, рәхмәт әйтеп китә. Шуға ла беҙгә, йәш ғаиләләргә, быға тиклем үтәп килгән милли йолаларыбыҙға тағы бер иң мөһимен - өйҙә үҙ туған телебеҙҙә һөйләшеүҙе өҫтәү кәрәк. Һәр башҡорт ғаиләһендә ошо милли йола күҙәтелергә тейеш, ул сакта башҡаһы үҙенән-үҙе яйға һалыныр һәм йәш быуын үҙ мөхитебеҙҙә тәрбиәләнер.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда ай һайын 25 мең медицина хеҙмәткәренә махсус социаль түләүҙәр күсерелә. Йыл башынан алып ошо маҡсатҡа 769 миллион һум тотонолған. Был турала Рәсәй Социаль фондының республика буйынса бүлексәһенең матбуғат хеҙмәте хәбәр итте. Төп хеҙмәт хаҡына өҫтәмәләр һаулыҡ һаҡлау өлкәһенең беренсел звеноһы табиптары һәм белгестәре, район дауаханаларында, шулай уҡ ашығыс ярҙам станцияларында һәм бүлексәләрендә эшләгән табиптар өсөн тәғәйенләнгән. Өҫтәмә түләүҙең суммаһы 4,5 меңдән 18,5 мең һумғаса тәшкил итә.

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы "Башҡортостан Республикаһында махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләре тураһында" Башҡортостан Республикаһы Законына үҙгәрештәр индереү тураһында" закон проектын ҡараны. Закон махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәһе сиктәрендә туризм критерийҙарын һәм үҙенсәлектәрен билдәләгән яңы статья менән тулыландырыласаҡ. Критерийҙар араһында - махсус йыһазландырылған урындарҙа һәм маршруттарҙа туризмды ғәмәлгә ашырыу, мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау.

✓Башҡортостанда IT-өлкәһе белгестәре өсөн ипотека кредиты ставкаһын 1 процентҡа кәметтәләр. Республика айтишниктары 4 процент менән ипотека алырға мөмкин. Был программа Ипотека программаларының берҙәм операторы - ДОМ.РФ ярҙамында ғәмәлгә ашырыла. Башҡортостан дәүләт идаралығының һанлы үҫеш министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, 2022 йылдың мартында "айтишниктар өсөн 5 процент ипотека" программаһы башланғандан алып республикала 796 ғариза бирелгән, улар буйынса 525 кредит хупланған. Бөтәһе 1,3 миллиард һумлыҡ 197 ипотека кредиты алынған.

✓Башҡортостан Сауҙа һәм хеҙмәттәр министрлығы республика Хөкүмәтенең "Башҡортостан Республикаһында социаль туклануҙы үҫтереү" дәүләт программаһын раҫлау тураһындағы ҡарар проектын әҙерләгән. Уның маҡсаты - айырым категория граждандарҙы белем биреү учреждениеларында, балаларҙы һауыктырыу һәм реабилитациялау, социаль хеҙмәтләндереү ойошмаларында сифатлы туклануы менән тәьмин итеү. Программа халыҡ араһында сәләмәт туклануы системаһын формалаштырыуға һәм популярлаштырыуға йүнәлтелгән. Уны тормошҡа ашырыуҙа дәүләт ойошмаларының ҡатнашыуы күҙ уңында тотолған.

***✓ "Бөгөн сит кешегә фатир биреү өсөн күп функциялы үҙәккә килеп, кәрәкле ҡағыҙҙарға ҡул ҡуйыу ҙа етә, - ти Константин Толкачев. - Был ябай схеманы мутлашыусылар ҡуллана. Уларҙың ҡорбандары - яңғыҙ йәшәгән оло йәштәгеләр."***



*ҠЫҪҠАСА*

# БЫЛ СПОРТ ТӨРӨ...

**XXVI Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров һәм Рәсәйҙең Дзюдо федерацияһы президенты Сергей Соловейчик республика Хөкүмәте менән Рәсәйҙең Дзюдо федерацияһы араһында республикала ошо спорт төрөн үҫтереү йәһәтенән хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуйҙы.** Документ Башҡортостанда дзюдо менән шөғөлләнеүселәр һанын арттырыуҙы, әлеге спорт төрө буйынса спортсыларҙың спорт һөҙөмтәләрен яҡшыртыуҙы, дзюдо буйынса тренерҙарҙың һәм инструкторҙарҙың квалификацияһын күтәреүҙе, матди-техник базаны үҫтереүҙе, сит ил спортсылары ҡатнашлығындағы рәсми спорт ярыштарын уҙғарыуҙы күҙ уңында тота. Башҡортостанда дзюдо спорт төрө булараҡ 60-сы йылдар аҙағында Николай Данилович Попов ярҙамында барлыҡҡа килгән, хәҙер ул республикабыҙ өсөн төп спорт төрө булып тора. Дзюдо республиканың 29 ҡала-районында үҫтерелә, 12 муниципаль спорт мәктәбендә һәм олимпия резервындағы спорт мәктәптәрендә "дзюдо" бүлектәре эшләй, унда 4000-дән ашыу кеше шөғөлләнә. Республиканың йыйылма командаһы менән эшләгән тренерҙар составына 79 белгес инә.

✓ **Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров 2023 йылдың 24 июнендә республиканың дәүләт граждандыҡ хеҙмәте етәкселәрен һәм белгестәрен эшкә сығарыу тураһында бойороҡҡа ҡул ҡуйған.** Был шәмбелә эшкә сыҡҡан хеҙмәткәрҙәргә шишәмбе, 27 июндә, ял бирелә. Урындағы үҙидара органдары етәкселәренә муниципаль хеҙмәткәрҙәргә ҡарата шундай уҡ ҡарар ҡабул итергә кәңәш ителә. Бынан тыш, 24 июндә башҡа эш биреүселәргә лә хеҙмәт коллективтарын эшкә сығарырға тигән тәҡдим бар. Башҡортостан Хөкүмәте премьер-министры Андрей Назаров һүҙҙәренсә, ял көндәрен күсереү 26-28 июндә Өфөлә "Рәсәй-Беларусь" форумын уҙғарыу бәйле. Ә 28 июндә республикала Ҡорбан байрамы билдәләнә.

✓ **Дәүләт Думаһы депутаттары һуңғы уҡыуҙа махсус хәрби операция зонаһында булған йәки Рәсәйҙән ситкә хәрби хеҙмәткә ебәрелгән яугирҙарҙың ғаилә ағзаларының торлаҡ хоҡуҡтарын яҡлаған закон ҡабул итте.** Билдәле булыуынса, ғаиләләр элекке эш урынындағы торлаҡ менән файҙаланыуҙы дауам итергә мөмкин. Әгәр торлаҡ ҡуртымға алынған икән, ҡуртым өсөн компенсация һаҡлана. Түләүҙәрҙең күләме хәрби дәрәжәгә, вазифаға һәм күпме йылдар хеҙмәт итеүенә бәйле түгел. Закон милли гвардия ғәскәрҙәре хеҙмәткәрҙәренә лә ҡағыла, тип билдәләне Дәүләт Думаһы спикеры Вячеслав Володин. "Был хәрби хеҙмәткәрҙең ғаиләһе объектив сәбәптәр буйынса унын артынан яңы урынға бара алмаған осраҡта кәрәк", - тине парламент рәйесе.

✓ **Башҡортостанда "Бурыслы" иҫкәртеү сараһы старт алды. Был хаҡта республика ЮХХДИ матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итәләр.** Дәүләт автоинспекцияһы хеҙмәткәрҙәре, юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоусыны туҡтатып, уны мәғлүмәттәр базаһы буйынса тикшерә. Түләнмәгән штрафы булһа, административ материал төҙөлә. Судта ғәйепләне 15 тәүлеккә ҡулға алыуҙары ихтимал. Рәсәй Федерацияһының Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында кодексының 20.25-се статьяһына ярашлы, йыл башынан Дәүләт автоинспекцияһы хеҙмәткәрҙәре административ штрафты ваҡытында түләмәгән 4500-ҙән ашыу водителде административ яуаплылыҡҡа тарттырған. Шуға бәйле автоһәүәҫкәрҙәргә водитель тарихын тикшерергә кәңәш итәләр. Штраф бар икән, мотлаҡ түләп ҡуйырға кәрәк. Сара 25 июнгә тиклем дауам итә.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# БАШЛАНДЫ!

**Башҡортостандың юғары уҡыу йорттарында ҡабул итеү кампанияһы старт алды. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров абитуриенттарға уңыштар һәм һайлаған университеттарына уҡырға инеүҙәрен теләне.**

"Йылдан-йыл күберәк йәштәребеҙ бушлай юғары белем алһын өсөн маҡсатлы рәүештә эш алып барабыҙ. Быйыл республика университеттарында 14 886 бюджет урыны бар (2022 йылға ҡарағанда 512-гә күберәк).

Бөгөн беҙҙең юғары уҡыу йорттары баш ҡаланыҡылар менән көнәркәшлек итергә һәләтле. Был йәһәттән республикала уңышлы эшләгән Евразия ғилми-белем биреү үҙәгенең өлөшө ҙур. Башҡортостан университеттары "Өҫтөнлөк-2030" федераль программаһында ҡатнаша. Өфө фән һәм технологиялар университетында алдынғы инженерҙар мәктәбе уңышлы эшләп килә. Нефть университетындағы стартап-студия һәм индустриаль партнерҙар менән әүҙем эш итеү һөҙөмтәһендә Башҡортостан - студенттарҙың хупланған стартап-проекттары буйынса алдынғы урындарҙа. Беҙ фән лидерҙарын үҫтерәбеҙ - студенттарыбыҙ яңы идеяларҙы сәнәғәткә әүҙем индерә.

Һәләтле йәштәрҙе финанс яҡтан дәртләндерәбеҙ. Беҙҙең университеттарҙа олимпиадаларҙа еңеүселәр һәм Берҙәм дәүләт имтиханында юғары балл йыйғандар өсөн юғары стипендия ҡаралған", - тип яҙа республика етәксеһе.

# ЙӘШТӘР ҠОРО

**24 июндә, Рәсәй һәм Беларусь төбәктәренең X юбилей форумы алдынан, Башҡортостандың баш ҡалаһында Рәсәй һәм Беларусь йәштәре форумы була. Сараны Йәштәр эштәре буйынса федераль агентлыҡ, Белоруссияның Мәғариф министрлығы һәм Белоруссияның республика йәштәр союзы менән берлектә республика хөкүмәте, йәштәр сәйәсәте буйынса дәүләт комитеты ойоштора.**

"Бөгөн Рәсәй менән Беларусь Республикаһы араһындағы дуҫтарса мөнәсәбәттәр - илдәребеҙҙең тарихи үткәне һәм заманса һөҙөмтәле коммуникация. Был берҙәмлектә йәштәребеҙҙең алдынғы идеялары ҙур роль уйнай. Форумда студенттар, ауыл һәм ижади йәштәр вәкилдәре, йәш ғалимдар, хәрби-патриотик клубтарҙа шөғөлләнеүселәр үҙҙәренең платформаларын сиктәрендә эшләй. Был йәштәр араһында яңы халыҡ-ара хеҙмәттәшлек йүнәлештәрен үҫтереү өсөн шәп майҙансыҡ", - тип билдәләне Башҡортостандың йәштәр сәйәсәте буйынса дәүләт комитеты рәйесе Яна Гайдук. Форумдың программаһы дүрт тематик йүнәлешкә бүленгән: агросәнәғәт комплексы һәм ауыл биләмәләре йәштәре, илһөйәрлек ойошмаларында ҡатнашыусылар, йәштәр ойошмаларының, балалар һәм студенттар берләшмәләренең ижади лидерҙары, студент отрядтары һәм эшсе йәштәр вәкилдәре өсөн. Шулай уҡ Өфө - Брест - Минск халыҡ-ара йәштәр телекүпере һәм Рәсәй-Белоруссия йәштәренең үҙ-ара эш итеү перспективалары мәсьәләләре буйынса стратегик сессиялар ҡаралған. Ҡатнашыусылар "ПРОФфест" Бөтә Рәсәй һөнәрҙәр йәрминкәһенә, республиканың Хәрби дан музейына бара, Еңеү паркында Мәңгелек утҡа һәм мемориалдарға сәскәләр һалыу тантанаһында, Йәштәр көнө байрамында ҡатнаша.

# БАШҠОРТ АТЫН ДАНЛАП...

**Баймаҡ районында башҡорт тоҡомло аттарҙың икенсе "Башҡорт аты" халыҡ-ара фестивален үткәреү буйынса ойоштороу комитетының күсмә кәңәшмәһе булды.**

Унда Башҡортостан Башлығы хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев, республиканың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова, Баймаҡ районы башлығы Фәнис Әминев ҡатнашты. Ҡатнашыусылар фестивалде ойоштороу мәсьәләләрен тикшерҙе. Атап әйткәндә, быйыл сара 11-13 августа Баймаҡ районының Граф күле буйында үтәсәге иғлан ителде. "Былтыр "Башҡорт аты" фестивале яҡшы кимәлдә уҙҙы. Ул ауыл хужалығын, ғөмүмән, республика иҡтисадын үҫтереү өсөн бик кәрәк. Билдәле булыуынса, башҡорт тоҡомло ат бик сыҙамлы, шуға күрә уның таҙа тоҡомон һаҡлау мөһим. Фестиваль бик ҡыҙыҡлы булыр һәм тиҙҙән ул үҙебеҙҙең генә түгел, сит ил туристарын да йәлеп итер тип ышанабыҙ", - тип билдерҙе Урал Килсенбаев. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың указы буйынса 2022 йылдың 29-30 июлендә Баймаҡ районында "Башҡорт аты" халыҡ-ара фестивале ойошторолдо. Фестиваль республикала йылҡысылыҡ, ҡымыҙ эшләү һәм халыҡ кәсептәре традицияларын һаҡлауға һәм үҫтереүгә, башҡорт тоҡомло аттарҙың һанын арттырыуға һәм популярлаштырыуға йүнәлтелгән.

# АЛДАНМАҺЫНДАР ӨСӨН...

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы торлаҡ биреү тәртибен яңынан ҡараясаҡ. Был турала республика парламенты спикеры Константин Толкачев "Башинформ" мәғлүмәт агентлығына хәбәр итте.**

Уның әйтеүенсә, ябайлаштырылған бүләк итеү процедураһы кешене берҙән-бер торлағынан мәхрүм итергә мөмкин, шуға күрә күсемһеҙ милек менән операцияларҙың ғәмәлдәге схемаһын кайтанан ҡарарға кәрәк. Шуға бәйле Константин Толкачев торлаҡ бүләк итеү буйынса килешеү тәртибен яңынан ҡарарға тәҡдимдәр әҙерләргә ҡуша. "Бөгөн сит кешегә фатир биреү өсөн күп функциялы үҙәккә килеп, кәрәкле ҡағыҙҙарға ҡул ҡуйыу ҙа етә, - ти Константин Толкачев. - Был ябай схеманы мутлашыусылар ҡуллана. Уларҙың ҡорбандары - башлыса яңғыҙ йәшәгән оло йәштәгеләр. Әле тағы ла ошондай эш судта ҡарала. Өфөлә йәшәгән оло йәштәге ҡатын үҙендә торған кешегә фатирын бүләк итә. Эштең аҙағы һынғай ҡуҙаллана, былдай осраҡтарҙа суд бүләк итеүсенең һаулығын, башҡа объектив шарттарҙы иҫәпкә ала һәм зыян күреусе яғына сыға. Шуға ҡарамаҫтан, ябайлаштырылған игәнә процедураһы кешене берҙән-бер йортонан мәхрүм итә алыуын иҫәпкә алып, уны кайтанан ҡарау талап ителә". Мәҫәлән, Өфөлә насар ишеткән һәм күргән 89 йәшлек ҡатын үҙенең ике бүлмәле фатирын 25 йәшлек ҡуртымға алыусыһына бүләк итеү тураһында күп функциялы үҙәктә килешеүгә ҡул ҡуя. Был турала белеп ҡалған ейәнсәре судҡа мөрәжәғәт иткән. Ир әбейҙең документҡа үҙ ирке менән ҡул ҡуйыуын һәм килешеүҙең ғәмәлдә булыуын талап итә. Хоҡуҡи көрәш дауам итә. Парламент спикеры ҡушыуы буйынса Дәүләт Йыйылышында ошо темаға түңәрәк өҫтәл үтте. Фекер алышыуҙа ҡатнашыусылар мәсьәләнең сиселешен табырға уйлай. Депутаттар ҡануниәтте камиллаштырыуға йүнәлтелгән федераль закон проектын ҡарай.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә "Ҡорбан Хәләл Fest" республика байрамы ойошторола. Сара 28 июндә "Башҡортостан" лайфстайл-үҙәге алдындағы майҙанда иртәнге сәғәт 11-ҙә башлана. "Программала төрлө саралар ҡаралған, шул иҫәптән балалар өсөн дә. Концерт, хәләл йәрминкә була. Һәр кем байрам һыйы - тәмле былауҙан ауыҙ итә ала", - тип хәбәр иттеләр Өфө мэрияһынан.

✓Өфө уҡыусыһы Виктория Ширяева йөҙөү буйынса Бөтә Рәсәй ярыштарында көмөш миҙал яуланы. Пензала "Волга буйы" балалар йөҙөү лигаһы ярыштары булып үтте. Унда Рәсәйҙең 23 төбәгенән 68 клубтың вәкилдәре ҡатнашты. Спорт министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, 11-12 йәшлек ҡыҙҙар араһында "брасс" менән 50 метр арауыҡҡа йөҙөүҙә Виктория финишҡа 36,61 секунд эсендә килеп еткән.

✓Башҡортостан юлдаш телеканалында "Башҡортостан. Хроника. Махсус хәрби операция" документаль фильмын күрһәтәләр. Был хаҡта республика етәксеһе Радий Хәбиров үҙенең телеграм-каналында хәбәр итте. Фильмдың нигеҙендә - республика киң мәғлүмәт сараларының материалдары, алғы һыҙыҡтан уникаль кадрҙар. Унда мобилизацияланған һәм үҙ теләге менән яуға киткән яҡташтарыбыҙҙың Тыуған илебеҙҙе һаҡлауы, тылда яугирҙарға нисек ярҙам итеүҙәре хаҡында һөйләйҙәр.

✓Силәбелә һабантуй уҙҙы. Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһенең Бейеү театры артистары һәм филармония солистары байрамды концерт программаһы менән асты. Мәҙәниәт министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, Гагарин исемендәге парктың төп сәхнәһендә сағыу тамаша ойошторолдо.

✓Сочи ҡалаһында, Адлер районының мәҙәниәт һәм ял паркында, милли байрам - һабантуй ойошторолдо. Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт министрлығы, Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы булышлығы менән Сочиҙа йәшәгән ватандаштарыбыҙ һәм ҡала ҡунаҡтары башҡорт эстрадаһы артистарының сығыштарын тамаша ҡылды. Сочи ҡалаһы башҡорттары автономияһы милли ризығыбыҙ - сәк-сәк бешереү буйынса оҫталыҡ дәресе үткәрҙе.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ПРЕЗИДЕНТ ӘЙТТЕ!

**Рәсәй Президенты Владимир Путин хәрби журналистар менән осрашты. Һөйләшеү фронт һыҙығындағы хәл, махсус хәрби операциялағыларға ярҙам һәм тәьмин итеү саралары, илдә хәрби хәл индереү кәрәклеге тураһында барҙы. Һөйләшеү башында Владимир Путин махсус хәрби операция маҡсаттарының үҙгәрешһеҙ ҡалыуын, уларҙың нигеҙле булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Улар ағымдағы хәлгә ҡарап үҙгәрергә мөмкин, ләкин бер нәмәне лә үҙгәртмәйәсәкбеҙ", - тине Президент. Билдәле булыуынса, махсус хәрби операцияның маҡсаты - "Украинаны демилитаризациялау һәм денацификациялау".**

# МАҠСАТТАР ҮҘГӘРЕШҺЕҘ ҠАЛА



### Украинаның контрһөжүме тураһында

Владимир Путин 4 июндә башлаған контрһөжүмде ошо маҡсатта әҙерләнгән резервтарҙы файҙаланып, күләмле тип атаны. Әммә, уның әйтеүенсә, Украинаның Ҡоралды Көстәре бер участкала ла уңышҡа өлгәшмәгән. Юғалтыуҙар беҙҙә Украина менән сағыштырғанда ун тапҡырға аҙыраҡ.

### Мобилизацияның икенсе тулҡыны

Рәсәй Федерацияһы Президенты белдереүенсә, әлеге ваҡытта мобилизацияның кәрәге юҡ. Был турала Оборона министрлығы ла билдәләнә. Владимир Путин көҙгөһөн өлөшләтә мобилизация сиктәрендә фронтҡа 300 мең ир-егет саҡырылыуы хаҡында хәтергә төшөрҙө. Әле ирекмәндәр менән әүҙем эш алып барабыҙ. Һуңғы аҙнала ғына 9,5 мең кеше килешеү төҙөгән. "Ағымдағы йылдың ғинуарынан контракт буйынса һалдаттар менән эшләй башланыҡ һәм әлеге ваҡытта 150 мендән ашыу кеше, ирекмәндәр менән бергә 156 мең кеше йыйҙыҡ. Был хатта минең өсөн дә көтөлмәгән хәл: сөнки 156 мең кеше үҙ теләге менән Ватан һағына баҫҡан", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды ул.

### Илдә хәрби хәл индерергә кәрәкме?

Президент Владимир Путин Рәсәйҙә хәрби хәл кәрәклеген күрмәүен һыҙыҡ өҫтөнә алды. Украинала контрразведканың бик ҡаты режимы һәм хәрби хәл индерелеүен билдәләне ул. "Әммә беҙгә әле быны эшләргә кәрәкмәй, тип уйлайым. Беҙгә бары тик хоҡуҡ һаҡлау органдарының һәм махсус хеҙмәттәрҙең эшен камиллаштырырға һәм киңәйтергә кәрәк", тине Путин.

### "Срочниктар"ҙың яҙмышы

Дәүләт башлығы махсус хәрби операция зонаһына хәрбизәрҙе ебәреү кәрәкмәй, тине. Әммә сик буйы төбәктәрендә улар хәүеф янаған осраҡта хәрби бурысын үтәргә тейеш, тип белдерҙе. "Белгород, Курск өлкәһе - был биләмәләрҙә улар элеккесә именлек тәьмин итә. Ә хәүеф янаған осраҡта улар изге бурысын үтәргә һәм Ватанды яҡларға тейеш", - тип өҫтәне Путин.

Бынан алда "Башинформ" Башҡортостан Республикаһы яҙғы призыв барышында Рәсәй Федерацияһы Ҡораллы Көстәренә 5500 мендән ашыу хеҙмәткә алыныусыны ебәрәсәге тураһында хәбәр иткәйне. Яҙғы саҡырыу ағымдағы йылдың 15 июленә тиклем дауам итә. Уның Украинала махсус хәрби операция үткәреү менән бер ниндәй ҙә бәйләнеше юҡ. Элекке кеүек үк, ул закон менән билдәләнгән ваҡытта һәм планлы рәүештә үтә. Бөтә хәрби хеҙмәткә саҡырылыусылар Рәсәй Федерацияһы территорияһындағы хәрби частарҙа хеҙмәт итәсәк.

### Төбәк һәм федераль түләүҙәр тураһында

Владимир Путин Оборона министрлығына дошман техникаһын юҡ иткән өсөн махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға түләүҙәр менән хәлдәрҙең нисек барғанын асыҡларға вәғәҙә бирҙе. Хәрби журналистар менән осрашыу барышында ҡатнашыусыларҙың береһе, уның мәғлүмәттәре буйынса, әлегә бер яугир ҙа кәрәкле сумманы алмаған, тип белдерҙе. Шулай уҡ төбәк түләүҙәре буйынса һорауҙар булды. Суммалар төрлө - 50 мендән алып 200 мең һумға тиклем. Дәүләт башлығы төбәктәргә өҫтәмә түләүҙәр күләме буйынса туранан-тура күрһәтмәләр бирә алмауҙарын һыҙыҡ өҫтө-нә алды, сөнки улар ирекле. Шулай ҙа ул губернаторҙар менән һөйләшергә вәғәҙәләне.

### Хөкөм ителгәндәрҙе ярлыҡау

Рецидив булған осраҡта төрмәнән фронтҡа эләккән махсус хәрби операция ағзаһы закон буйынса яуап бирергә тейеш, тине ил Президенты.

Башинформ алдараҡ яҙғанса, Дәүләт Думаһы махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы граждандар өсөн енәйәт яуаплылығын кәҙҙә тотҡан закон проектын ҡарарға әҙерләнә. Яңылыҡтар хеҙмәткә ингәнгә тиклем ҡылынған бәләкәй һәм урта ауырлыҡтағы енәйәттәр өсөн мобилизацияланған һәм контракт буйынса эшләүсе һалдаттарҙы яуаплылыҡтан азат итеүҙе күҙҙә тота. Яуаплылыҡты бүлекләүҙән йәки эштән бушатыуҙан һуң алып ташлау тәҡдим ителә.

ҠЫҪҠАСА

# ИҪӘБЕБЕҘ АРТҠАН

**2022 йыл йомғаҡтары буйынса Өфө ыңғай социаль-иҡтисади үҫеш динамикаһын күрһәтте. Был хаҡта ҡала хакимиәтендәге оператив кәңәшмәлә Өфө мэрияһының иҡтисад идаралығы начальнигы Тимур Хафизов белдерҙе.** Былтыр тейәп оҙатылған сәнәғәт продукцияһы күләме 2,5 процентҡа артҡан. Уның буйынса Өфө миллионлы ҡалалар араһында алдынғы урынды һаҡлап ҡалған, ә ҡаланың республика тулайым төбәк продуктына индергән өлөшө 1,5 триллион һумға еткән. Халыҡтың иҫәбе артҡан, бөгөн Башҡортостандың баш ҡалаһында 1 180 979 кеше йәшәй. Үҫештең төп факторы - миграция, былтыр ҡалаға 38 мендән ашыу кеше уҡырға һәм эшкә килгән. Ғөмүмән, төп социаль-иҡтисади күрһәткестәр буйынса Өфө миллионлы 14 ҡала араһында 4-се урынды биләй (Мәскәүҙе һәм Санкт-Петербургты иҫәпкә алмағанда). Өфө ҡала мөхите сифаты индексы буйынса ҙур ҡалалар рейтингында (Мәскәүҙе һәм Санкт-Петербургты иҫәпкә алып) 7-се урында тора. Уҙған йылда уңайлы эшлекле мөхит булдырыу өсөн Башҡортостанда эшҡыуарлыҡты үҫтереү буйынса урындағы үҙидара органдары эшмәкәрлеге стандарты индерелде. Уның күрһәткестәре буйынса Өфө 1-се урынды биләй.

✓ **Өфөлә йәйге каникул башланғандан алып мендән ашыу уҡыусы туристик походҡа барып ҡайтҡан, тип белдерҙеләр ҡала мэрияһындағы оператив кәңәшмәлә.** Баш ҡала хакимиәтенең мәғариф идаралығы начальнигы Азат Батыршин билдәләүенсә, июнь айында балалар Шүлгәнташ мәмерйәһендә, Ирәмәл тауында һәм Ҡыҙылташ ҡаяһында булырға, Көньяҡ Урал - Ағиҙел, Йүрүҙән, Әй йылғалары буйлап сәйәхәткә сығырға өлгөргән. "Туристик оҫталыҡ мәктәбе" программаһы сиктәрендә уҡыусылар уҡыу-тикшеренеү һәм эҙләү экспедицияларында ҡатнаша, махсус полигонда шөғөлләнә һәм спелеотуризм техникаһында оҫталыҡтарын арттыра", - тине ул. Спорт һәм хәрби-патриотик йүнәлештәге йыйындар, профилле сменалар айырыуса популярлыҡ яулай, тип өҫтәне чиновник. Мәҫәлән, ҡала ситендәге "Йәйгор" лагерында 15-се тапҡыр "Рәсәй гвардияһы" сменаһы ойошторола, ә йәйҙең төүге айынан социаль хәүеф төркөмөнә ҡараған үҫмерҙәр өсөн хәрби-тарихи лагерь эшләй башланы.

✓ **31 июлдә (дүшәмбе) Шаҡша күперен төҙөкләндереү башлана, юлдың яртыһы ябыла.** Был хаҡта Өфө хакимиәтендәге оператив кәңәшмәлә Өфө ҡалаһы хакимиәтенең Юлдар һәм яһалма ҡоролмалар төҙөү, ремонтлау идаралығы начальнигы Константин Паппе хәбәр итте. Әле объект эргәһендә майҙансыҡ әҙерләнә, 1 июлдән төҙөлөш ҡаласығы ойоштороласа һәм техника килтерелә башлай. "Шулай уҡ М-5 Урал трассаһын реконструкциялау эштәре бара, ә киләһе йылдың төүге яртыһында Көнсығыш сығыу юлына юл сафҡа индереләсәк, был иһә М-5-тән М-7-гә транспорт ағымын көйләргә ярҙам итергә тейеш", - тип билдәләне Константин Паппе. Генераль подрядсы - "Башкиравтодор" акционерҙар йәмғиәте. Контракттың хаҡы - 2,16 миллиард һумдан ашыу, эштәрҙе 2025 йылдың 28 февраленә тамамлау планлаштырыла.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Үт ҡыуығы

❖ Үт ҡыуығында һәм бөйөрҙә таш булғанда гөлйемеш һәм күгән (терн обыкновенный) тамырҙары ярҙам итә. Эмалле кәстрүлгә 3 литр һыуыҡ һыу ҡойоп, 200-әр грамм туралған күгән һәм гөлйемеш тамырҙарын һалырға. Ҡайнап сыҡҡас, тағы ла 15 минут талғын утта тоторға. Шунан йылыға төрөп, һыуынғансы төнәтергә. Төнәтмәне 3 литрлыҡ банкаға һөҙөп алырға һәм һыуытҡысҡа ҡуйырға. Уны көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30-40 минут алда 150-шәр грамм итеп, йылымыс көйө эсергә. Бер әҙерләп алған төнәтмәне эсеп бөткәс тә, тағы ике тапҡыр эшләп, өҙөлөкһөҙ ҡулланырға кәрәк.

❖ Үт ҡыуығындағы таштарҙан ҡотолоу өсөн көн һайын 1 стакан ҡарағат ашарға кәрәк. Был халыҡ ысулын бик күптәр ҡулланып ҡараған һәм яҡшы һөҙөмтә биреүен раҫлайҙар. Ҡара ҡарағатты иртәнсәк өҙөп ашаған осраҡта, ике айҙан үт ҡыуығындағы таштар ҡомға ваҡланыуын, йәки бөтөнләй юҡҡа сығыуын күрерһегеҙ.

### Битлектәр

❖ 6-7 грамм майлы кремға 0,5-1 балғалаҡ лимон һуты һәм ярты балғалаҡ ҡаймаҡ ҡушырға. Шуны тирегә һөртөп, 20-25 минуттан һуң сафландырыусы лосьонға сылатылған мамыҡ менән һөртөп алырға.

❖ 5-10 грамм ланолинлы кремға 5-7 грамм оҙаҡ торған алоэ һуты һәм 5-10 мл үҫемлек майы ҡушырға. Йылымыс ҡатышманы алдан йылы тоҙло боҫлама яһауҙан еүешләнгән маңлай һәм муйынға массаж яһай-яһай һөртөргә. 10-15 минуттан битлекте шпатель йәки ҡалаҡ тотҡаһы ярҙамында алырға, өҫтөнә аҡһымлы битлек һөртөргә (2 ҡалаҡ йомортҡа ағына ярты балғалаҡ ваҡ тоҙ). Шунан 10 минуттан һары мәтрүшкә йәки шалфей бешкән һыуҙа сылатылған мамыҡ менән һөртөп алып, шул һыу менән битте йыуып, берәй еңел крем һөртөп ҡуйырға. Әйткәндәй, алоэ һутын әҙерләү өсөн үҫемлекте һауытында үҫеп ултырған көйө һыуытҡыстың аҫҡы кәштәһендә 2-3 градус һыуыҡта 12-14 көн тоторға кәрәк.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Ауыл-ҡалаларыбыҙҙың зыяраттары йәштәр ҡәбере менән тулған бит! Унда инеп, ҡәбер таштарындағы яҙыуҙарҙы уҡый башлаһаң, сәстәрең үрә тора. Бер ҡәбергә лә "ул эскелек арҡаһында үлде" тип яҙылмаған, әлбиттә.*



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ

**Яға.** Аҡҡужа ауылында һаҡлана. Оҙонлоғо 40 см, өҫкө киңлеге 26 см, аҫҡы киңлеге 35.5 см.



**Яға.** Мәсҡәү ауылында һаҡлана. Оҙонлоғо 47 см, өҫкө киңлеге 26 см, аҫҡы киңлеге 37 см.



**Яға.** Уральск ҡасабаһында һаҡлана. Оҙонлоғо 45 см, өҫкө киңлеге 25 см, аҫҡы киңлеге 35 см.



**Яға.** Иҫтамғол ауылында һаҡлана. Оҙонлоғо 44 см, өҫкө киңлеге 28 см, аҫҡы киңлеге 38 см.



**Азат ҒАРИПОВ,**
**этнограф.**
**"Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре" китабынан.**

*БАШҠОРТОСТАНЫМ!*

# ҺӘР ТӨБӘГЕ ЙӘМЛЕ...

## тыуған төйәктең



**Өфөлә тыуып үҫкән кеше булараҡ, миңә республиканың төрлө төбәктәренә сәйәхәт итеү сит илгә барып ҡайтҡандай тәьҫораттар тыуҙыра. Башҡортостандың тәбиғәтенә һоҡланып, район һәм ҡалаларҙың ни тиклем бер-береһенән айырылып торғанын күреп, төрлө урындарҙа халыҡтың нисек йәшәүен ҡарап кире Өфөгә ҡайтыу үҙе бер ғүмер.**

Күптән түгел Мәләүез ҡалаһы һәм районына юл төштө. Ырымбур трассаһы буйлап күп йөрөлһә лә, нәҡ Мәләүездең үҙенә боролоп ингән юҡ ине әле. Ыҡсым ғына, таҙа, заманса, төрлө магазиндары һәм күңел асыу урындары булған, баҙары гөрләп эшләп торған ҡала, тип күрҙем Мәләүеҙҙе. Водителдәр ҙә, йәйәүлеләр ҙә бер-береһенә ихтирамлы булыуы, юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен теүәл үтәүе менән иғтибарҙы йәлеп итте. Ҡала уртаһындағы парктары тәрбиәле, ҡараулы, төҙөк. Башҡа күп ерҙәрҙән айырмалы рәүештә, Мәләүездең бөтә урамдарында ла юлдар яҡшы торошта. Һәр хәлдә, ҡала уртаһында, үҙәккә яҡын урынлашҡан шәхси йорттар урамдарында насар юлдарҙы осратманым. Мәҫәлән, Стәрлетамаҡ ҡалаһының Артем урамына ҡараған күп ҡатлы йорттары араһына инһәң, юлдар ҡот осмалы, соҡор-саҡырлы, машина менән түгел, хатта йәйәү ҙә үтеүе ауыр. Шуға күрә был йәһәттән Мәләүез ҡалаһы етәксελегенә, юл төҙөлөшө эшселәренә "Афарин!" тиергә генә ҡала.

Мәләүездән Томансы, Аптыраҡ, Һарыш яҡтарына барған юлдағы тәбиғәттең бик үҙенсәлекле булыуы күҙгә ташланды. Ағиҙел йылғаһы аша сыҡҡас та, алыҫта, ап-аҡ тау күренә. Урындағылар уның эргәһендә шулай уҡ өс күл барлығы тураһында ла әйттеләр. Артабан юл буйлап урынлашҡан убалар иғтибарҙы үҙҙәренә тартып тора. Белорет, Архангел һәм башҡа яҡтарҙағы бейек тауҙарҙа йөрөгән бар ине, ләкин убалар тураһында быға тиклем ишеткәнем булһа ла, тәү тапҡыр күреүем булды. Ошо юлдан йөрөгәндәр уларҙы ололап, тау, тиеп йөрөтә.

Шулай уҡ баҫыуҙарҙың тәрбиәле булыуы күңелгә һенеп ҡалды. Бәҡтиһәң, был яҡтағы баҫыуҙарҙы Урта Азия кешеһе килеп, әллә ҡуртымға, әллә һатып алып, төрлө йәшелсә үҫтерә икән, урындағылар уға ялланып эшләй. Баҫыуҙарҙың буш ятмауы, кемгәлер эш урынының булыуы яҡшы күренеш, әлбиттә, ләкин ни өсөн был эште үҙ милләттәштәребеҙ атҡарып сыкманы икән, тигән һорау тыуа күңелдә.

Ауылдарҙы алып ҡарағанда, улар ҙур ғыналар, ләкин емерек өйҙәрҙең күп булыуы аптыратты. Мәҫәлән, Бельский ауылының бер урамында ғына буш торған, яртылаш емерелгән өйҙәр байтаҡ. Урындағы хакимиәт уларҙы "Бер-нисә йылдан хужалары килеп сығыуы бар", тип теймәй тота икән. Закон яғынан сығып ҡарағанда, әлбиттә, дөрөҫтөр, әммә әлеге мәлдә ул ауыл кешеләренең ошо емереклектәр араһында йәшәп ятыуын күреү ҡыҙғаныс күренеш. Әгәр ҙә емереп ташлап булмай икән, берәй төрлө рәтләп ҡуйырға мөмкиндер бит.

Был ауылдар араһында йөрөгән автобустарҙың теүәл ваҡытында ғына килеп китеүен күреү ҡыуандырҙы. Шулай уҡ мәсеттәрҙең төҙөк булыуы һәм уларҙан аҙан тауыштары ишетелеүе лә күңелгә май булып ятты.

Был яҡтарҙа ауыл халҡы енел машинала түгел, ә квадроциклда ғына елдәрә ауыл араһында. Ул "уйынсыҡ" осһоҙҙан түгел, тимәк, кеше эшләй, тырыша, аҡса таба һәм теләгәнен һатып ала. Был яҡтарҙа күпселек Мәләүез ҡалаһына йөрөп эшләй икән, шулай уҡ ир-егеттәр Себер тарафтарын тапай. Тағы ла иртә яҙҙан ҡош-ҡорт үҫтереүселәр күп ауылдарҙа, улар өсөн йорт алдарында махсус ҡулайламалар ҙа эшләгәндәр.

Мәләүез яҡтарына тәүге сәйәхәт күңелдә яҡшы тойғолар ҡалдырҙы. Был тарафтарға тағы ла килергә яҙыр, тип ышанам.

**Зөлфәр ИШЕМҒОЛОВ.**
**Өфө ҡалаһы.**

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# "МИСТЕР СИДР" ҮЛТЕРӘ.

## Алкоголь ҡорбандары былар ғына түгел

**(Башы 3-сө биттә).**

Рәйес Түләктең "Яныу" поэмаһындағы ошо юлдар иҫкә төшә:

...Мин уларға берсә көләп бағам,
Көйөп бағам, бағам илаптар.
Ут күбәләгендәй гәйеп була
Имән ярҡаһындай ир-аттар...

Ә бит, ысынлап та, эскелек арҡаһында яҡты донъя менән хушлашҡандарҙы һис кенә лә "насар әҙәм" тип атап булмай. Ҡасандыр ғаилә ҡороп, гөүләтеп тормош көтә башлаған, бар эште лә емертеп эшләгән, алтын ҡуллы, һәр йәһәттән килгән һәләтле, йомарт, башҡаларға ярҙамлы, нескә күңелле, балаларын яраткан яҡшы кешеләр бит улар башлыса (Әйткәндәй, яман, аҫтыртын, әшәке кеше бүтәндәргә зыян итһә лә, үҙен хәмер менән бөтөрмәй ул). Араҡы ҡоллоғонан арынып, тормош ҡәҙере хаҡында уйланып, әлекке хәленә ҡабаттан ҡайтып, яҡшы йәшәп киткәндәр хаҡында ишетеп һөйөнөһең ҡайсаҡ. Ир-ат араһында ундайҙар күберәк булһа, үкенескә, нәфис заттарыбыҙ йыш ҡына был афәттән бөтөнләйгә ҡотола алмай. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бынамын тигән шундай кешеләребеҙ үҙен-үҙе тота алмай, упҡынға төшөп һәләк була...

Һуҙ башым "сифатлы араҡы" хаҡында ине бит әле. "Губернаторская" йә "Настоящий полковник" тип ҙурлаһындармы уны, "Пшеничная", "Хлебная" тигән изге ризыҡ исеме бирһендәрме, "Русская", "Столичная", "Московская", хатта "Белебеевская" тип, уға "илһөйәрлек" төҫө һеңдерергә маташһалар ҙа, уның менән дуҫлашҡандар күпләп "китә" тора. Ошо хаҡта бар донъяны яңғыратып ҡысҡырғым килә!

Борон-борондан Ислам дине рухында тәрбиәләнгән атай-олатайҙарыбыҙ был эсемлектең бөтә төрөн дә "хәрәм" тип һанаған (һүҙлектә "хәрамә" - гәрәпсәнән урыҫсаға "запрещать" тип тәржемәләнә). Аллаһы Тәғәләнең Китабы - изге Ҡөрьәндә ул шайтан эсемлеге тип атала һәм әҙәм балаларына ҡәтғи тыйыла ("Аш табыны" сүрәһе, 90-91 аяттар). Бына ошоға инанмай тороп, нисек кенә "мәҙәни", "сама белеп", "тәртипле генә" эсеүҙе пропагандалаһаң да, был афәттән бөтөнләйгә ҡотолоп китеп булмаясағы көн кеүек асыҡ. Магазиндарҙа араҡы һатыу ваҡытын сикләү, ун һигеҙ йәшкә тиклем үҫмерҙәргә хәмер һатыуҙы тыйыуҙар, эскелек өсөн закон тарафынан яуапҡа тарттырыуҙар ҙа уны юҡҡа сығара алмай. Бындай саралар тик түтәлдәге ҡый үләнен өҫтән генә өҙгөләп, тамырын имен көйө һаҡлап алып ҡалыуға оҡшаш. Күп кенә зыялыларыбыҙҙың тормоштағы эскелеккә бәйле төрлө аяныслы хәлдәрҙе миҫал итеп килтереп, фәһемле мәҡәләләр яҙып, гәзит-журналдарҙа сығарыуы һөйөнөслө. "Айыҡ ауыл" хәрәкәтен күтәреүҙәрҙе лә хуплайым. Әммә, халҡыбыҙҙың фәҡәт дини асылына ҡайтып, хәмерҙән бөтөнләйгә баш тартыуы аша ғына беҙ ошо афәттән ҡотолоп китә алырбыҙ, ин шәә Аллаһ. Ислам дине киң таралған Чечен, Дағстан республикалары халыҡтарында эскелек иң түбән кимәлдә икәне хаҡында статистик материалдар бар. Был йәһәттән беҙҙең Башҡортостаныбыҙҙың шул республикалар рәтенә инмәүе ифрат та үкенесле. Ҡыҙғаныс, әммә был - ысынбарлыҡ. Хәмерҙән тулыһынса баш тартҡан һау-сәләмәт халыҡҡа бер ниндәй ҙә сидр-мидр, суррогат-муррогаттарҙың ҡурҡынысы янамаҫ ине лә ул...

Ауыл-ҡалаларыбыҙҙың зыяраттары йәштәр ҡәбере менән тулған бит! Унда инеп, ҡәбер таштарындағы яҙыуҙарҙы уҡый башлаһаң, сәстәрең үрә тора. Бер ҡәбергә лә "ул эскелек арҡаһында үлде" тип яҙылмаған, әлбиттә. Әммә улар хаҡында таныш-тоноштар аша ишетәһең. Мөләйем фотоһүрәттәренә, тыуған һәм үлгән йылдарына ҡарап та, дүрт-биш тиҫтәһен дә тултырмаған, йәшлек дәрте ташып торған мәлдә донъя ҡуйған был яҡташтарҙың күпселеге ана шул арҡала киткәнлегенә төшөнөү ауыр түгел. Беребеҙ ҙә был донъяға мәңгегә килмәгәнбеҙ. Олпат йәштәргә етеп, бала-сағаларыбыҙҙың тормошона шатланып, ейән-ейәнсәрҙәр һөйөп, бәхетле ҡартлығыбыҙ өсөн Аллаһы Тәғәләгә шөкөр итеп, тағы бер аҙ ғына булһа ла йәшәү бәхетенән үҙебеҙҙе мәхрүм итмәйексе, ҡәҙерле милләттәштәр. Ҡабаттан был донъяға бер ҡасан да килмәйәсәкбеҙ бит...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**хәрби хеҙмәт ветераны.**

✓ *Кейекбаев боронғо башҡорт телендә һөйләшеүселәрҙең бынан 4000 - 3500 йылдар әүәлерәк төрки ҡәбиләләренең төп массаһынан айырылып китеүен билдәләй.*



*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Дүртенсе бүлек. Көньяҡ Урал гун эпохаһында



**Иртә тимер быуатындағы Көньяҡ Урал ҡәбиләләре - башҡорт халҡының иң боронғо ата-бабалары**

XX быуаттың 50-се йылдарында уҡ Башҡортостандың тарихи әҙәбиәтендә бер нисә тикшеренеүсе тарафынан иртә тимер быуатында Көньяҡ Урал ҡәбиләләренең башҡорт халҡы этногенезына нигеҙ биреүсе үҙәк (ядро) булараҡ формалашыуы хаҡындағы мәсьәлә ҡуйыла. Был мәсьәләнең инициаторҙары, башлыса, лингвистар була, шуға күрә тарихи күҙәтеүҙе тел аспектынан башлап ебәреү фарыз. Көньяҡ Уралдың иртә тимер эпохаһы һәм уға тиклемге дәүерҙәрҙәге ҡәбиләләре теле хаҡындағы мәсьәлә бик ҡатмарлы, һәм уны дала Евразияһы халыҡтарының ни рәүешле хасил булыуының дөйөм картинаһын иҫәпкә алмайынса хәл итеп булмаясаҡ.

Тәүҙә сак-дах-массагет-исседон ҡәбиләләре төркөмөнөң теле һәм уларҙың артабанғы яҙмышы буйынса ҙур булмаған историографик экскурс яһайыҡ. Тарихсылар араһынан ошо мәсьәлә буйынса тәүләп күренекле этнограф-археолог, "Башкиры" тигән фундаменталь хеҙмәт авторы С.И. Руденко үҙ фекерен белдерҙе. Ул иҫкә алынған ҡәбиләләр төркөмдәре һәм IX - XIV быуаттарҙа билдәле булған тарихи башҡорттар араһында туранан-тура генетик бәйләнеш бар, тип иҫәпләй. Бынан тыш, ул беҙҙең эра баштарында уҡ башҡорттар кубеһенсә күсмә малсылыҡ йөғонтоһонда формалашып өлгөргән көнкүрешле берҙәм халыҡ төркөмө булған, артабан Көньяҡ Уралда булып үткән тарихи катаклизмдарҙың башҡорттарҙың физик тибы үҫешенә лә, теленә лә, көнкүрешенә лә етди йоғонто яһамаған, тип раҫлай.

Ошо мәсьәлә буйынса С.И. Руденконың фекерен лингвистик материал нигеҙендә С.Е. Малов һәм Й.Ғ. Кейекбаев кеүек күренекле төркиәтселәр хуплап сыға. Тикшеренеүселәрҙең икеһе лә күҙгә бәрелеп торған бер факттан - хәҙерге башҡорт теленең башҡа төрки телдәренән ул телдәрҙә булмаған байтаҡ ҡына реликт күренештәрҙең һаҡланып ҡалыуы менән айырылып тороуынан сығып фекер йөрөтә. Ошоға бәйле, С.Е. Малов башҡорт теленең бик иртә (б.э. тиклем V быуаттан да һуңыраҡ түгел) уға нигеҙ булған төрки теленән айырылып сыҡып, төрки донъяһының көнбайыш ҡырыйында үҙаллы башҡорт-ҡыпсаҡ-мишәр төркөмөн хасил иткән, тип фараз итә. Территориаль яҡтан ул боронғо башҡорт ҡәбиләләрен, Көньяҡ Урал далаларын да индереп, Көнсығыш Европаның көньягында урынлаштыра. Уның фекеренә ярашлы, б.э. тиклем VII - III быуаттарҙа Төньяҡ Ҡара диңгеҙе буйында йәшәгән скифтарҙың күсмә ҡәбиләләре төрки телендә һөйләшкән. Ошондай уҡ фекерҙәргә таянып, Й.Ғ. Кейекбаев боронғо башҡорт телендә һөйләшеүселәрҙең бынан 4000 - 3500 йылдар әүәлерәк төрки ҡәбиләләренең төп массаһынан айырылып китеүен билдәләй һәм уларҙы генетик яҡтан иртә тимер быуатының дах-массагет, исседон-иирк төркөмө ҡәбиләләре менән бәйләй. Айырым алғанда, ул ошо осорҙа Көньяҡ Уралда йәшәгән халыҡтың бер төркөмөнә ҡарата Геродоттың "таҙ башлы аргиппейҙар" ("плешивые аргиппеи") этнонимын ҡулланыуын һуңыраҡ осор башҡорттарының ырыу бүлемдәренең үҙатамаһы - "тазлар" этнонимының үҙгәртелеп бирелгән варианты, тип фараз итә. К.Ф. Смирнов археологик материалдар аша ошо ҡараштың ҡәтғи хуплап сыға. Көньяҡ Уралдың күсмә ҡәбиләләре тарихын һәм мәҙәниәтен күп йылдар дауамында өйрәнгән ғалим, тикшеренеүҙәрен дөйөмләштереп, башҡорт этносы формалашыуының иң боронғо этаптары дах-массагет ҡәбиләләренә барып тоташа, тигән һығымтаға килә. Күрһәтелгән авторҙарҙың Көнсығыш Европа (Урал-Волга буйы һәм Төньяҡ Ҡара диңгеҙ буйы далалары) ҡәбиләләренең төрки теллелеге хаҡындағы һығымталары бөгөн бер тарихсыларҙың һәм археологтарҙың хеҙмәттәрендә хупланды. Мәҫәлән, ошондай ғалимдарҙан А.Н. Бернштам һәм Ю.В. Зуев Ҡаҙағстан һәм Урта Азия ҡәбиләләренең төрки телле булыуҙарына инанған. Уларҙы хәҙер К.Т. Лайпанов һәм И.И. Мизиев ҡәтғи хуплап сыҡты.

Дөйөм алғанда, артабан С.И. Руденконың, С.Е. Маловтың, Й.Ғ. Кейекбаевтың һәм К.Ф. Смирновтың ошондай ҡараштары фәндә үҫтерелмәне; бер ни тиклем кимәлдә улар хатта ультраавтохтон ҡараш, тип нарыҡланып, башҡорт халҡының формалашыу ваҡытын нигеҙһеҙ боронғолаштыра, тип тәнҡитләнде. Әйтелгәнгә миҫал итеп СССР Фәндәр Академияһының Тарих бүлегенең академик-секретары С.Л. Тихвинскийҙың 1987 йылда бүлек бюроһында һөйләгән докладын атап үтергә була, ул күп кенә тарихи журналдарҙа баҫылып сыҡты. Унда докладсы Башҡортостан, Татарстан, Әзербайжан һәм башҡа республикаларҙың ғалимдарын Евразия далаларының күсмә ҡәбиләләре араһында (скифтар, сарматтар, сактар) Көнсығыш Европаның хәҙерге төрки телле халыҡтары эногенезының иртә этаптарында әүҙем роль уйнаған төрки телле ҡәбиләләр булыуы мөмкинлеге хаҡындағы фекерен тәнҡитләп сыҡты.

Сак-дах-массагет ҡәбиләләренең ниндәй телгә ҡарауы мәсьәләһе боронғо төрки этно-тел берлегенең барлыҡҡа килеү ваҡыты һәм формалашыу территорияһы, хәҙерге заман төрки телле халыҡтарҙың (башҡорттар, татарҙар, ҡаҙаҡтар, төрөктәр һ.б.) килеп сығышы менән менән бәйле ҡатмарлы ғилми проблемаға ҡағыла.

Ошо проблеманы ҡуйыуҙа һәм аңлатыуҙа ике концепция асыҡ билдәләнде, академик С. Л. Тихвинский уның беренең рәсми вәкиле сифатында сығыш яһаны. Ошо концепцияға ярашлы, боронғо төрки этно-тел берлеге тәүҙә Үҙәк Азия (Монголия, Ҡытай) далаларында формалаша һәм тик III - IV быуаттарҙан аҙағыраҡ, Халыҡтарҙың бөйөк күсеше тип аталған эпоханан һуң, һундар - Үҙәк Азия далаларынан сығыусылар - Европаға ябырылған осорҙа бынан көнбайышҡа табан күсенә башлай. Әммә төрки халыҡтарының Европаға һәм Яҡын Көнсығышҡа (Төркиәгә, Әзербайжанға) әүҙем миграцияһын был концепция яҡлылар IX - XII быуаттарға ҡалдыра. Авторҙар, төрки халыҡтары тарихының иң боронғо этаптарын бары тик Үҙәк Азия менән бәйләгәнлектән, тарих фәнендә Себер, Ҡаҙағстан, Урта Азия һәм Көнсығыш Европа территорияһында йәшәгән боронғо төрки телле ҡәбиләләрҙең монголоид антропологик типҡа ҡарарға тейешлеге хаҡындағы бер нәмә менән дә дәлилләнмәгән фекер нығына. Ошо схемаға тура килмәгән телӛнә ниндәй фекер йәиһә фараз нигеҙһеҙ. тип баһалана.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**
**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

*МУЗЕЙ ҠОМАРТҠЫҺЫ*

# ИҪТӘЛЕКЛЕ МАНТИЯ



Башҡортостан Милли музейы филиалы булған Әхмәтзәки Вәлиди музейында билдәле йәкташыбыҙ, дәүләт эшмәкәре, Башҡортостан дәүләтселегенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе, бөтә донъяға билдәле ғалим-көнсығыш белгесенең йәшәү һәм эшләүен күрһәткән бай коллекция тупланған. Шундай әйберҙәрҙең береһе Әхмәтзәки Вәлидиҙең 1960 йылдарҙа Төркиәнең Стамбул университетында уҡытҡанда кейеп йөрөгән академик мантияһы. Уны музейға 1995 йылда Өфөгә "Икенсе Вәлиди уҡыуҙары" на килгән ҡыҙы Иҫәнбикә Туған бүләк иткән.

Мантия 125*125 сантимер үлсәмле, ҡара төҫтәге йөн тукыманан Төркиәлә тегелгән. Эске яҡтан йәшел төҫтәге ебәк тукымалар ҡуйылған. Мантия өҫтөнән ҡара ебәк таҫма һалынған, һул яҡтан төймә өсөн элмәһе бар. Аҫта бер яҡтан алтын биҙәктәре бар.

Мантия музейҙа МАЗВ ОФ 139 иҫәп һаны аҫтында һаҡлана. Шулай уҡ уның тураһында мәғлүмәт Рәсәйҙең Музей фонды Дәүләт каталогында ла баҫылған.

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Шайморатовсылар - Гомель-Речица операцияһында

Ноябрь аҙаҡтарында, һыуыҡтар башланған бер мәлдә, беҙҙең дивизия һәм корпустың башҡа соединениелары яугирҙары Белоруссия һаҙлыҡтары аша, билдән һыуҙа килеш, ағастарҙан түшәмдәр эшләп, миномет һәм 45-мм калибрындағы пушкаларын күтәреп тигәндәй, дошмандың көслә артиллерия уты аҫтында һөжүмгә бара. 16-сы дивизия гвардиясылары, һәр ваҡыттағыса, корпустың беренсе эшелонында, авангардта була, дошман менән бәрелешкә лә иң элгәре улар инә. Ике тәүлек буйына барған алыштарҙан һуң дивизия Александровка ауылынан төньяҡтараҡ урынлашҡан Голевицы разъезына килеп сыға. Бында ла дошман беҙҙең яугирҙарҙы ут ҡойоно менән ҡаршылай.

29 ноябрҙең кисенә 16-сы һәм 15-се гв. атлы дивизиялары Осипова-Рудня һәм Александровка рубежында ныҡына. Артабан һөжүм итеү өсөн бер ниндәй ҙә мөмкинлек булмай. 61-се армия штабы бойороғона ярашлы, кавкорпус Замостье, Средний утары, Малые Автюцевичи рубежында әүҙем оборонаға күсерелә. Декабрҙең беренсе яртыһында кавкорпус ике мәртәбә Калинковичиға һөжүм итеп ҡарай, әммә дошман оборонаһын үтеп сыға алмай. Нахов-Александровка районында корпус 1944 йылдың 4 ғинуарына тиклем оборона тота.

Чернигов исемендәге 16-сы гв. атлы дивизияһы байтаҡ ҡына юғалтыуҙар кисерә, шуға күрә яңы ғына фронтҡа алынған яугирҙар менән тулыландырыла. Мәҫәлән, 62-се гв. атлы полкы журналында ошондай мәғлүмәт теркәлгән: "10 декабрҙә полк артиллеристар менән тулыландырылды, 13 декабрҙә 137 кавалерист килде. Яңы килеүселәр араһында һуғышта булмағандар күберәк. Улар өсөн полк ветерандары менән осрашыу уҙғарылды".

### Калинковичи-Мозырь һөжүм итеү операцияһы. Мозырь рейды

1943 йыл аҙағында - 1944 йыл башында Белорус фронтының һул ҡанаты ғәскәрҙәре Белоруссияның көньяҡ-көнсығыш райондарын азат итеү өсөн көслә һөжүм башлай. Ошо операцияның төп маҡсаты - Калинковичи һәм Мозырь ҡалаларын алыу. Дошман командованиеһы оборонаға күскән частарына беҙҙең 61-се армия яугирҙарының алға барыуын нисек булһа ла туктатырға, совет ғәскәрҙәренең Калинковичи ҡалаһына йүнәлтелгән һөжүмен кире ҡағыу әмәлен табырға бойора. Ошо артыҡ ҙурҙарҙан булмаған белорус ҡалаһын ҡалдырып китеү немецтарҙың Калинковичи төркөмөнә тамам тар-мар ителеү хәүефен тыуҙырыр ине. Шул уҡ ваҡытта немецтарҙың Мозырь һәм Ельск ҡалалары районларында оборона тотҡан төркөмдәре лә ауыр хәлдә ҡалыр ине.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Бәләкәйерәк ваҡытта хәтерләйем, инәйҙәр кешегә ингәндә яулыҡтарын яҙып ябынып, яулыҡ остарына ғына сәй төрөп алырҙар ине. Ризыҡ наҡыҫлығы ла бар ине ул саҡта.*



**Күренекле әҙибә, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты Таңсулпан Хизбулла ҡыҙы ҒАРИПОВАның үҙ ижади мөхите, иңгә-иң терәшеп йәшәр, шатлыҡ бүлешер, ҡайғы уртаҡлашыр, яра ялашыр дуҫтары, бер һүҙ менән әйткәндә, рухи ауылдаштары бар. Был әңгәмәбеҙ Таңсулпан ауылы тураһында барыр.**

# ЯҠШЫ КЕШЕ оҙаҡ уйнап



***Минең ауылда икенсе ҡәүем кешеһе юҡ. Икенсе милләт кешеләре менән аралашам, тик улар минең ауыл кешеләре түгел. Улар менән аралашып, татыу йәшәһәм дә, улар менән табындаш, арҡадаш була алмайым шул инде, сөнки минең ауылдаштар - рухташтар. Минең ауылға килеүселәр ихласлыҡҡа ла имтихан тота. Фальш, яһалмалыҡ үҙен тиҙ һиҙҙерә. Яҡшы кеше булып оҙаҡ уйнап булмай. Ул ауылда етмешенсе йылдарҙа тапҡан кешеләрем дә бар. Уларҙың кем булыуы, ҡайҙа эшләүе бөтөнләй мөһим түгел. Учалынан килгән апһындарым да бар әле унда.***

**Таңсулпан апай, беҙ, ауылдарҙа тыуып үҫеп, Өфөләргә килеп төпләнеүселәр һәр ваҡыт үҙебеҙҙең аралашыу мөхитен, рухи ауылыбыҙҙы ойоштороп йәшәйбеҙ. Таңсулпан ауылы нисек барлыҡҡа килде, уның тәүге кешеләре кемдәр булды?**

- Оҙаҡ ваҡыт Учалы, Сибай, Баймаҡ ҡалаларында йәшәп, Өфөгә күсеп килгәс, башта үҙемде юғалып ҡалған һымаҡ хис иттем. Оҙаҡ тоғалмам, кире районға ҡайтып китермен, тигән дә уйым булды. Ул саҡтағы Мәҙәниәт министры Тәлғәт Сәғитов миңә Йәштәр бульвары урамындағы ятаҡтан бүлмә бирҙе. Рәхмәт уға! Ул ятаҡта Хәйҙәр менән өйләнешкәс тә йәшәп алғайныҡ. Шул бүлмәлә өлкән улыбыҙ Айтуған тыуҙы, әсәйем йәшәргә килде. Шуға күрә, бер яҡтан элекке мөхиткә ҡайтҡан һымаҡ та булдым.

Рухи ауылымдың тәүге кешеләрен табыуым дөйөм кухнянан башланды. Был йәһәттән ятаҡ тормошо күберәк ауылды хәтерләтә. Хәҙер ауыл был йәһәттән ныҡ үҙгәреш кисерә. Элек сәйендә лә яңғыҙ ултырып эсмәй инең. Берәү иртәнге сәйенә инһә, икенсеһе төшкөлөккә, өсөнсөһө кискә инә. Бәләкәйерәк ваҡытта хәтерләйем, инәйҙәр кешегә ингәндә яулыҡтарын яҙып ябынып, яулыҡ остарына ғына сәй төрөп алырҙар ине. Ризыҡ наҡыҫлығы ла бар ине ул саҡта. Килгән кеше саҡырылып түгел, былай ғына килә лә инә. Был осраҡта иң тәүҙә самауыр яңырта һалаһың. Килеп инеүсе: "Әйҙә, хәҙер минең сәйҙе һалайыҡ", - тип яулыҡ осона төйөлгән сәйен һалып ебәрә инде.

**Тимәк, Өфөгә килгәс тә ятакта йәшәү һеҙгә ауыл тормошонан әллә ни айырылмаған булып сыға, шулаймы?**

- Тап шулай. Сибайҙа Яҙыусылар ойошмаһында эшләгәндә офисыбыҙ тәҙрәһенән Рәйес Түләктең йәшәгән йорто күренеп тора ине. Был ятакта инде уның бүлмәһе күршемдә генә. Хәнә Минһажева йәш саҡта академтеатрҙа артистка ине, "Айгөл иле"ндә Айгөлдө уйнап йөрөгән ҡыҙ ине. Уның менән дә кухняла осраштыҡ. Тора-бара ашымды кемделер күҙ уңымда тотоп бешерә башланым. Мәрйәм апай Бураҡаеваның бүлмәһе лә яҡын булды. Уның балалары, ейән-ейәнсәрҙәре килеп тулһа, ҡайһы ваҡыт миңә инеп йоҡлап торғайны. Мин дә уларға инеп сәй эсәм. Хор капеллаһы директоры, Әбйәлил башҡорто Мәрйәм дә күршемдә генә йәшәй. Шулай, нисектер, үҙенән-үҙе ауыл булып ойошоп йәшәй башланыҡ. Ишектәрҙе, ауылдағы һымаҡ, туҡылдатып тороу юҡ, кемгә теләйбеҙ, барабыҙ ҙа инәбеҙ. Кемдең нимә бешергәнен һәр ҡайһыбыҙ белеп торҙо.

Рухи ауылым шул рәүешле бер рухтағы кешеләрҙең берҙәмлегенән хасил булды. Бер аҙҙан беҙгә Гөлназ Ҡотоева килеп ҡушылды. Уны мин Сибайҙағы яҙыусылар ойошмаһына үҙемдең урыныма ҡалдырып киткәйнем. Бер аҙҙан ҡиәмәтлек ҡыҙым Гөлгөнә килде ятаҡҡа. Учалыла бергә эшләгән Гөлдәр Моратова менән аралаша башланыҡ, уларға башҡорт теле уҡытыусыһы, Мәсетле ҡыҙы Гөлсирә Ғәбсадирова килеп ҡушылды, унан - офтальмолог Фәниә Нафиҡова, "Алтын тирмә" телетапшырыуы редакторы Хәбирә Хәмиҙуллина һ.б. Ысынлап та, матур, бик сағыу ауыл барлыҡҡа килде. Дөйөм ҡала мунсаһына аҙна һайын бергәләп йөрөй башланыҡ.

**Ауыл тормошонаң мәшәҡәттәре күп осраҡта ижад итергә лә ҡамасаулай. Беләүебеҙсә, һеҙҙең продуктив эшләүегеҙ тап шул осорға тура килә.**

- Бик күңелле йәшәнек. Мин "Ватандаш" журналында эшләнем, шул уҡ ваҡытта яҙырға ла өлгөрҙөм. Хәҙер аптырайым, ҡайһы ваҡытта "Бөйрәкәй"ҙе яҙғанмындыр. Ятаҡ - ул шундай урын, бер һүҙ ҙә әйтергә өлгөрмәйһен, ул ауылдағы һымаҡ шундуҡ таралып өлгөрә.

**Тағы ла шундай парадоксаль күренеш бар: шарттар булмаған һайын яҡшыраҡ, күберәк яҙыла…**

-"Таңсулпан апай, һин "Бөйрәкәй"ҙе нисек яҙҙың икән, һинең яҙыу өҫтәлең дә юҡ ине бит", - тип аптыраны бер саҡ Гөлназ Ҡотоева. Өҫтәлем булыр ине лә ул, өҫтәлде ҡуйыр урыным булманы. Бында килгәс тә иң тәүҙә журнал өҫтәле алдым, ул әле лә йоҡо бүлмәмдә ултыра. Мин өйрәнгән шул өҫтәлемдә яҙа алам - өйрәнгәнмен. Байтаҡ драмаларым, балалар өсөн әҫәрҙәрем, "Илекәй" повесы ла шунда яҙылды.

Ятаҡта бер генә бүлмә булһа ла, ул шартлы рәүештә бер нисә "бүлмәгә" бүленгән. Диван ултырған яҡ йоҡо бүлмәһе, ашай торған өҫтәл яғы кухня тип атала. Беҙ кемдәндер бүлмәһенә барып инһәк, уның йоҡо бүлмәһенә үтмәйбеҙ һәм был беҙҙең өсөн яҙылмаған ҡанун ине. Ятаҡта йәшәгәндә Салауат Юлаев премияһы алдым, шатлыҡ уртаҡлашырға мәжлес үткәрҙем. Унда ятаҡта комендант булып эшләүсе яҡташым Бибисара Азаматова ла ҡатнашты.

**Рәйес Түләк менән дә һеҙ унда ныҡ аралашып йәшәнегеҙ?**

- Мин Рәйестең бүлмәһенә инеп сәй эсергә ярата инем, ул да миңә сәй эсергә килә ине. Рәйестең бүлмәһенән ниндәйҙер бәхтәлек, ыҫпайлыҡ аңҡып торҙо. Уның бүлмәһендә сәй эсһәң, йәмшәйгән аураларың төҙәйеп, ҡотайып сығып кителә торғайны.

**Таңсулпан ауылы ятаҡтан фатирға күсеп килгәс, ниндәйерәк үҙгәрештәр кисерҙе? Ятаҡтан кемдәр бында эйәреп килде, кемдәр менән араларығыҙ өҙөлмәнеме, яңы ауылдаштарығыҙ барлыҡҡа килдеме?**

- Бында күсеп килеү бик ауыр булды, сөнки, беренсенән, әйткәнемсә, ятаҡ тормошо ауыл тормошона яҡын ине һәм мин унда 9 йыл йәшәп ташлағайным. Икенсенән, бында килгәс, урындағы микрорайонға өйрәнеп китеү ауырыраҡ булды. Тегендә янда ғына "Башҡортостан"сауҙа үҙәге, ауылдан килтереп ҡаймаҡ, эремсек һаталар. Ишек төбөндә сәләм бирееп тороусы эскеселәргә лә өйрәнеп бөткәйнек. Улар араһында шағирҙар ҙа, йырсылар ҙа бар ине.

Рухи ауылымды тулыландырыу маҡсатында был микрорайонда йәшәүселәрҙе ашҡа ала башланым. Ауылыма Зөһрә Ҡотлогилдина, Фәрзәнә Ғәбәйҙуллина, Ринат Камал өҫтәлде, һин, Әхмәр, Фәйрүзә килен менән килеп ҡушылдығыҙ. Әбйәлилдән Гөлнур Фақиева, Сибайҙан Роза Хамматова, Баймаҡтан Луиза Дәүләтшина, Зилә Мортазина минең ауылым аҫабалары.

Бында килгәс, ятаҡтағы ауылым ҙурайҙы. Ятаҡта бәләкәй генә бүлмәмә лә ҡунаҡ йыя торғайным, бында килгәс, мөмкинлектәрем киңәйҙе. Алһыу Бәхтиева ла ятаҡта бүлмә аша ғына йәшәгәйне, әле бер йортта, бер "ауылда" йәшәйбеҙ. Алһыу яҡташым булғас, уның менән үҙебеҙ генә аңлашҡан лаҡаптарыбыҙ, тел-ләғәтебеҙ бар. Уйынлысынлы һөйләшһәк тә, бербереБеҙҙе ныҡ аңлайбыҙ.

**Һеҙҙең ҡорға инеп, ауылығыҙ кешеһе булып китә алмаусылар бармы?**

- Ундайҙар ҙа бар. Улар араһында студент саҡтан аралашып йәшәүсе таныштарым да бар. Бәлки, улар минең ауылым кешеһе булырға теләмәүселәрҙер. Күрәһең, беҙҙең бирелеребеҙ килешә алмағандыр.

**Тағы ла бер әйтем бар, уны атайым мәрхүм әйтә торғайны: "Ауылы берҙең ҡәүеме бер". Йәғни бер ауыл кешеләре бер ҡәүем, бер халыҡ булырға тейешле. Был мәсьәлә нисек тора?**

- Минең ауылда икенсе ҡәүем кешеһе юҡ. Икенсе милләт кешеләре менән аралашам, тик улар минең ауыл кешеләре түгел. Улар менән аралашып, татыу йәшәһәм дә, улар менән табындаш, арҡадаш була алмайым шул инде, сөнки минең ауылдаштар - рухташтар.

Минең баҡсам да бар. Баҡса ла үҙенә күрә ҡыҙыҡ ҡына ауыл бит ул.

**Таңсулпан ауылының йәйләүе тиегеҙ…**

- Эйе, баҡсамда ла тәүҙән үк милләттәштәремде табып алдым. Вил тигән ағай ҡатыны Сәүиә менән шундуҡ саҡырышырға тотондоҡ. Кисттәрен бер-беребеҙгә килеп йырлашып та ултырабыҙ. Стәрлебаш ауылының Ҡабыҡҡыуыш ауылынан Илһам тигән егет булды, уның менән дә ныҡ аралаштыҡ. Кисә генә шул хаҡта уйланым: нишләптер, ат кешнәшеп таныша тигәндәй, башҡорттар тиҙ генә бер-береһен табышып, рухи ауыл барлыҡҡа килтерә һалалар. Эргәмдә генә башҡа милләт кешеһе йәшәй, ишеген дә асҡаным юҡ. Үрҙә әйткәнемсә, беҙҙең мөнәсәбәттәр насар түгел, тик улар менән бер ауыл булып ойоша алмайбыҙ. Осрашҡан һайын сәләм бирешәбеҙ, тик сәйҙәр эсешә алмайбыҙ. Тап шуның өсөн дә "Ауылы берҙең ҡәүеме бер" тигәндәрҙер. Башҡорт кешеһе ауылдан ҡалаға килеп, үҙенең рухи мөхитен, йәғни ауылын ҡормайынса йәшәй алмай, ә башҡалар йәшәй. Беҙ хис менән йәшәгән халыҡ. Милләтебеҙҙең йөрәге ауылда тибә. Беҙҙең тәүҙә күңел аралаша, аҡыл түгел.

**Ауылығыҙҙан күсеп китеүселәр бармы?**

- Бар, әлбиттә. Ауылыма килгәндәрҙең барыһы ла ваҡыт һынауын үтә алмай. Минең ауылымдың девизы: "Ябайлыҡта - бөйөклөк!" Әгәр ҙә шул сифатты тота алмаһалар, битлек кейеп килһәләр,

**✓ *Әсәйем дә кешенең битенән алырға ярамай ти ине. Ҡайһы берәүҙәр "Мин тура һүҙлемен, ҡарап тормайым, йөҙөнә бәреп әйтәм", тип кешенең йөҙөн йырта. Әсәйем был ҡылыҡты инҡар итте.***



ундайҙар үҙҙәренән үҙҙәре күсеп китергә мәжбүр.

**Осраҡлы кешеләр килеп инеүе бармы һеҙҙең ауылға?**

- Ундайҙар булһа ла, оҙаҡ тотҡарланмайҙар. Сөнки минең ауылға килеүселәр ихласлыҡҡа ла имтихан тота. Фальш, яһалмалыҡ үҙен тиҙ һиҙҙерә. Яҡшы кеше булып оҙаҡ уйнап булмай. Ул ауылда етмешенсе йылдарҙа тапҡан кешеләрем дә бар. Уларҙың кем булыуы, ҡайҙа эшләүе бөтөнләй мөһим түгел. Учалынан килгән апһындарым да бар әле унда.

**Унда сама менән нисә кеше йәшәй?**

- Бер ҙә генә һанағаным юҡ. Улар өйөмә ишек шаҡымайынса, рөхсәт һорамайынса килеп инә алған кешеләр. Хатта ҡайһы бер туғандарының да ти был. Ауылдан сығып китеүемә 50 йыл үтеп китһә лә, улар атлай алмаç ерҙән атлап, бүләктәрен тотоп килеп еткән. Бына күршелек хаҡы. Икенсенән, уларҙың улайтып клубҡа йөрөр саҡтары ла түгел. Тимәк, улар мине һаман үҙҙәренең күршеһе итеп тоя. Хатта ки ауылда өйөбөҙ ҙә ҡалмаһа ла, нигеҙ генә һерәйеп торһа ла.

**Булат ағай Рафиҡовтың "Өйһөҙ ҡалған тауыштар"ы һымаҡ инде?**

- Эйе, улар мине һаман күрше тип һанай. Кеше ғүмер буйы имтихан тота, сәғәт һайын, минут һайын. Беҙ, асылда, кеше булырға имтихан тотоп йәшәйбеҙ. Бының өсөн рухи ауылдар ҙур терәк булып хеҙмәт итә. Тимәк, минең атай-әсәй, кеше булараҡ, имтиханды яҡшы тапшырған. Күршелып китеүселәр улар бөтәһе лә бер тамырҙан, бер заттан булғандар. Беҙҙең шәжәрә буйынса Күсей ауылы халҡы бер-береһенә туған. Икенсенән, йән тартмаһа ла, ҡан тарта. Бына беҙҙең урамда йәшәүселәр барыһы ла ете быуын эсендәге туғандар. Аҫҡы урамда иһә ситтән килеүселәр бер-ике генә ғаилә. Бер-берең тураһында хәстәрлек күреп йәшәү элек-электән туғанлыҡ ептәрен нығытҡан. Кеше аралашмаһа, һыуына башлай. Усаҡтағы утты һаҡларға ынтылабыҙҙыр ҡалаларҙа үҙ рухи ауылдарыбыҙҙы барлыҡҡа килтереп.

**Ҡайҙа йәшәһәк тә шулайбыҙ, сөнки ҡалаға килгәндә тотош ауылыбыҙҙы үҙебеҙ менән күсереп алып килә алмайбыҙ бит инде?**

# БУЛЫП...

## булмай

ул ауылда булмауы бар. Мин Өфөлә туғандарым юҡ тип әйтмәйем, әммә рухиәт ауылым кешеләре бөтөнләй башҡалар. Сөнки күптәр был ауылда оҙаҡ тора алманы.

**Хәҙер аралашыуҙың мөмкинлектәре киңәйҙе бит инде. Таңсулпан ауылы кешеләрен бергә туплап, ватсаптамы, башҡа урындамы үҙегеҙҙең чатығыҙҙы асырға уйламайһығыҙмы?**

- Ваҡытты күп ала бит. Тик шуны ғына ҡарап ултырырға тура киләсәк. Икенсенән, минең ауылдан бүленеп сыҡҡан Яңауылдар ҙа байтаҡ ҡына. Һәр ауылдың янында үҙенең Яңауылы була. Ул ауылдарҙа мин уҡытҡан студенттар йәшәй. Әле бына кафеға саҡырҙылар. Былтыр Учалы районының Ахун ял йортона ҡунаҡҡа алғайнылар. Улар Өфөлә йәшәүсе студенттарым.

**Учалы, Сибай ҡалаларында йәшәгәндә лә ундай ауылдарығыҙ булғандыр...**

- Ауылһыҙ булмай. Әлеге ауылымдың ҙур өлөшө Учалыла, Сибайҙа, Баймаҡта ҡалды. Әсәйем мәҙрәсәлә уҡып, ғәрәпсә, фарсыса белгән диндар кеше булды. Ул, Ҡөрьәнде ете тапҡыр сыҡҡан кеше булараҡ, совет уҡытыусыһы булһа ла, дини конституция буйынса йәшәгән. Ул: "Тегендә барғас "Күршең менән татыу йәшәнеңме?" тип һорарҙар", - ти ине. Минең күршеләрем менән насар мөғәмәлә иткән, талашҡан саҡтарым булманы. Ауыл клубында 60 йәшемде үткәргәндә ике яҡтан ике күршебеҙ килде. Береһенең ҡан баҫымы юғары, икенсеһе саҡ атлай. Береһе ике бүләк килтергән. Ниңә улай итеүе хаҡында әйткәйнем, ул: "Һинең 70 йәшеңдә булмайым, шуға бурыслы булып ҡалмайым", - ләремдең миңә шундай ихтирамы ата-әсәйемә ҡарата булған ихтирамы ла.

**Ауылда тыуып үҫеп, ҡалаларға килеп төпләнгән башҡорттарҙың үҙ рухи ауылдарын барлыҡҡа килтереп йәшәүенең сәбәп-маҡсаттары нимәлә икән? Мин үҙемсә шулай уйлайым: барыбер ҙә беҙҙең көсөбөҙ берҙәмлектә һәм туғанлыҡта, шулай түгелме? Беҙ бит осраған бер кеше менән һаулыҡ һорашып өйрәнгәнбеҙ, ә ҡалала көн һайын урамда яңы кешеләр осрай һәм беҙҙә ятһыныу хисе көндән-көн көсәйә бара...**

- Эйе, беҙҙең ауылға нигеҙ һалып, бер ауыл кешеләре бу-

- Эйе, сөнки ауылһыҙ йәшәй алмайбыҙ. Ахырызаман китабында шулай әйтелгән: заман ахыры етеп барғанда кеше үҙенең ҡан ҡәрҙәше менән түгел, рухи ҡәрҙәше менән ҡатнашыр, тиелгән.

Үҙгәртеп ҡороуҙар ваҡытында мин юлдарҙа күп йөрөнөм. Өлкән улым ул ваҡытта Питерҙа уҡый ине. Аҙыҡтүлектең наҡыç сағы, хатта картуфҡа тиклем күтәреп алып китә торғайным. Ул заманда бөтөн кеше юлда булды, Үзбәкстандан китәләр, Ҡаҙағстандан китәләр. Юлда тыңлаусы кеше булһа, бер ваҡытта ла һөйләмәç серҙәрен дә һөйләп китәләр. Шул тыңлаусы кеше, ахыры, мин булдым. Бер рус кешеһе юлда китеп бара, үҙенең ҡайҙа китеп барғанын да белмәй. Хәҙер Ҡаҙағстанда йәшәү мөмкин түгел, ти. Үҙе шунда тыуып үçкән. Ә ата-олаталарының тыуып үçкән ерен белмәй.

**Ҡунаҡ булыуҙан тыш, Таңсулпан ауылының ниндәй йолалары бар?**

- Һәр ваҡыт ҡунаҡ булышып ҡына йәшәп булмай инде ул. Йолаларға килгәндә, кешене аңларға, нисек бар шулай ҡабул итеп, мохтаж булһа, ярҙам итергә тырышыу. Әсәйем дә кешенең битенән алырға ярамай ти ине. Ҡайһы берәүҙәр "Мин тура һүҙлемен, ҡарап тормайым, йөҙөнә бәреп әйтәм", тип кешенең йөҙөн йырта. Әсәйем был ҡылыҡты инҡар итте. Кешенең йөҙөн йыртыуҙы ул күңел рәнйетеүгә тиңләне.

Шуға күрә минең рухи ауылымда йөҙ йырта торған кешеләр килеп инһә лә, унда оҙаҡҡа ҡала алмай. Таңсулпан ауылының конституцияһында шулай яҙылған.

**Тәрбиә эше был ауылда нисек ҡуйылған?**

- Мин йәш саҡта янымда гел оло ҡатындар йөрөнө. Хәйҙәр бер мәл миңә: "Һинең хатта йүнле әхирәттәрең дә юҡ бит", - тигәйне. Һанап киткәйнем: "Улар әбейҙәр бит", - ти. Унын ҡарауы, хәҙер эргәмдә йәштәр. Шуға күрә уларға һәр ваҡыт яҙылған һәм яҙылмаған ҡанундарыбыҙҙы әйтә барам. Килешмәгән яҡтары булһа, матур ғына итеп әйтеү сараһын да табам. Мәҡәлдәрҙе лә файҙаланам. Ауылым кешеләре бөтәһе лә яҡшы кейенергә тейештәр. Сөнки беҙ республиканы барлыҡҡа килтергән төп халыҡ. Үҙебеҙҙе бөтөн яҡтан да үрнәк итеп күрһәтергә тейешбеҙ, бурыслыбыҙ.

**Һеҙҙең ауылға урамдамы, башҡа урындамы осраҡлы рәүештә танышып килеп инеүселәр бармы?**

- Ундайҙар күп, шуларҙың береһе Ғәбсадирова Гөлсирә. Алһыу Бәхтиева менән ятаҡтан уҡ бер ауылдабыҙ тигәйнем. Унан һуң, Алһыуҙың тормошонда күп нәмәләр үҙгәрҙе, тик ул үҙе үҙгәрмәне. Нисек бар, шулай, шаян, позитив, ҡунаҡсыл булып ҡалды. Баймаҡ ҡатын-ҡыҙҙарының иң гүзәл сифаттарын Алһыу үҙендә туплаған һымаҡ. Өләсәһенән, ата-әсәһенән алған ҡиммәттәрен Алһыу үҙендә һаҡлап йәшәй. Зөһрә Ҡотлогилдина менән бер үк ваҡытта уҡыныҡ, ул минән бер генә курс түбән уҡыны. Ул мандолинола уйнап, матур йырлай ине, матур шиғырҙар, мәҡәләләр яҙа ине. Әммә бер йортта йәшәй башлағансы унын матур кешелек сифаттарын белмәгәнмен икән. Күрше булып йәшәп, унын һәм тормош иптәше Нияз мәрхүмдең бик гүзәл кешелек сифаттарын үҙемә астым.

**Таңсулпан ауылында ҡалыр өсөн мотлаҡ үтәлергә тейешле шарттар ниндәй улар?**

- Беренсенән, һин бында ябай булып ҡалырға тейешһең. Эсең-тышың бер булыуы мотлаҡ, йәғни күлдәгең менән ике ҡат. Ҡасандыр, йәш саҡта, бер бөйөктөң әйткәндәре мине уйға һалғайны: "Әгәр ҙә ҙур бер ҡалала рөхсәт-фәлән һорамай, тәүлектең теләһә ни ваҡытында барып инеү мөмкин булған бер генә йорт, бер генә ишек булһа ла, ул ҡала һинең өсөн яҡын һәм ҡәҙерле була". Әгәр ҙә мин йәшәгән өй, мин көн дә асып инә торған ишек кем өсөндөр ана шундай икән, үрҙә әйткәнемсә, "Кеше" тигән бөйөк исемгә һынауҙы уңышлы үттем тигән һүҙ. Һәр хәлдә, минең өсөн шулай.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ әңгәмә ҡорҙо.**

## *ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

***Зөһрә Ҡотлогилдина, шағирә:*** Таңсулпан Ғарипова менән йәшәү күңелде байыта. Быға тиклем белмәгән нәмәләрҙе белеп ҡалаһың. Донъяға ҡарашы яңыса, үҙенсә. Башҡорт ҡатын-ҡыҙы булараҡ та, күбебеҙгә үрнәк ул. Саф башҡортса йәшәй. Табыны мул, ҡунаҡ саҡырырға ярата, ниндәй генә аш-һыу әҙерләмәй, тик милли ризыҡтар була табынында.

Ҡайһы бер кеше бер төрлө һөйләп, икенсе төрлө йәшәй, ә уның һүҙе менән ғәмәлдәре типә-тиң. Күп уҡый, урыç әҙәбиәтен генә түгел, донъя әҙәбиәте яңылыҡтары менән дә танышып бара. Ҡасан өлгөрәлер инде.

Бер мәл 9 майҙа Еңеү паркында атайымды иçләп күңелһеҙ уйҙарға бирелеп йөрөгәндә шылтыратты ла, кәйефһеҙ икәнемде белгәс: "Бирешмә, Зөһрә, беҙ бит фронтовик балалары. Һин төндә балҡыған Зөһрә йондоҙ, ә мин Таңсулпан, таңдың Зөһрәһе", - тип күңелемде балҡытып ебәрҙе. Мин Таңсулпан ауылында үҙемде яҡлаулы һәм һаҡлаулы итеп тоям.

***Алһыу Бәхтиева, Башҡортостандың халыҡ артисы:*** Ғүмер ҡыçҡа, шулай ҙа мин ул ауылдың мәңгелек булыуын теләр инем. Мин был ауылда үҙемә аҡыл йыям, уның тәжрибәһе аша тәжрибә туплайым. Был ауылда минең ҡыҙҙарым Таңсулпан исемле өләсәйле булып үçәләр. Әгәр ҙә мин ошо ауылдан сығып, ситтә йөрөп килһәм, йә булмаһа, сәйәхәт ҡылһам, ауылды һағынам. Сөнки унда мине аңлайҙар, яраталар, унда мине йәлләйҙәр. Унда мин илай алам, серҙәремде ышанып һөйләй алам. Ундай ауылдар күп булмай. Бәлки, ул ауылда йәшәргә теләгән кешеләр барҙыр, әммә ул ауылда йәшәр өсөн ниндәйҙер кимәлгә күтәрелергә тейешһең. Ул кимәлдә булмаған кеше арбанан төшөп ҡала, был ауылдан китергә мәжбүр. Мин был ауылда йәшәүем менән бәхетлемен. Иç киткес рәхәт был ауылда, унан китке килмәй.

***Гөлсирә Ғабсадирова, хаҡлы ялдағы уҡытыусы, халыҡ табибәһе:*** 2006 йылда мин бер селтәрле кампанияла тренинг үтә инем. Уның шарты буйынса урамда кешене туҡтатып, телефондарын алырға кәрәк ине. Шунан Ленин урамы буйлап китеп барһам Таңсулпан апай менән Хәйҙәр ағай торалар. Башҡорт теле уҡытыусыһы булараҡ, Таңсулпан апайҙың "Бөйрәкәй" романын уҡығайным, үҙе менән яҡындан таныш түгел инем. Шулай итеп танышып киттек. Шул ваҡыттан алып бына 17 йыл инде уның менән апалы-һеңлеле һымаҡ йәшәйбеҙ, әлхәмдүлиллаһи шөкөр. Уның тормош юлымда осрауына шатмын, бәхетлемен. Ниндәй генә ауыр хәлдәр булманы, шуларҙы йырып сығырға иң тәүҙә үҙе, унан әçәрҙәре ярҙам итте һәм итә.

"Бөйрәкәй"ҙе мин 7 мәртәбә уҡып сыҡтым. Әле һаман да китапты ҡулыма алам да, Мәҙинәнең, башҡа геройҙарҙың нисек итеп тормош һынауҙарын үткәнен зиһенем аша үткәрәм. Минең алда торған ауырлыҡтар уларҙыҡы менән сағыштырғанда бик бәләкәй генә булып ҡалалар.

Таңсулпан апай бисмиллалап тәмле итеп башҡорт халыҡ аштарын бешерергә ярата. Унан бик күп аш-һыу әҙерләргә өйрәндем. Уның аша бик күп матур күңелле кешеләр менән таныштым. Һөҙөмтәлә уның дуçтары минең дуçтарым булып бөттөләр. Аллаһы Тәғәлә уға һөләттәрҙе йәлләмәй биргән. Халыҡ йырҙарын да еренә еткереп, үҙәккә үткәреп башҡара ул. Уның ҡул ҡаушырып буш ултырған мәлдәрен күргәнем дә юҡ. Яңыраҡ мин Баймаҡта Таңсулпан апайҙың тыуған яғында, Күсейҙән Түбәгә йөрөп уҡыған юлдары буйлап йөрөп ҡайттым. Шунда уны нығыраҡ аңланым да шикелле. Уның уҡыуға ынтылышы шул тиклем көслө булған. Тау-таш араһынан көҙ, ҡыш, яҙ булһынмы, 25 саҡрым араны үтеп йөрөп уҡыр өсөн ниндәй йөрәкле булырға кәрәк! Йәшәү көсө унда көслө, ул халыҡ медицинаһын яҡшы белә, төрлө гимнастикалар эшләй, үҙен-үҙе ҡарай. Тормоштоң ҡайһы яғын алһаң да, мин унан бик күп нәмәгә өйрәндем. Ул осрағаны өсөн Хоҙайға мең рәхмәтлемен.

✔ *Үҙ сәхнәһен уйнап, шаршау артына сыҡҡан арала сабыйын ҡосаҡлап йылытырға, йән һәм тән йылыһы менән дауаларға тырыша актриса, әммә ярҙам итә алмай, әсәһенең ҡулында көйө йән бирә балаҡай.*



СӘХНӘ ЗЫҢҒЫРЫ

# ҠЫҘЫҠЛЫ ТАРИХЫ БАР...

## Салауат башҡорт драма театрының

**Салауат дәүләт башҡорт драма театры тарихы 1933 йылдан башлана. Ҡарамалы район клубы нигеҙендә ойошторолған Ауырғазы колхоз-совхоз театрының ҡасандыр Салауат ҡалаһына күсереләсәген бер кем дә күҙ алдына ла килтерә алмай, әлбиттә. Ә тарих былай була.**

### Тәүге режиссер - тәүге еңеү

1931 йылдың 15 декабрендә ҡабул ителгән "Башҡорт милли театрын үҫтереү тураһында"ғы документҡа ярашлы, һәр ауылда тип әйтерлек драма түңәрәктәре ойоштоҙола ул йылдарҙа. Ауырғазы районы Ҡарамалы ауылында ла эшләй башлай ундай түңәрәк. Түңәрәккә йөрөүселәр Кәрим Тинчуриндың "Зәңгәр шәл" пьесаһын сәхнәгә сығарғас, партком секретары һәм труппаның етәксеһе Ғөбәйҙулла Яҡуповтың хәстәрлеге менән коллектив ҙурыраҡ сәхнәгә - Талбазыға күсерелә. Шулай барлыҡҡа килә Ауырғазы колхоз-совхоз театры. Директоры итеп - Барый Сафинды, художество етәксеһе итеп башҡорт театр сәнғәтенең иң тәүге профессиональ актерҙарының береһе, талантлы режиссер, башҡорт телен яҡшы белгән рус ҡыҙы Елизавета Сыртланова-Шляхтинаны тәғәйенләйҙәр. Сәхнә ҡанундарынан йыраҡ булған һәүәскәр артистар өсөн ул театрҙа уҡыу студияһы ойоштороп ебәрә. Ҡарамалынан килгән труппаға Өфө сәнғәт училищеһын тамамлаған йәштәр килеп ҡушыла. Исемдәре театр тарихына яҙылған ирлеҡатынлы Гәзизә Насырова һәм Бикташ Кәлимуллиндар, Зәкиә һәм Ибраһим Әхмәровтар, Ғөбәй Яҡупов, Солтан Ҡунаҡбаев, Тимер Баҡыев, Авзал Аҡбашев, Бикә Йәғәфәрова, Хәйҙәр Баев, Ғәләм Ғәлиев, Фәйзи Вәхитов, Нәкиә Алтынбәкова, Айһылыу Ғәниева, Нәғимә Дәүләтшина, Шәрифә Мөхәмәҙиева, Гөлсөм Мирғәсимовалар менән бергә барлығы 27 кешенән торған коллектив туплана.

1936 йылда Ауырғазы театры Афзал Таһировтың "Себерәк Ғилман" спектакле менән Өфөлә уҙған Республика театр фестиваленда (ул ваҡытта театрҙар араһындағы был бәйгене олимпиада тип атайҙар) ҡатнаша һәм лайыҡлы беренсе урын ала. Ижади бәйгеләге еңеү театрҙың артабанғы яҙмышына ҙур үҙгәрештәр индерә. Башҡорт хөкүмәте театрға декорациялар эшләтеү, костюмдар тектереү өсөн ҙур финанс ярҙамы күрһәтә һәм йөк машинаһы ("полуторка") бүләк итә. Быға тиклем ат, үгеҙ егеп гастролдәргә йөрөгән артистар полуторка менән алты район халҡын, ал-ял белмәй, театр сәнғәте өлгөләре менән таныштыра башлай. Көнөнә ике-өс ауылда спектакль ҡуялар. Ҡайнап йәшәй театр: ике бригадаға бүленеп, халыҡ араһында үҙ миссияһын үтәй.

### "Ете ҡыҙ театры"

1941 йылдың 22 июнендә лә театр артистары, халыҡ менән бергә яланға сығып, һабантуй байрамы уҙғара. Һуғыш башланыуы тураһындағы ҡот осҡос хәбәрҙе лә сәхнәлә тыңлайҙар... Мобилизация иғлан ителеп, ике-өс көн үтеүгә, Ауырғазы колхоз-совхоз театрының ир-егеттәре, 1936 йылда бүләккә бирелгән полуторкаға тейәлеп, һуғышҡа китә. Театрҙың директоры һәм баш режиссеры Ғөбәйҙулла Яҡупов та хөкүмәт биргән брондан баш тарта... Театр яҙмышы ни бары ете актриса ҡулында тороп ҡала. Ир-егеттәр составы булмау сәбәпле, һуғышҡа тиклем барған байтаҡ спектаклдәр репертуарҙан төшөп ҡала. Ирҙәр ролен дә башҡара ҡыҙҙар, нисек тә булһа сәнғәт усағын һаҡлап ҡалырға, көн дә спектаклдәр ҡуйырға, халыҡтың рухын һындырмаҫҡа, һуғыш хәсрәттәрен аҙға ғына булһа ла онотторорға тырыша улар. Аяуһыҙ, әммә һоҡланғыс яҙмыш яҙа ете ҡыҙ. Ауылдан ауылға тәүҙәрәк ат егеп йөрөйҙәр, аттарҙы ла һуғышҡа алып китеп бөткәс, үгеҙ егергә тура килә. Үгеҙҙәре астан үлгәс, реквизиттар тейәлгән арбаға үҙҙәре егеләләр, әммә көнөнә өс-дүрт ауылды урайҙар барыбер! Ауыл халҡы, үҙҙәренең ауыҙҙарынан өҙөп, булған ғына ризыҡтары менән бүлешә, ҡыҙҙарҙың күңелдәрен күрергә тырыша. Тик клубтар һыуыҡ. Бер йылды Зәкиә Әхмәрованың яңы тыуған сабыйы, үпкәһенә һыуыҡ тейеп, ауырый башлай. Үҙ сәхнәһен уйнап, шаршау артына сыҡҡан арала сабыйын ҡосаҡлап йылытырға, йән һәм тән йылыһы менән дауаларға тырыша актриса, әммә ярҙам итә алмай, әсәһенең ҡулында көйө йән бирә балаҡай. Гастролдән ҡайтып китергә ярамай - Күгәрсен районы Мораҡ ауылында ер ҡуйынына тапшыралар сабыйҙы. Ә кисен ошо уҡ ауыл сәхнәһендә комик роль уйнарға кәрәк актрисаға. Уйнай, тамашасыны көлдөрөргә тырыша - унның ниндәй ҡайғыға тарығанын белгән зал үкһеп илай...

Был ауыр осорҙа Башҡортостандағы 39 колхоз-совхоз театрынан өс кенә күсмә театр: Баймаҡ (хәҙерге Сибай башҡорт драма театры), Белорет (хәҙерге Стәрлетамаҡ дәүләт рус театры) һәм Ауырғазы театрҙары ғына үҙҙәрен һаҡлап ҡала ала. Байтаҡ йылдар үткәс, театрҙың 75 йыллығына арнап, үҙе лә 1959-1961 йылдарҙа театрҙың директоры булып эшләгән драматург Нәжиб Асанбаев ошо ҡыҙҙарҙың легендаларға торошло яҙмышы тураһында 30 йылға яҡын Салауат ҡалаһының мәҙәниәт системаһында (шуларҙың 16 йылы театрҙың директоры вазифаһында) эшләү дәүерендә Наилә Абдулхай ҡыҙы Сәфәрғолова (Байкова) йыйған тарихи-документаль материалдарға таянып, "Ете ҡыҙ" драмаһын яҙа. Уны Айрат Абушахманов сәхнәләштерә, драма буйынса Кирстен Гайнет "Ете ҡыҙ театры" документаль фильмын төшөрә. Был фильм 30 тапҡыр Халыҡ-ара фестивалдәрҙә ҡатнаша һәм юғары наградаларға лайыҡ була. Театрҙы һаҡлап алып ҡалыусы ете ҡыҙҙың - Зәкиә Әхмәрова, Гәзизә Насырова, Нәкиә Алтынбәкова, Айһылыу Ғәниева, Шәрифә Мөхәмәҙиева, Гөлсөм Мирғәсимова, Нәғимә Дәүләтшинаның исемдәре Ауырғазы колхоз-совхоз театры тарихы ғына түгел, донъя кимәлендәге һүҙ һәм кино сәнғәте тарихы ла ул хәҙер. Ул ҡыҙҙарҙың исемдәре тура мәғәнәлә лә ташҡа яҙылған: театрҙың 80 йыллығын билдәләгән көндәрҙә ул йылдарҙағы етәксе Наилә Абдулхай ҡыҙы Сәфәрғолова театрҙың әлеге бинаһы алдына ошо ҡыҙҙарҙың исем-шәрифтәре уйылып яҙылған иҫтәлекле таш ҡуйҙырта. "Фашистарҙы дөмөктөрөп, өс-дүрт айҙан ҡайтырбыҙ, ә һеҙ театрҙы һаҡлап ҡалырға, көн дә спектаклдәр ҡуйырға һүҙ бирегеҙ!.." тиҙәр уларҙың ирҙәре һуғышҡа киткәндә. Биргән анттарына тоғро ҡала ҡыҙҙар: ейәндәре уҡып иларлыҡ яҙмыш кисерәләр, әммә театрҙы һаҡлап алып ҡалалар.

### Салауатҡа күсенәбеҙ! Яңыса эшләйбеҙ!

Һуғышҡа киткән артистарҙың һәм театр хеҙмәткәрҙәренең унауһы яу яланадрында ятып ҡала. Тәүге директорҙар - Барый Сафин менән Ғөбәйҙулла Яҡупов та ҡайта алмай. Етәкселекте 1943 йылда ауыр яраланып, контузия алып ҡайтып төшкән Ибраһим Әхмәровҡа тапшыралар. Һуғышҡа тиклем театр 6 районды хеҙмәтләндерһә, һуғыштан һуң коллективҡа 20-нән артыҡ районға барып спектаклдәр ҡуйыу бурысы йөкмәтелә. Йылына 330-ҙан ашыу спектакль уйнайҙар. 1955 йылда театрға "Газ-51" машинаһы бирелә һәм ошо машинаға тейәлеп, театр артистары һәм хеҙмәткәрҙәре тулы состав менән Салауат ҡалаһына күсенә. Талбазы ауылы халҡы илайилай хушлаша улар менән. Артистар үҙҙәре менән 7 кәзә, 4 һарыҡ, 17 тауығын да күсерә. Нинә Салауатҡа, нинә Стәрлетамаҡҡа түгел, тиһегеҙме? Эйе, ул заманда Стәрлетамаҡта ла профессиональ театр булмай - 1919 йылда Стәрлетамаҡта барлыҡҡа килгән театр 1922 йылда уҡ Өфөгә күсерелгән була. Күсенеү тураһында һүҙ сыҡҡас, ауырғазылар ҙа үҙҙәренә яҡыныраҡ булған Стәрлетамаҡ варианты на туҡтала, әммә Салауат ҡалаһы етәкселәре етеҙерәк хәстәрләй йәш ҡаланың мәҙәни килә- сәген: ҡалаға күсенәсәк ғаиләләрҙең торлаҡ мәсьәләнән хәл итеп, Парк урамындағы ике ҡатлы йорттоң тотош бер подъезын бирә коллективҡа. Театрҙы йәш ҡаланың ул замандағы берҙән-бер мәҙәни үҙәге - "Төҙөүселәр" клубы үҙ ҡанаты аҫтына ала. Ауырғазы колхоз-совхоз театрының яңы тарихы Салауат ҡала башкорт драма театры исеме менән яҙыла башлай. Тиҙ арала халыҡ һөйөүен яулаған театрға бер йылдан дәүләт театры статусы бирелә.

Дәүләт театрына - дәүләтсә мөнәсәбәт тә тейеш. Республика Мәҙәниәт министрлығы Салауат театрына баш режиссер итеп Мәскәү дәүләт театр институтының режиссерҙар бүлеген тамамлаған Ишембай егете Хәлит Усмановты ебәрә. "Станиславский алымы менән, яңыса эшләйбеҙ!" тип, артистарға легендар режиссерҙың сәхнә алымдарын өйрәтеүҙән башлай ул эшен. Актерҙарҙан уйын түгел, сәхнәлә геройҙарының яҙмышы менән йәшәүҙәрен талап итә. Спектаклде тамашасы "ошонда һәм әле" барған хәл-ваҡиғалар итеп ҡабул итергә тейеш, шулай ғына ышандырып була тамашасыны! Яңыса уйналған "Ғәлиәбануу"ҙа төп героиняны Минигаян Әмирханова исемле актриса уйнай. Ул ролгә шул тиклем инә, спектаклдән һуң ҡала халҡы уны Ғәлиә исеме менән йөрөтә башлай, ғүмеренең һуңғы көнөнә тиклем Ғәлиә апай Әмирханова булып ҡала ул. "Сәхнә - минең шатлығым да, ҡайғым да... Сәхнә мине бәхетле лә, бәхетһеҙ ҙә итте... " - тип күҙ йәштәре аша тағы бер тарих һөйләйәсәк Ғәлиә апай. Гастролдәрҙә йөрөгәндә, унын берҙән-бер бөртөк ҡыҙы сәхнә артында үҙе өсөн ҡулайлаштырылған "карауат"тан осоп төшөп имгәнә, аҡылға зәғиф булып ҡала. Ғүмере буйы ауырыу бала ҡараған әсәгә сәхнәләрҙән бәхетле актриса булып йылмайыу нисек бирелгәндер - унынын ул үҙе генә белә. Үлем түшәгенә йығылғас ҡына инвалидтар йортона тапшырта ул ҡыҙын. Гөлнараны ундай ауырыуҙар йәшәгән махсус йортҡа алып барып ҡалдырғандан һуң, коллегалары килеп, уны тынысландырып китәләр: шарттар матур, персонал итәғәтле. "Исмаһам, баҡый донъяла балам өсөн тынс булырмын, - ти Ғәлиә апай. - Унда бер юлы ике төрлө роль уйнап булмайҙыр ул...".

### Салауаттарҙы - Өфөгә, өфөләрҙе - Салауатҡа...

Хәлит Усманов театрҙың кимәлен профессиональ юғарылыҡҡа күтәрә. Уға алмашҡа йәш режиссер Рафаэль Әйүпов килә һәм ул да театрҙы үҫтереү өсөн бар көсөн һала. Төрлө йылдарҙа Вәзих Сәйфуллин, Лек Вәлиев, Ким Нәҙершин, Әнүәр Нурмө-



✓ ***"Фашистарҙы дөмөктөрөп, өс-дүрт айҙан ҡайтырбыҙ, ә һеҙ театрҙы һаҡлап ҡалырға, көн дә спектаклдәр ҡуйырға һүҙ бирегеҙ!.." тиҙәр уларҙың ирҙәре һуғышҡа киткәндә. Биргән анттарына тоғро ҡала ҡыҙҙар...***



хәмәтов, Гөлдәр Ильясова, Илдар Вәлиев, Эдуард Шәйехов, Олег Ханов кеүек талантлы режиссерҙар эшләй Салауатта. Һәр береһе театр тарихына ҡабатланмаҫ матур биттәр яҙа. Профессиональ режиссерҙарҙың һәм актерҙарҙың үҙенсәлекле мәктәп-лабораторияһына әйләнә Салауат театры: килеп торалар, үҫеп, йондоҙ булып балҡып торалар - уларҙы ҙурыраҡ ҡалаларға, ҙурыраҡ театрҙарға тартып алып торалар. Лек Вәлиев баш режиссер булып эшләгән йылдарҙа һәр ерҙә көтөп алалар салауаттарҙы. Ҡаҙан ҡалаһы уларҙы алҡыштарға күмә, хатта Татарстандағы гастролдәрен ун көнгә оҙайтыуҙарын һорап, Өлкә комитетҡа хат яҙалар. Гастролдәр оҙайтыла, салауаттарҙы Татарстан, Башҡортостан гәзиттәре маҡтап яҙа. Өфөләге гастролдәренә лә халыҡ ағылып йөрөй, билеттар ике ай алдан һатылып бөткән була. Спектаклдәрҙән һуң артистарҙы сәхнәнән сығармай, оҙаҡ итеп ҡул сабалар.

Бер көндө тамашасылар залынан кемдер: "Салауаттарҙы - Өфөгә, өфөләрҙе - Салауатҡа!" - тип ҡысҡырып ебәрә. Ошо хәлдән һуң Салауат театрының ике режиссеры менән бергә Шамил Рәхмәтуллинды, Лүзә һәм Хәй Фәхривтарҙы, Зөлфирә һәм Иршат Вәлиевтарҙы, шулай уҡ ирле-ҡатынлы Риф Мозаһитов менән Флүрә Хәйбуллинаны, Сәүиә Сираеваны Өфөгә - Башҡорт дәүләт академия драма театрына алалар. Үкһеҙ етем ҡалған Салауат театрына актер Рим Баяновты режиссер итеп ҡуялар. 1965 йылда Өфө сәнғәт училищеһын тамамлап килгән бер төркөм актерҙар араһында Әнүәр Нурмөхәмәтов та була. "Театр тип килһәк, ул бер барак булып сыҡты. Үҙ бинаһы булмағас, коллектив һәр ваҡыт гастролдәрҙә, хатта репетициялар ҙа юлда эшләнелә ине", - тип хәтерләйәсәк ул йылдарҙы һуңынан ун ике йыл режиссер, баш режиссер булып эшләгән Нурмөхәмәтов. 1987 йылда ул да "Башҡортостан" телевидениеһына эшкә күсә, Салауат актерҙары яҙмышын йәш, әммә һәләтле режиссер Гөлдәр Ильясова ҡулына тапшыралар. Профессиональ үҫеш тә, бер-бер артлы директор һәм режиссерҙарҙың алмашынып тороуы ла Салауат театрының төп проблемаһын хәл итмәй: ул һаман "тәгәрмәс өҫтөндә" йәшәй, "Төҙөүселәр" клубынан һуң "Алмаз", "Нефтехимик" мәҙәниәт һарайҙарында өйҙәш булырға, егерме йылдан артыҡ Космонавтар бульварындағы 13-сө һанлы йортта урынлашҡан магазиндың беренсе ҡатында көн күрергә лә тура килә. Айҙар буйы гастролдәрҙә йөрөү дауам итә, гастролдәрҙең географияһы ла киңәйә: Татарстан республикаһы, Силәбе, Ырымбур, Ҡурған, Екатеринбург өлкәләре, Пермь крайы...

## "Өйлө" булыу тарихы

Театрҙың үҙ йорто булыу тарихы һәм егерменсе быуаттан егерме беренсе быуатҡа күскән осоро Марс Шәрип улы Яппаров һәм Наилә Абдулхай ҡыҙы исемдәре менән бәйле. Театр һынлы театрҙың 30 йыл буйы бинаһыҙ йәшәүе мине лә ҡыҙыҡһындырҙы һәм мин был турала Наилә Сәфәрғолованың үҙенән ентекләп һораштым. 1985 йылда, институтты тамамлағас, йүнәлтмәлә күрһәтелгән адрес буйынса буласаҡ эш урынын эҙләп, өс көн бер тирәлә урала ул. Үтеп барыусыларҙан һорап ҡарай, ә уларҙың Башҡорт драма театры тураһында ишеткәндәре лә юҡ. Был хәлгә аптырай ҙа, ғәрләнә лә сәмле ҡыҙ. Тапмай, ҡайтып та китер ине, тап теге магазинлы өйҙөң бер подъезы алдында йыйылышып торған ҡатын-ҡыҙҙар араһында Әлмира Ҡыуатованы танып ҡала - гастролдән ҡайтып төшкәндәр. Шулай башлана уның Салауат театры менән танышыуы. 1988 йылда, Салауат ҡалаһы Мәҙәниәт бүлеге мөдире вазифаһына тәғәйенләнеүе менән эшен театр проблемаларын хәл итеүҙән башлай. Театрҙың баш режиссеры Гөлдәр Ильясова, рәссамы Михаил Шнейдерман менән бергә Мәҙәниәт министрлығына, Ҡала хакимиәтенә хаттар яҙалар, мөмкин булған бөтә трибуналарҙан бер үк һүҙҙе һөйләйҙәр: Салауат театрына айырым бина кәрәк! Ни өсөн актерҙар һаман өс-дүрт ай буйына тәгәрмәс өҫтөндә йәшәйҙәр, уларҙың бит ғаиләләре, балалары бар! Артистарҙың тормошон еңеләйтер өсөн нимә лә булһа эшләнергә тейеш! Театрҙың үҫеше өсөн дә бина кәрәк! Ҡаланың йөҙө булырға тейешле театрҙың магазин бинаһында көн күреүе башҡа һыймаҫлыҡ хәл бит! Төрлө кимәлдә йыйылыштар үткәрәләр, халыҡтан ярҙам һорайҙар, уларға "Аҡбуҙат" башҡорт ойошмаһы активистары килеп ҡушыла. Йыйылыштарҙа Наилә Абдулхай ҡыҙының микрофонын һүндергән, уға һүҙ бирмәгән, хатта трибунаға үткәрмәгән саҡтар ҙа була. Үҙҙәрен ишетһендәр өсөн, ҡаҡмаған ишеге, мөрәжәғәт итмәгән етәкселәр ҡалмай. Мәскәүҙән дә киләләр. "Культура" гәзитендә Салауат театры актерҙары менән "Тәгәрмәстәр, тәгәрмәстәр... " исемле репортаж баҫыла - ишетәләр, мәсьәлә, ниһайәт, ыңғай хәл ителә. 1992 йылда Салауат театры биналы була...

Стәрлетамаҡта башҡорт театры асыла, Гөлдәр Ильясованы унда баш режиссер итеп тәғәйенләйҙәр, ул, үҙ сиратында, Салауатта ҡанат нығытҡан бер төркөм актерҙарҙы һәм легендар рәссамды үҙе менән ала. Салауат театрын тергеҙеү өсөн, баш режиссер итеп 1952-1968, 1973-1979 йылдарҙа режиссер булып эшләп киткән Вәзих Сәйфуллинды ҡайтаралар. Бина бар, премьералар ҙа үтеп тора - зал ярым буш, халыҡ театрға йөрөп өйрәнмәгән. Театр эшмәкәрлегенә иғтибарҙы көсәйтеү, халыҡты театрға йәлеп итеү өсөн Наилә Абдулхай ҡыҙы Салауатта республика кимәлендә "Театр яҙы" фестивале үткәреү идеяһын тәҡдим итә һәм улар, театр директоры Марс Яппаров менән, был юлы ҡулға-ҡул тотоношоп, 1993, 1995 йылдарҙа "Театр яҙы" фестивале үткәрәләр. Халыҡ фестиваль спектаклдәренә ағылып йөрөй. Шулай формалаша Салауатта театрға йөрөү мәҙәниәте. 2003 йылда фестиваль яңынан әйләнеп килә Салауатҡа: ярайһы тауышалып өлгөргән театр бинаһына ремонт кәрәк була. Фестивалде асыу тантанаһына Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов килә - Президентты ремонтланған, йыһазландырылған театрҙа ҡаршылайҙар. Мортаза Ғөбәйҙулла улы театрҙың сәхнәһен дә ремонтлау өсөн финанс ярҙамы күрһәтә, ремонттан һуң "сәхнә туйына" ла килә.

1996 йылда театрҙың актерҙар составы Өфө сәнғәт академияһында Салауат театры өсөн махсус уҡытылған Гөлли Мөбәрәкова етәкселегендәге курсты тамамлап ҡайтҡан һәләтле йәштәр менән тулыландырыла. Салауат театрының үҙ Салауаты булырға тейеш, тип, М.Кәримдең "Салауат" трагедияһын сәхнәләштерә Наилә Сәфәрғолова. Спектакль уңышлы сыға. Премьераға килгән Мостай Кәрим сәхнәләге Салауатын яратып ҡабул итә. Спектакль Өфөлә күрһәтелгәндән һуң үткәрелгән түңәрәк өҫтәлдә театр тәнҡитселәре спектаклде юғары баһалай. Гастролдәрҙе ябыу тантанаһында, Мостай Кәримдең тәҡдиме буйынса, Салауат ролен уйнаған актер Ишбулат Иҫәнбаев, режиссер Наилә Сәфәрғолова, рәссам Курбандурды Чарыев Салауат Юлаев премияһына тәҡдим ителәләр. Дәүләт комиссияһына хатты Мостай Кәрим үҙе яҙа. Әммә Наилә Сәфәрғолова, үҙ эшенә үҙе ҡаршы төшөп, премияға тәҡдим ителгән икенсе бер дәғүәсе өсөн хуплау хаты яҙып ебәрә. Ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та: "Салауат" трагедияһы Салауат Юлаев премияһын ала алмай ҡала - Наилә тәҡдим иткән кандидатураны хуплайҙар. Сәхнәлә Салауат образын һынландырғаны өсөн Ишбулат Иҫәнбаевҡа Башҡортостандың атҡаҙанған артисы исеме бирелә.

2009 йылда Наилә Абдулхай ҡыҙы М.Горький исемендәге Ырымбур дәүләт театрында эшләп йөрөгән Олег Хановты Салауат театрына саҡырып алып ҡайта, өс йылдан ул да Өфөгә күсә. Олег Закир улы театрҙан киткәндән һуң атайһыҙ ҡалған һымаҡ була театр. 2014 йылда Наилә Абдулхай ҡыҙы ла, үҙ балаһылай күреп яратҡан театры менән хушлашып, Өфөгә күсенә. Театр йәнә шып етем ҡала...

## Театрҙың бөгөнгөһө һәм... киләсәге

Эйе, йәш, талантлы режиссерҙар килә театрға, ситтән дә саҡырып килтерәләр. Килә торалар, ике-өс йыл эшләйҙәр ҙә киңерәк офоҡтарға ҡарап оса торалар... Улар киткән һайын Салауат театры ҡанаты ҡайырылған ҡош, тамырҙары аҡтарылып ташланған ағас һымаҡ ҡанһырып ҡала... "Башҡорт халҡы аҡтамыр кеүек. Аҡтамырҙың бер генә киҫәге ерҙә ҡалһа ла..." - тигән юлдар иҫкә төшә... Тамырҙар менән бәйле тағы бер иҫтәлек бар Салауат театры тарихында. Талбазынан киткән ваҡытта ете ҡыҙ, уларҙы оҙатырға килгән халыҡ менән бергә, тирәктәр ултырта. Тирәктәр үҫер, уларҙың шауында беҙҙе ишетерһегеҙ, улар мамыҡ осорғанда, беҙҙе иҫләрһегеҙ, тиҙәр. Урман булып ҡалҡҡан тирәктәр кемгәлер ҡояш күрһәтмәй башлаймы, әллә башҡа сәбәбен табалармы, тирәктәрҙе ҡырҡып, тамырҙарын аҡтарып ташлап, аллеяны һөрөп үк ҡуялар. Салауат театрын да тап шулай тамырынан йолҡоп утап торалар, ә ул тағы ҡалҡа, тағы күтәрелә... Исемен йөрөткән батыр һымаҡ: яраларын дауалай ҙа тағы ҡалҡа, тағы күтәрелә... Театрҙың һуңғы йылдарҙағы уңыштары - шуға дәлил. Мостай Кәримдең "Ауыл адвокаттары" повесы буйынса сәхнәләштерелгән "Ерҙәштәр" (2016 й.), Островскийҙың "Һәр аҡыл эйәһе ябайлыҡҡа эйә" пьесаһы буйынса ҡуйылған "Глумов" (2017-2018 й.) спектакле (икеһенең дә режиссеры Антон Федоров), әллә күпме фестивалдәрҙә ҡатнаша, "Алтын битлек" Бөтә Рәсәй милли премияһына тәҡдим ителеп, миҙгелдең иң яҡшы спектаклдәре исемлегенә инә. Олжас Жанайдаровтың пьесаһы буйынса "Бер, ике, өс" спектакле (2019-2021 йылдар, реж. И. Ҡаҙаҡбаев) "Туғанлыҡ", "Наурыҙ", "Ремесло", "Артмиграция", "Федерация" Бөтә Рәсәй һәм Халыҡ-ара фестивалдәренең дипломдарына лайыҡ була. Төрлө фестиваль сиктәрендә Ҡаҙан, Мәскәү, Грозный ҡалаларында, Үзбәкстан, Ҡырғыҙстан, Ҡаҙағстанда, Төркиәлә, Ҡытайҙа ла сығыш яһайҙар. 2014 йылда театр эргәһендә бер төркөм йәш артистар көсө менән "Арлекин" (етәксеһе - Радик Ғәлиуллин) балалар студияһы ойошторола. Хәҙер ул - Бөтә Рәсәй фестивалдәрендә танылыу тапҡан, 2021 йылда Берлинда уҙған "Алтын аҫҡыс" Асыҡ Халыҡ-ара конкурсында Гран-при яулаған өлгөлө балалар студияһы.

2021 йылдан театрҙы Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Айбулат Миңлеғәле улы Ҡотошов етәкләй. Сибай дәүләт башҡорт драма театрында егерменән артыҡ роль ижад иткән, Сибай ҡалаһының театр-концерт берекмәһенең директоры, Ишембай районы хакимиәтенең мәҙәниәт бүлеге начальнигы вазифаларында һынау үткән тәжрибәле етәксе ул. Уның өсөн театр - сикһеҙ мөғжизәгә эйә ижад майҙаны, татлы ғазап та, йәшәү мәғәнәһе лә, бәхет тә. Ҡатыны Минзилә Ҡотошова ла актриса. Уларҙың бында килеп төпләнеүе уйҙарымды Салауат театрының инешен - Ауырғазы районы Ҡарамалы ауылында драмтүңәрәк ойоштороусы ике ғаиләне - Ғәзизә Насырова һәм Бикташ Кәлимуллиндарҙы, Зәкиә һәм Ибраһим Әхмәровтарҙы иҫкә төшөрә. 90 йыллыҡ дәүерендә күпме ғаилә яҙған театр тарихын: Гөлшат һәм Рим Зыязетдиновтар (Зәкиә һәм Ибраһим Әхмәровтарҙың ҡыҙы һәм кейәүҙәре), Флүрә һәм Риф Мозаһитовтар, Флүрә һәм Альберт Мостафиндар, Зөһрә һәм Рим Әминовтар, Гөлсәсәк һәм Яҡуп Шәриповтар, Наҙгөл һәм Ишбулат Иҫәнбаевтар, Гөлфирә һәм Нәфис Сафиуллиндар, Рәмзиә һәм Рафаэль Ғәйнуллиндар, Азалия һәм Фидан Шәйәхмәтовтар, Нәркәс һәм Мираҫ Йомағужиндар, Минзилә һәм Айбулат Ҡотошовтар, Юнир һәм Фәүнә Ғәйнуллиндар... Салауат театрының "ғаилә театры" тип йөрөтөлөүе - театрҙың яҙылмаған ҡануни дәрәжәһе.

Бөгөнгө көндә театрҙың актерҙар труппаһында 28 кеше. Улар араһында ғүмерҙәрен театрға арнап төрлө маҡтаулы исемгә лайыҡ булғандар ҙа, ижад юлына яңы аяҡ баҫҡан йәштәр ҙә бар. Сәхнә ветераны, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Флүрә Мозаһитоваға 88 йәш булһа, иң йәш актриса Гөлкәй Хәсәноваға ни бары 20 генә. Төп көстө Өфө сәнғәт институтында Салауат театры өсөн Әхтәм Абушахманов етәкселегендә махсус уҡытылған төркөмдөң актерҙары тәшкил итһә лә, коллективҡа төрлө йылдарҙа килеп ҡушылыусылар араһында Ғабдулла Ғиләжев, Гөлли Мөбәрәкова, Таңсулпан Бабичева, Фәрдүнә Ҡасимова, Лек Вәлиев кеүек театр корифейҙары класын, Рима Харисова, Азат Нәҙерғолов уҡытҡан режиссерҙар бүлеген, Щепкин исемендәге Мәскәү театр институтын тамамлаусылар ҙа бар. Һәр остаздың, һәр режиссерҙың үҙ алымы, үҙ системаһы, үҙ ижади лабораторияһы - төрлө мәктәп, төрлө ҡараштар осрашҡан ер ул Салауат театры. Йылдар дауамында күп режиссерҙар һәм актерҙар өсөн үҫеш трамплины булып йәшәүенең сере лә, бәлки, шундалыр...

Театрҙың бөгөнгө баш режиссеры Лиана Ниғмәтуллина диплом практикаһын Олег Ханов етәкселегендә ошо театрҙа үтә, Олег Закир улы ҡуйған спектаклдәрҙә ассистент булыу бәхете тейә уға. Салауат театрына эшкә лә уны тап Олег Закир улы саҡыра. Театрҙа актриса булып эшләгән йылдарында йәш, тынғыһыҙ, креатив ҡарашлы режиссерҙар - Зиннур Сөләймәнов менән Илсур Ҡаҙаҡбаевтар мәктәбен үтә ул. 2020 йылда уның үҙен баш режиссер итеп тәғәйенләйҙәр. Өс йыл эсендә үҙен өмөтлө режиссер итеп танытып өлгөрә. "Ете ҡыҙ" спектаклендә ете актрисаның береһен һынландырып, бай тарихлы театр яҙмышын йөрәге аша үткәргән ҡыҙ театрҙың бөгөнгөһө һәм киләсәге өсөн яуаплы икәнлеген тойоп ижад итә, юғары маҡсаттар менән йәшәй, туҡтауһыҙ эҙләнә, эксперименттарҙан ҡурҡмай. "Беҙҙең театр сәхнәләштерә алмаған әҫәр, беҙҙең актерҙар һынландыра алмаған ролдәр юҡ", - ти ул - үҙ-үҙенә лә, актерҙарына ла ышана. Салауат театрының алҡыштары ла, балҡыштары ла алда әле, тимәк.

Килер бер көн, театр алдында легендар ете актрисаны хәтерләткән ете һын һәйкәл булып ҡалҡып сығыр, театр һөйөүселәр был донъяны бик иртә ҡалдырып киткән Рим Зыязетдинов, Риза Мәһәҙиев, Нәркәс Йомағужина кеүек сәхнә йондоҙҙарының исемдәре яҙылған Йондоҙҙар аллеяһы буйлап үтер. 90 йыллыҡ тарихы булған театр ошондай хөрмәткә хаҡлы. Салауат театрының Салауат премияһына лайыҡ үҙ Салауаты ла булырға тейеш. Киләһе юбилейҙар тарихы булып яҙылыр ул Салауат.

**Ғәлиә КӘЛИМУЛЛИНА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# КЕМ НИСЕК УЯНА?

■ Цитрус емештәре һәм шоколад иртән тиҙерәк уянырға булышлыҡ итә, ти дөрөҫ туҡланыу буйынса эксперт Марина Мельникова. Гел йоҡоһо килеп торған кешегә әфлисун ярҙам итә, сөнки был емештең һутында С витамины күп, ул иһә организмды энергия менән тәьмин итә. Әммә цитрустарҙы ас ҡарынға ашарға ярамай, был ашҡаҙан сей яраһына килтереүе бар. Ҡара шоколад та уятып ебәреү сифатына эйә, унда какао 55 проценттан кәм түгел, какао бәхет гормоны эндорфин менән стресҡа ҡаршы көрәшеүсе серотонин бүленеп сығыуға булышлыҡ итә. Шулай ҙа иртәнге аш өсөн иң яҡшыһы - бутка, тигән фекерҙә эксперт, ундағы углеводтар яй эшкәртелә, тиҙ туйҙыра һәм бер нисә сәғәткә энергия менән тулыландыра. Бутҡанан һуң икенсе урында йоморҡа тора. Ул минерал, витамин, протеинға бай, улар организм тулы ҡеүәтендә эшләһен өсөн кәрәк. Ошо ризыҡтарға йәшелсәләр, кальций, калий һәм D витаминына бай һөт ризыҡтарын да ҡушырға кәрәк.

■ Ҡәһүә - иртән уяныу өсөн шулай уҡ яҡшы эсемлек. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡәһүә яратыусылар 2-се типтағы диабет, бауырҙы май баҫыу, яман шештең ҡайһы берҙәре менән яфаланмай. Яңы үткәрелгән һынауҙар ҙа самаһын белеп эскәндә, был эсемлек сәләмәтлек өсөн файҙалы икәнлеген асыҡлаған. Башлыса тарттырылған тәбиғи ҡәһүәнең эффекты өйрәнелһә лә, беҙ эсергә күнеккән ирей торған ҡәһүәлә лә кофеин, һөйәктәр һәм мускулдар өсөн кәрәкле магний, ҡан баҫымын нормала тотоусы калий, нервы системаһы өсөн мөһим булған В3 витамины бар. Кемдер эсемлек холестерин кимәлен күтәрә, тиер. Тап яңы тартылған һәм туркала ҡайнап сығыу хәлендә еткерелгән ҡәһүәлә тәбиғи кафестол һәм кавеол бар. Улар, ысынлап та, холестерин бүленеп сығыуға булышлыҡ итә. Шуға ла ирей торған ҡәһүә был йәһәттән яҡшыраҡ та булып сыға. Көнөнә 1 сынаяҡ ҡәһүә эсәктәр сәләмәтлеге өсөн дә файҙалы.

■ Аш һеңдереү юлдарының өҫкө өлөштәре яман шешен булдырмау өсөн көнөнә 1 йөшел банан ашау ҙа етә. Бөйөк Британия ғалимдары ошондай һығымтаға килгән. Өлгөрөп етмәгән банан, һоло һәм кукуруз онтаҡтары, ҡуҙаҡлылар, макарон менән дөгө, бешкән һыуыҡ картуфта тотороҡло крахмал бар, ул аш һеңдереү ферменттары тәьҫиренә бирешмәй. Бындай крахмал, күҙәнәклек (клетчатка) кеүек уҡ, ас эсәктә түгел, ә туҡ эсәктә эшкәртелә, йәғни, ундағы файҙалы бактерияларға ризыҡ була. Крахмалдың бындай төрөнөң һаҡлауҫы тәьҫире халыҡ-ара кимәлдә үткән тикшеренеүҙәрҙә асыҡланған. Унда бөтөн донъянан Линч синдромы - яман шеш хәүефе юғары булған генетик сир менән яфаланған кешеләр ҡатнашҡан. 1999 йылдан алып улар ризыҡ менән бергә 30 грамм тотороҡло крахмал порошогы ашаған, был 1 йөшел бананға тиң. Тикшеренеүҙәрҙең тәжрибә өлөшө тамамланғандан һуң 10-20 йыл үткәс, ғалимдар уларҙың сәләмәтлеген анализлап ҡараған. Эсәк яман шеше юғалмаһа ла, ҡыҙыл үңәс, ашҡаҙан, үт ҡыуығы юлдары, ашҡаҙан аҫты биҙе яман шеше хәүефе 60 процентҡа кәмегән. Иң ҡыҙығы, был тәьҫир тотороҡло крахмалды ҡабул итеүҙе туҡтатҡандан һуң 10 йыл үткәндән һуң да юғалмаған.

БАҠСАСЫ ҺҮҘЕ

**Яҙыусыларҙың баҡсаһы булыуға күнеккәнбеҙ, уларға ижад итеү өсөн тынлыҡ, тыныслыҡ, яңғыҙлыҡ кәрәк. Бигерәк тә ижадының иң әүҙем осоро совет осорона тура килгән шәхестәребеҙҙең бер-берсеһенә күршеләш баҡсасы булыуҙары хаҡында күп ишеткәнбеҙ, уҡығанбыҙ, ошо йәһәттән күп кенә лаҡаптар ҙа тыуған. Әммә бына бейеүсенең, бейеүсенең дә ниндәйе - бөгөн 82 йәшендә лә матурлығын, һығылмалылығын, һөйкөмлөлөгөн юғалтмағаны шәп баҡсасы булыуына хатта күптәр ышанмаҫ та. Сәхнә өсөн генә яратылған был гүзәл ҡатын-ҡыҙ - РСФСР-ҙың атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы Рәшиҙә ТУЙСИНА менән уның ошо шөғөлө тураһында һөйләштек.**

# "ХӘҘЕР МӘСЕТ ЮЛЫНДАМЫН"

➔ **Рәшиҙә апай, нәфис ҡуллы бейеүсенең баҡса соҡоп йөрөүенә күптәр ышанмаҫ та әле. Ҡасандан баҡсалы булып киттегеҙ?**

- Мин Ф. Ғәскәров етәкләгән Халыҡ бейеүҙәре дәүләт ансамблендә бейенем. Ул мине үҙе һайлап алды, һөнәремдә ныҡ даланлы булдым тип иҫәпләйем. Бер йыл ғына эшләгәс тә, Мәскәүҙә Кремль һарайында концерт ҡуйғанда Фәйзи Әҙеһәм улы йүгереп килде. "Туйсина, Кремль һорай, "Заһиҙә"не бейейһең", - ти. Кремль сәхнәһенә ҡурҡып ҡына сыҡһам да, баянсы Әлфис ағайҙың уйнауына йөрәгем ирене, бик яҡшы ғына итеп бейеп сыҡтым. Сыҡтым да, сәхнә артында торам, зал тап-тын. "Эх, мине упҡынға ырғыттылар, иртәрәк сығарҙылар был бейеүгә", - тип уйлап та бөттөм, дәррәү ҡул сабыуҙар ишетелде. Ошо ваҡиғанан һуң бейеүсе булараҡ минең яңы тормошом башланды. "Заһиҙә"не ҡайҙа ғына бейемәнем мин - Советтар Союзының бөтөн төбәктәрендә лә, сит илдәрҙә лә.

Әммә бейеүсенең ижади ғүмере һанаулы, бигерәк тә ансамблдә. Мин дә 38 йәшем тулғас, хаҡлы ялға киттем. Мин бит һуғыш осоронда тыуғанмын. Бөтөн эште эшләй беләм, утын да ярам, бесән дә сабам. Бәләкәйҙән ауылдың әбейҙәренә һыу ташый инем. Әле 82 йәшемдә, һаман шулай матурһың, тиҙәр. Ә 38 йәштә кеше бөтөнләй йәш була. Мин дә ул ваҡытта дәртлемен, матурмын, көсләмөн, тик кенә ултырғы килмәй. Шул ваҡытта күпләп баҡса участкалары бирә башлағайнылар. Мин дә бер апайҙың, баҡса һатам, тигәнен ишетеп ҡалдым. Үҙемсә, ер менән булышып ҡарайым, тип уйлайым инде. Бер күршем: "Һин, башҡорт ҡыҙы, үҙ ереңде үҙең һатып алһаң, мин һине ихтирам итмәйәсәкмен", - тигәс, аптыраным һәм ул ваҡыттағы урман хужалығы министры Абдулов Марсель Хәбип улына барҙым. Дим районында 4 сутый ер бирҙеләр. Ул ерҙән ундым мин, элекке питомник урыны булған. Шул тиклем ундырышлы! Шулай ҙа байтаҡ ыҙаландым, бер яғында йырын ине, уны күмдерҙем, сөнки сүп-сар ташлайҙар ине. Эргәһендә күле бар, яҙын килеп тороп һыу баҫа, минең бөтөн баҡсам ағып китә ине. Шулай ҙа бирешмәнем, өй ҙә, мунса ла төҙәнөм, ҡоҙоғон да ҡаҙҙырҙым. Йортомда урындығым да бар, унда ултырып сәй эсергә лә, йоҡларға ла, намаҙ уҡырға ла була.

Әле һөйләгәндә генә рәхәт, әммә быларҙың барыһы ла минә ҙур көс, тырышлыҡ һәм ныҡышмалылыҡ менән бирелде. Минең яҡшы мәғәнәләге енмешлегем, һәр эшкә енеүсе булыр өсөн тотоноуым уңыштың нигеҙе булғандыр. Эргәмдә ярҙам итеп торған кешеләр ҙә күп булды, Аллаға шөкөр.

Кеше ялҡауланып, булдыра алмайым, тип ултырһа, бер нәмә лә булмай. Шуға инанғанмын: бар ауырлыҡтар ҙа ваҡытлыса, шулай уҡ бар шөғөлдәр ҙә ваҡытлыса. Бөгөн мин элеккесә баҡсала бик бил бөкмәйем, унда башлыса улым Хәлил, ейәнем Фәрхәт эшләй.



➔ **Башлап баҡсағыҙға нимә сәстегеҙ, хәтерләйһегеҙме?**

- Баҡсамда тупраҡ шул тиклем шәп ине. Шағир әйтмешләй, ал да, икмәккә һыла ла аша - нимә сәсһәң, шул үҫә. Һыу булмаһа ла, күршеләрҙән ташып һибәм. Сейәләрем дә, алмаларым да ерегеп китте, кишерен дә сәсәм. Шул ергә рәхмәтемде белһәгеҙ! Саҡ ҡына ҡуҙғатһаң, саҡ ҡына ярҙам итһәң, бөтөн нәмә үҫергә тора. Йорт, мунса төҙөгәндә ныҡ ярҙам иткән бер туған Рәшит ағайымдың бер саҡ шул тиклем ҙур булып үҫкән кишергә ҡарап: "Быны күргәҙмәгә ҡуйһаң, енәһең, ә һин уны йыуып, шырт-шырт итеп ашап ултыраһың", - тигәне хәтеремдә.

Сейәләрем, алмағастарым да гөрләп үҫә инеләр. Баҡса үҫтергәндә гел генә аҡыллы кешеләрҙең кәңәшенә ҡолаҡ һала йөрөнөм. Бер танышым: "Бер генә төп ҡара миләш ултырт", - тине. Ысынлап та, алмағас та, сейә лә берәр төп етә, унан артығы кәрәкмәй. Ҡояш яратҡаны - ҡояшлы, күләгә яратҡаны күләгәле яҡта үҫә икәнен дә кешеләр кәңәше аша белдем. Рәшит ағайым Баймаҡ питомнигынан ҡурай еләге алып килгәйне. Баҡтиһәң, ҡурай еләге ағасын артыҡ ныҡ таҙартып, ҡырҡып, ҡуҙғытып торорға ярамай икән. Ул саҡта уларҙың тамырҙарына зыян килә. Минең ҡурай еләктәрем эре, һалҡындарға тиклем емеш бирә. Алма ағасын һыу баҫҡанда ныҡ зыянлай. Сейәне инде ҡырҡып торорға тырыштым, юғиһә, бар баҡсаны баҫып алырға ғына тора.

➔ **Сәскәләр үҫтерҙегеҙме, ниндәй сәскәләр яратаһығыҙ?**

- Мин пион һәм рауза сәскәләрен оҡшатам. Пиондарым йыл да сәскә ата. Улар ҡояшты ярата. Әле бына подъезд алдындағылары сәскәләрен ҡойоп бөттө. Баҡсалағылары сәскә атмаған әле. Сәскә лә ныҡ иғтибар талап итә шул. Ваҡытында ҡарамаһаң, һыу һипмәһәң, көҙгөләккә япмаһаң, улар ҙа үҫмәй. Раузалар бигерәк тә. Уларҙы күпләп үҫтергән мәлдәр бар ине, ҡуйы сейә төҫөндәгеһен бик ярата инем, бик һирәк осрай торған сорттары ла булды. Хәҙер баҡсаға йыш барып та булмай, ә сәскәләргә иғтибар күп кәрәк, шуға ла янырып сәсмәйем, электән үҫкәндәре лә етерлек.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бер ҡасан да буш ултыра белмәгән тынғыһыҙ заттан инде Рәшиҙә апай. "Баҡса менән шөғөлләнеү ауырыраҡ, хәҙер үҙемә ниндәй лайыҡлы ғына шөғөл табайым икән, тип уйланым бер мәл. Электән мәсеткә йөрөргә ярата инем, хәҙер намаҙ уҡыу, ураҙалар тотоу күңел һиллеге бирә. Ошолай йәшәү рәүеше үҙемә ныҡ оҡшай, үҙенән-үҙем дин юлына килдем", - ти ул бөгөн. Заманында бөтөн донъяны үҙенә һоҡланыулы ҡараш менән бағырға мәжбүр иткән һирәк талант эйәһенә бәрәкәтле ғүмер һәм сәләмәтлек теләйбеҙ.**

Ләйсән ВӘЛИЕВА
әңгәмәләште.

ҺАҠ БУЛ!

# ХӘҮЕФЛЕ МӘЛ



**Эҫелек һәм "асыҡ тәҙрәләр" миҙгеле башланыу менән балаларҙың тәҙрәнән ҡолауы тураһындағы хәбәрҙәр йышая. Ошо көндәрҙә өс йәшлек бала тәҙрәнән ҡолап, һәләк була.**

Баш ҡаланың Революцион урамында күп фатирлы йорттоң 14-се ҡатында йәшәгән Вәлиевтар ғаиләһендә тәрбиәләнгән игеҙәктәргә йәш ярым һәм улар тирә-яҡты әүҙем үҙләштерә, өйрәнә. "Бер килгәнендә педиатр тәҙрә эргәһендә кресло торғанын күреп, балаларҙың уға менеү ихтималлығы тураһында иҫкәртте һәм уны күсереп ҡуйырға кәңәш итте. Беҙ икенсе юл һайланыҡ - тәҙрәне 10 сантиметрға ғына асыу мөмкин булған махсус тростар һатып алдыҡ, шулай уҡ өҫтәмә йоҙаҡ ҡуйҙыҡ", - ти ҡыҙҙарҙың әсәһе Регина.

Әммә был ғына бәхетһеҙлектән һаҡлай алмай. Фажиғәле хәлдәрҙең күпселеге бер-берсеһенә оҡшаш - ата-әсә йәки олатай-өләсәй нимәгәлер әүрәй йәки икенсе бүлмәлә була, бала тәҙрә тупһаһына менеп, ҡыҙыҡһынып, тәҙрәне аса йәки себен-серәкәй инмәһен өсөн ҡуйылған селкаға таяна һәм урамға ҡолай.

Өфө ҡалаһының Граждандарҙы яҡлау идаралығы балаларға асыҡ тәҙрәнең хәүеф сығанағы икәнен аңлатырға кәрәк, ти. Шулай уҡ уларға тәҙрә тупһаһында уйнарға рөхсәт итмәскә, тәҙрә тупһаһына менерлек предметтарҙы алыҫҡа ҡуйырға кәрәклеген иҫкәртә. Тәҙрәләргә махсус фиксаторҙар ҡуйыу йәки уларҙың тотҡаһын алыу ҙа яҡшы. Иң мөһиме - тәҙрә асыҡ булған бүлмәлә балаларҙың яңғыҙын ҡалдырырға ярамай!

Әгәр бала нисектер тәҙрә уйымына барып етеп, һеҙ быға шаһит булһағыҙ, шунда уҡ "112" номерына шылтыратып, аныҡ адресты, нисәнсе ҡат икәнлеген, тәҙрәләрҙең ҡайһы яҡҡа ҡарағанын хәбәр итегеҙ.

Рәмил ӘХТӘМОВ.

*✓ Мин хужабикәгә шылтыратам, һәм "Беҙ бөгөн өйҙә юҡ, аҙаҡ килерһегеҙ", тигән яуап ишетәм. Аптырауҙан ултыра төшә яҙам. Мин һатып алыусыны Хәйбулла һынлы Хәйбулланан саҡырып килтергәс, өйҙә түгелдәр, имеш.*

СӘХИФӘНӘН

# ШУНДАЙ ҺӨНӘР БАР!



**Йорт һатып алырға теләүселәр менән көн һайын Нуғай бисҭәһе, Булгак, Осоргино, Шамонин урамдарынан буран туҙҙырып арҡырыһы-буйын ҡырҡ үтәм. Йөрөгән һайын бер ҡыҙыҡ ҡына күренеш күҙгә ташлана, һөйләһәң - һүҙ, төртһәң - күҙ, тигәндәй, һөйләмәһәм дә булманы инде.**

Йорт һайларға беренсе тапҡыр ғаилә хужаһы - ир кеше менән барам. Утыҙлаған объектты энәһенән ебенә тиклем, икенсе төрлө әйтһәк, нигеҙенән ҡыйыҡына тиклем тәфсирләп тикшерәбеҙ, ниндәй материал ҡулланғандар, ул ниндәй үлсәмдә икәнен белешәбеҙ, иҫәпләйбеҙ, ҡайҙа мунса, гараж, теплица ҡуйырға була, тип планлаштырабыҙ. Бер йә ике көндән шул утыҙ араһынан һайланған йортто инде ир һәм ҡатын менән бергәләп барып ҡарайбыҙ, ҡайҙа кухня, ниндәй обой һайларға, ҡайҙа балалар бүлмәһе икәнен билдәләп, күңелле генә һөйләшеп, хыялланып ҡайтабыҙ. Бер нисә көндән состав тулылана, командаға ҡайны-ҡәйнәләр, атай-әсәйҙәр ҡушыла. Шулай итеп, ҡайһы ваҡыт икешәр машина, йәғни кортеж менән тиҙәрме әле, барып төшәбеҙ бит әй. Шунан ҡаҙ бәпкәләре кеүек кенә теҙелеп, беҙҙең кеүектәр беҙгә тиклем үк һалған һуҡмаҡ буйлап, күҙебеҙ төшкән өйгә инәбеҙ. Йортҡа бер аҙ күҙ йүгерткәс, шунда уҡ ғаилә ағзалары кәңәш ҡорона йыйыла. Ир менән ҡатын тыңлап тора, ҡоҙалар йорттоң стена, ишектәрен ҡапшай, шым ғына түбәне байҡай, шамбо, ҡоҙоҡ бармы икәне менән ҡыҙыҡһына. Ә ике ҡоҙағый, йөҙҙәренә ғүмер буйы төҙөлөштә эшләгән белгес ҡиәфәте сығарып, умарта ҡортолай геүләп, кирбес йорттан ҡарағай йорт һәйбәт, тын алыуҙары рәхәт икәнен раҫларға тотона. Бер аҙҙан иһә был уйҙарынан дүнеп, ағас йорт хәҙер "бажалый не модно, етмәһә, йылдан-йыл баҫыла" тип, һәр береһе үҙенең һүҙен өҫкә сығарырға тырышып, бәхәсләшә башлай. Уларға беҙҙең көрттә бата-сума, тирләп-бешеп, береһе артынан икенсеһен энә күҙенән үткәргән утыҙ йорт та, ҡайһы ваҡыт йорттоң хаҡы һәм айлыҡ түләү ҙә ҡыҙыҡ түгел, тик уның һүҙе һуңғы аккорд булып яңғырарға тейеш - и баста! Шул мәлдә инде парламентер ролендәге мин ғали йәнәптәре тағы уртаға тороп, ике яҡты ла йайлап-майлап, хуплап, саҡ тынысландырырға тейеш...

Тимәк, риэлтор - ул, ҡайһы бер "аҡыллы" кешеләр уйлағанса, эт һуғарып, кеше аҡсаһына муйын һуҙып йөрөүсе генә түгел, ә кәрәк саҡта төҙөүсе лә, прораб та, дизайнер ҙа, хатта психолог та булып китеүсе икән... Әлбиттә, йәмәғәт, йорт һатып алыу күлдәк алыу түгел, көн һайын алмаштырып булмай, тикшереп, төбөнә тоҙ ҡойғанса һайлап алырға кәрәк. Кәңәш-төңәш итеү ҙә яҙыҡ түгел. Сөнки һайланған йорт ғаилә өсөн үҙендең ғүмерлек мөйөшөң, атай нигеҙе, әсәйҙең йылы усағы, ҡайнар ашы менән ассоциацияланасаҡ. Әммә ләкин...

- Хөрмәтле ҡоҙалар-ҡоҙағыйҙар, һеҙҙең балалар өсөн йән атып тороуығыҙға ла, матди яҡтан ярҙам итеүегеҙгә лә - афарин, әлбиттә, тик бер әтнәкәһе бар ине бит әле. Һайлаған йортта үҙҙәре күптән атай-әсәй булған, ир менән ҡатын дәрәжәһе алған кешеләр йәшәйәсәк. Улар үҙҙәренә оҡшаған фатирҙы һеҙгә тиклем үк йөрөп һайлаған һәм хөрмәт йөҙөнән һеҙгә үҙҙәренең күңеле ятҡан йортто күрһәтергә тип алып килгәндәр икән, әйҙәгеҙ, һайлау хоҡуғын да уларға ҡалдырайыҡсы... - Шулай тип тә әйтергә тура килә ҡайһы саҡта.

Йә булмаһа, икенсе миҫал. Бынығында инде ҡала фатирын һатып алыусыға күрһәтер өсөн иртәнге сәғәттәрҙә тәғәйен адресҡа киләбеҙ. Хужалары менән алдан һөйләшелгән булһа ла, домофондан шылтыратып, подъезға инә алмайбыҙ, ишетмәйҙәр. Мин кеҫә телефонынан хужабикәгә шылтыратам, һәм "Беҙ бөгөн өйҙә юҡ, аҙаҡ килерһегеҙ, пока", тигән яуап ишетәм. Аптырауҙан ултыра төшә яҙам: көнөнә биш шылтыратып, ун тапҡыр яҙып, ваҡытын үҙе билдәләп, "Әгәр бөгөн һатмаһаҡ, иртәгә һуң була", тип, тумыртҡа һымаҡ таҡылдап торған һөйкөмлө һөйәк мин һатып алыусыны Хәйбулла һынлы Хәйбулланан саҡырып килтергәс, өйҙә түгелдәр, имеш. Таң һарыһынан юлға сығып, Өфөлә фатир ҡарап, оҡшатһа, һатып алырға ниәтләгән апай менән улына уңайһыҙланып ҡарай-ҡарай, фатир хужаһы - ирҙең телефон һандарын йыям, үҙем уйымдан ғына хәйбуллаларҙың талаптарына яуап бирерлек бүтән фатирҙарҙы барлайым. Йәһәннәм тишегенән килеп, юлдары уңмай ҡайтһалар, улар алдында кем ғәйепле булып ҡала? Әлбиттә, риэлтор Айгөл инде, кем булһын, осрашыуҙы урын еренә еткереп ойоштора алмаған булып сығам бит...

Һәм ... Тадааамммм! Алды бит, ниһайәт, фатир хужаһы трубканы. "Нимә кәрәк, беҙ йоҡлайбыҙ, нимә ут сыҡҡан һымаҡ шылтыратаһың?" - тимәһенме миңә. Уларҙың фатирын һатырға ярҙам итер өсөн мин һатып алыусыларҙы ишек төбөнә килтереп, "Зинһар өсөн ишекте асығыҙ инде, беҙ бит һеҙгә аҡса менән килдек, инәйек инде", тип инәлеп торамсы. Шулай итеп, мең бәлә менән фатирға инәбеҙ. Ә ундаааа... "Мин өйҙә юҡ", тигән хужабикә лә күҙен ыуып тора. Ир менән ҡатын бер-береһе менән кәңәшләшмәй, килешмәй яуап биргән икән миңә телефондан. Әлбиттә, һатып алыусыларҙың да, минең дә күңелдә көҙөк ҡалды. Йоҡосоларҙың фатиры һаман һатылмаған әле. Ә хәйбуллалар икенсе фатирҙы һатып алып, ҡыуанып ҡайтып киттеләр...

Ошондай ҡыҙыҡ һәм ҡыҙғаныс күренештәр ҡабатланып тора беҙҙең эштә. Ә шулай ҙа риэлторҙарға ла хөрмәт һәм ышаныс менән ҡарарға өйрәтергә ине ул кешеләрҙе. Һатыусы менән һатып алыусы араһын көйләп тороусы риэлторҙар бит күсемһеҙ милек баҙарында бик мөһим бурыс атҡара: баҙарҙағы фатир хаҡтарын беләләр, ниндәй фатирҙар ниндәй урында икәнен, транспорт бәйләнешен, туҡталыштарҙы навигатор урынына әйтеп бирәләр, "алиса" ла кәрәкмәй. Фатирҙы ҡасан һатырға ҡуйыу отошло, йә булмаһа, ҡасан тайм аут алып тороу кәрәк икәнен дә һеҙгә бары риэлтор ғына әйтеп бирәсәк. Тап күсемһеҙ милек буйынса агент менән һеҙ йәшәр өсөн йорт ҡына түгел, балаларығыҙға яҡшы мәктәп, бәләкәстәргә балалар баҡсаһы, хатта ки магазиндарҙы ла һатып аласаҡһығыҙ. Бына нисек уңайлы ул яҡшы, үҙ эшен белгән агент менән эш итеүе!

...Ҡыҫҡаһы, ни булһа ла булды инде, һүҙемдең башында һөйләгән ҡоҙағыйҙар менән күмәкләп йөрөп, бик күркәм йорт һатып алдыҡ әле бер ғаиләгә. Бәхетле, ҡотло йорт булһын, балаларҙың шат тауыштары яңғырап торһон, ин шәә Аллаһ.

**Айгөл ШАҺИЕВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

**Хәҙер ошо инаныуҙарҙың һәр береһен ентекле ҡарап үтәйек.**

- Ни тиклем тәмәкене күберәк тартһағыҙ, шул тиклем яман шеш менән ауырыу хәүефе арта. Ғаиләгеҙҙә тәмәке тартыусы булып та, уның башҡаларҙан оҙағыраҡ йәшәүе лә мөмкин, сөнки уның "тәмәке тартыу = яман шеш" тигән инаныуы юҡ. Тәмәке тартыуға кире ҡайтыр өсөн был дәлилде аҡланыу итеп ҡулланыр алдынан, тәмәке тартыу менән сәләмәтлегегеҙ араһында бер ниндәй ҙә бәйләнеш юҡ икәнлегенә ныҡлы инанығыҙ. Әгәр бәйләнеш барлығына ышаныу үҫешкән илдәрҙә киң таралған һәм медицина тикшеренеүҙәре һөҙөмтәләре, киң мәғлүмәт саралары мәғлүмәттәре менән нығытыла. Шуға күрә, никотинға саҡ ҡына бәйлелегегеҙ бар икән, тәмәке тартыуҙы ташлағыҙ.
- Ата-әсәләр балаларының уҡыуына түләргә тейеш Был айырым тема һәм беҙ уға урап ҡайтырбыҙ әле.
- Башҡаларға ярҙам итә алам. Әгәр ысынлап та кемгәлер ярҙам итергә теләһәгеҙ, башта тулыһынса тормоштан ҡәнәғәтлек алған, уның менән һоҡланған, үҙенең өлгөһөндә бер ҡыуаныслыҙ һәм моңһоу тормошон үҙгәртергә теләп, башҡаларға ярҙам ҡулы һуҙған кешегә әүерелегеҙ. Бер ваҡытта ла альтруизмға бирелмәгеҙ. Ысын альтруизм беҙҙең шәхси үҫештән башлана. Һеҙ ҡасан да булһа һуҡыр кешенең һуҡыр эт менән йөрөгәнен күргәнегеҙ бармы?

## "Әгәр ҙә..."

Ә һеҙ Ер шарындағы кешеләрҙең бер проценттан кәмерәге генә бәхетле булып вафат булғанын беләһегеҙме? Ғәмәлдә, һәр мең кешенең туғыҙы ғына үлер алдынан тормошонан ҡәнәғәт булыуын белдерә.

Әлбиттә, әгәр урамдағы халыҡтан һораһағыҙ, улар бер-береһенән уҙҙырып үҙҙәренең йәшәү рәүеше менән ҡәнәғәт булыуын һөйләр. Әммә был бары тик күҙ буяу ғына. Эш шунда: үлер алдынан кешегә һеҙ уның тураһында нимә уйлаһағыҙ ҙа барыбер, шуға ул дөрөҫөн һөйләүҙән дә ҡурҡмай. Һәм улар үҙҙәренең үкенесе тураһында белдерә, бының өсөн сәбәптәр бик күп.

Улар үҙҙәренең хатаһына үкенә тиһегеҙме? Юҡ, ғүмер һуңында кеше хаталары өсөн үкенмәй, ә күберәген нимәлер эшләргә теләп тә, эшләмәгәне өсөн үкенә.

Хәҙер нимәнелер тота һалып эшләү урынына, хаталанмаҫ, яңылыш эшләмәҫ өсөн хәл-торошто өйрәнеү һәм анализлауға күпме ваҡытығыҙҙы сарыф итергә тейешлегегеҙҙе иҫәпләп ҡарағыҙ. Секунд та, минут та түгел. Ҡәҙерле ваҡыттың хатта бер секундын да "Әгәр ҙә..." тигән фаразға әрәм итергә ярамай. Бер көн килеп беҙ эшләнмәгән эштәребеҙ өсөн үкенә башлайбыҙ, сөнки хаталанып ҡуймайыҡ, тип, күп ваҡытыбыҙҙы планлаштырыуға бүләбеҙ. Шуға күрә уйыбыҙҙан хатта мәңгелеккә хаталаныу ихтималлығын алып ташлап, һуңынан, һуң булғас, эшләнмәгән нәмәләргә үкенмәҫ өсөн һынауҙарға башкөлләй сумырға кәрәк.

Хаталар ни, булһын, әйҙә! Киләсәкте күҙаллай алмайбыҙ икән, беҙ эшләгәндең нимәһе хата, нимәһе дөрөҫ икәнен бер кем дә әйтә алмай. Әгәр яңылыш эшләгәнһегеҙ икән, уның нимәгә килтеререн нисек алдан, хатта бер нисә йыл алдан билдәләй алаһығыҙ?

Ҡайһы бер нәмәләрҙе беҙ белә алмайбыҙ һәм бөтә сер шунда ла инде. Шуға күрә, һорағыҙ - алырһығыҙ. Ысынлап һорағыҙ, ә хыялланып ҡына ҡалмағыҙ! Уңышлы кешеләр нимәлер эшләй, ә уңышлы булырға теләгәндәр был хаҡта хыяллана ғына.

**Пьер МОРАСИ.**



### 26 ИЮНЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 0.25, 1.05, 1.45, 2.25, 3.05, 3.40, 4.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.50, 14.15, 18.10, 22.45 Информационный канал. [16+]
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Великая". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

**РОССИЯ 1**

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Все как у людей. Продолжение". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Рая знает всё!" [12+]
3.55 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00, 9.15, 10.30, 11.45, 13.00 X форум регионов России и Беларуси.**
**9.00, 11.30, 12.45, 16.30, 23.00, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**10.15, 14.00, 18.00, 0.30 Новости (на баш. яз).**
**14.30 Интервью. [6+]**
**14.45, 17.30 Интервью. [12+]**
**15.00 "Тәмле. Мы вместе". [12+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Преград. Net. [6+]**
**16.00 "Это моя профессия". [12+]**
**16.45 Пофутболим? [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.30, 1.00 VII международный фестиваль искусств "Сердце Евразии".**
**23.30 Д/ф "Мариуполь. Возвращение". [16+]**
**5.45 Д/ф "Марк Шагал. Нереальная реальность". [12+]**

### 27 ИЮНЯ ВТОРНИК

**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 18.10, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Великая". [12+]
0.25, 1.05, 1.45, 2.25, 3.05, 3.40, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

**РОССИЯ 1**

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Все как у людей. Продолжение". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Рая знает всё!" [12+]
3.55 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 15.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**10.45, 15.45, 23.00, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.00, 16.00 X форум регионов России и Беларуси.**
**13.00 "Это мы". [6+]**
**13.30, 14.30, 18.00, 0.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 "Ете егет". [12+]**
**14.45 Интервью. [12+]**
**18.30 "Хоровод дружбы".**
**19.00, 1.00 VII международный фестиваль искусств "Сердце Евразии".**
**23.30 Д/ф "Никогда больше". [16+]**
**5.45 Д/ф "Минская элегия". [16+]**

### 28 ИЮНЯ СРЕДА

**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Жить здорово!" [16+]
10.00, 12.00, 14.15, 18.10, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.20 "Курбан-Байрам". Трансляция из Уфимской соборной мечети.
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Великая". [12+]
0.25, 1.05, 1.45, 2.25, 3.05, 3.40, 4.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

**РОССИЯ 1**

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 О самом главном. [12+]
10.30, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.00 Праздник Курбан-Байрам. Прямая трансляция из Московской Соборной мечети.
11.55, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Все как у людей. Продолжение". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Рая знает всё!" [12+]
3.55 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Праздник веры и добра!" Концерт. [12+]**
**7.30, 10.30, 15.00, 18.30, 0.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 Надо знать. [6+]**
**9.00 "Курбан-байрам". Прямая трансляция из Уфимской соборной мечети "Ляля-Тюльпан".**
**10.00 "Йома". [6+]**
**11.00, 0.15 Специальный репортаж. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 23.00 Новости (на рус. яз).**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.30 X форум регионов России и Беларуси.**
**15.30, 16.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**15.45 Д/ф "Путешествие в ледниковый период. Маршрут для всех". [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Атлас Баженова. [12+]**
**19.00, 1.00 VII международный фестиваль искусств "Сердце Евразии".**
**23.30 Д/с "Герои". [12+]**
**6.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 29 ИЮНЯ ЧЕТВЕРГ

**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 18.10, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Великая". [12+]
0.25, 1.05, 1.45, 2.25, 3.05, 3.40, 4.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

**РОССИЯ 1**

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Все как у людей. Продолжение". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Рая знает всё!" [12+]
3.55 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**10.45 "Алтын тирмә". [0+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 Сулпылар. [0+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 Этно-краса. [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Специальный репортаж. [12+]**
**16.45 Криминальный спектр. [16+]**
**17.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**17.30 Х/ф "Пусть ветер унесет мои слова". [12+]**
**19.00, 20.15 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**21.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Седьмое лето Сюмбель". [16+]**
**2.15 Спектакль "Нәркәс". [12+]**
**4.30 "Бай". [12+]**
**5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 "Это моя профессия". [12+]**

### 30 ИЮНЯ ПЯТНИЦА

**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
17.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.35 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Премьера. "Фабрика звезд". 20 лет спустя". [12+]
0.50, 1.30, 2.15, 2.55, 3.30, 4.05, 4.40, 5.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

**РОССИЯ 1**

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 Удивительные люди. Лучшее. [12+]
23.40 Х/ф "Стрельцов". [6+]
1.30 Х/ф "Любка". [16+]
4.37 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**10.30, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 16.45, 19.45, 5.15 История одного села. [12+]**
**12.15 Дознание. [12+]**
**12.45 Пофутболим? [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Үткән гүмер. [12+]**
**14.15 "Курай даны". [12+]**
**15.00 Лит-ра. [6+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 Патриот РФ. [12+]**
**16.00 "Аль-Фатиха". [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30 "Круиз-контроль". [12+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.30 "Башкорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**22.00, 6.00 Спортивная история. [12+]**
**23.00 "Байык-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Довольно слов". [12+]**
**2.15 Спектакль "Отчаянная". [12+]**
**4.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**4.45 "Автограф". [12+]**
**5.30 Тормош. [12+]**

### 1 ИЮЛЯ СУББОТА

**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "Поехали!" [12+]
11.05 "ПроУют". [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф "Поединки. "Король нелегалов". [12+]
14.20 Х/ф "Возвращение резидента". [12+]
17.05, 18.20 "Абракадабра!" [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.55 Премьера. "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
23.20 Х/ф "Три билборда на границе Эббинга, Миссури". Две премии "Оскар". [16+]
1.25, 2.10, 2.50, 3.25, 4.00, 4.40, 5.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

**РОССИЯ 1**

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.40 Доктор Мясников. [12+]
12.45 Т/с "Стенограмма судьбы". [16+]
17.50 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Крайняя необходимость". [12+]
0.40 Х/ф "Любовь без лишних слов". [16+]
4.05 Х/ф "Маша". [12+]
5.49 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Ете егет". [12+]**
**8.30 Башкирские каникулы. [12+]**
**9.15 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 Елкән. [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 Этно-краса. [6+]**
**11.00 Лит-ра. [6+]**
**11.30 МузКәрәҙ. [0+]**
**12.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**13.00 Үткән гүмер. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.00 Республиканский фестиваль лошадей башкирской породы "Башкорт аты-2022". [12+]**
**15.45 История одного села. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Х/ф "Радуга над деревней". [12+]**
**19.00 Специальный репортаж. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байык-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 2.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башкорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00 Х/ф "Последнее испытание". [16+]**
**3.15 Спектакль "Вишневая гора". [12+]**
**5.15 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Мистический Башкортостан. [12+]**

### 2 ИЮЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 23.35, 0.15, 0.55, 1.40, 2.20, 2.55, 3.30, 4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Премьера. "Жизнь своих". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Т/с "Гостья из будущего". Классика советской космической фантастики. [0+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Две звезды. Отцы и дети". Новый сезон. [12+]
21.00 "Время".
22.35 Т/с "Серебряный волк". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

**РОССИЯ 1**

6.10, 1.30 Х/ф "Тариф "Счастливая семья". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.40 Большие перемены.
12.45 Т/с "Стенограмма судьбы". [16+]
17.50 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.24 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Йома". [6+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 "Курай даны". [12+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [0+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.00 "Дорога к храму". [0+]**
**15.30, 4.45 Историческая среда. [12+]**
**16.00 "Честно говоря". [12+]**
**16.45 Юбилейный концерт народного артиста РБ Раджапа Вадутова. [12+]**
**19.00, 4.00 Әлләсе... [6+]**
**19.45 Д/ф "Уфимский хоспис. История создания". [12+]**
**20.30 Полезные новости. [12+]**
**20.45, 21.00, 22.45, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**21.15 Дознание. [16+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 3.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.15 Х/ф "Спасти нельзя оставить". [6+]**
**0.30 Спектакль "Недоросль". [12+]**
**3.30 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**5.15 "Млечный путь". [12+]**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ҠЫҘЫЛ АРМИЯ АЗАТ ИТКӘН ИЛДӘР




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**23-сө һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Кәрим. Ярлыҡ. Таған. Смена. Ҡабаҡ. Ламбада. Ғәниева. Наҙан. Мәрйәм. Икмәк. Тау. Сайыр. Лүшә. Атом. Үлсәм. Варан. Ишек. Тантана. Әрмән. Медиана. Тағараҡ.

**Вертикаль буйынса:** Ғәлимова. Сантиметр. Ебәк. Ант. Яран. Азамат. Алама. Келәт. Томат. Бина. Ғөбәйҙуллина. Шаран. Метан. Аяҡ. Ҡан. Сәүкә. Аҙна. Алты. Ҡон. Роман.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Июнь - Июль (Зөлхизә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 26 (8) дүшәмбе | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 19:03 | 21:55 | 23:25 |
| 27 (9) шишәмбе | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 19:03 | 21:54 | 23:24 |
| 28 (10) шаршамбы | 3:13 | 4:43 | 13:30 | 19:02 | 21:54 | 23:24 |
| 29 (11) кесе йома | 3:14 | 4:44 | 13:30 | 19:02 | 21:54 | 23:24 |
| 30 (12) йома | 3:14 | 4:44 | 13:30 | 19:01 | 21:54 | 23:24 |
| 1 (13) шәмбе | 3:15 | 4:45 | 13:30 | 19:01 | 21:53 | 23:23 |
| 2 (14) йәкшәмбе | 3:16 | 4:46 | 13:30 | 19:00 | 21:53 | 23:23 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**28 июнь "Мөхәббәт ҡоштары"** (И. Йомағолов), музыкаль комедия. 16+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**"Өҙөлгән өмөт"** (Н. Асанбаев), драмаһы менән Бөрйән районында гастролдәр:
**26 июнь -** Мораҙым,
**27 июнь -** Байғаҙы ауылдарында. 16+

## БР Милли музейы

**30 июнь "Ат иле"** күргәҙмәһен асыу. 15.00 6+

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

# НИСЕК КЕНӘ АЛДАШМАЙҘАР...

**Муттар граждандарҙың ауанлығы менән файҙалана. Ошо көндәрҙә генә ике кеше уларға 3 миллион һум аҡса күсергән.**

Баш ҡалала йәшәгән 40 йәшлек ҡатынға билдәһеҙ номерҙарҙан шылтыраталар. Улар үҙҙәрен хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәре тип белдерә һәм һөйләшеүҙе йәнәһе лә банктың хеҙмәткәрҙәренә күсерә. Яуыз ниәтлеләр ҡатынды һаҡланмаларына юғалыу хәүефе янауын һәм аҡсаларҙы тиҙ генә "хәүефһеҙ" иҫәпкә күсерергә кәрәклегенә инандыра. Ҡатын 1,3 миллион һумға кредит алып, уға үҙенең туплаған 900 һумын ҡушып, муттар әйткән төрлө тугыҙ банк иҫәбенә күсерә.

Икенсе осраҡ Туймазы районында була. Урындағы полиция бүлегенә 45 йәшлек ир мөрәжәғәт итә. Уға ла үҙҙәрен хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәре тип таныштырған билдәһеҙҙәр бер нисә тапҡыр шылтырата. Иҫәптәге аҡсаһын кемдәрҙеңдер билдәһеҙ банкка күсерергә маташыуын туҡтатыу өсөн уға 1 миллион 200 мең һумға кредит алырға һәм уны билдәһеҙ иҫәпкә күсерергә инандыралар.

Ике осраҡ буйынса ла РФ Енәйәт кодексының 159-сы статьяһының 4-се өлөшө буйынса енәйәт эше ҡуҙғатылған.

Башҡортостан Республикаһы буйынса Эске эштәр министрлығы билдәһеҙ кешеләргә аҡса күсерергә ярамағанлығын иҫкәртә. Әгәр шылтыратып, банк хеҙмәткәре тип һөйләшһәләр, телефонды һүндереп ҡуйығыҙ. Муттар ялған номерҙар ҡулланыуы ла мөмкин. Туғандарығыҙға ла яуыз ниәтлеләрҙең схемалары тураһында аңлатығыҙ.

**Башҡортостан Республикаһы буйынса Эске эштәр министрлығының матбуғат хеҙмәте.**

# КҮРШЕҢДӘН РӨХСӘТ АЛ

**Күп фатирлы йорттоң фасадына кондиционер ҡуйырға теләүселәргә хәҙер милекселәрҙең дөйөм йыйылышынан рөхсәт алыу кәрәк буласаҡ. РФ Юғары судының суд коллегияһы ошоға аныҡлыҡ индерҙе.**

Иғтибар итһәгеҙ, ҙур ҡалаларҙағы йорттарҙың тышҡы диуары кондиционерҙар менән "биҙәлеп" бөткән. Әйтәйек, бер фатир хужаһы бындай климат ҡоролмаһы ҡуйырға теләй икән, ошо йортта йәшәүселәрҙән рөхсәт алырға тейеш. Ә бына уларҙың риза булыуы тураһында ҡағыҙың юҡ икән, был ҡанунды боҙоу тип иҫәпләнә.

Бинаның фасады - күп фатирлы йорттоң бөтөн хужаларының дөйөм милеге, РФ Торлаҡ кодексының 36-сы статьяһында шулай тиелгән. Әгәр ҙә башҡаларҙың яҙма ризалығын алмайһығыҙ икән, кондиционерҙы алып ташлауығыҙҙы һорап судҡа мөрәжәғәт итә алалар. Был осраҡта суд бындай талапты үтәүегеҙҙе һораясаҡ. Тик бер генә федераль ҡанунда ла кондиционер ҡуйыуға рөхсәт кәрәк тип яҙылмаған. Бынан тыш, Рәсәйҙең ҡайһы бер төбәктәрендә был йәһәттән үҙҙәренең ҡабул иткән ҡанундары бар, тимәк, РФ Юғары суды был ҡанундарҙы инҡар итә алмаясаҡ.

Күптән йорт диуарына ҡуйылған кондиционерҙар менән нимә буласаҡ? Суд аша уларҙы алдырырға мөмкин. Тик дәғүәнең ваҡыты уҙып китеүе лә бар. Әйтәйек, кондиционер 10 йыл элек ҡуйылған, ти. Күршеләрегеҙ хоҡуҡтары боҙолоуы тураһында бөгөн генә белеп ҡалды икән, ти. Әммә дәғүә белдереү ваҡыты уҙып киткән, ул - 3 йыл тәшкил итә. 3 йыл уҙғансы, барлыҡ рөхсәт биреүсе документтарҙы һаҡларға кәрәк. Әммә был кондиционер мәҙәни мираҫ объекты диуарына ҡуйылған икән, уны барыбер һүтеп алырға тура киләсәк. Сөнки һаҡланыусы объектҡа зыян килтерә.

Махсус рөхсәт алынмаған осраҡта урындағы властар штраф түләтергә (1500-2500 һум), кондиционер ҡуйылған урынды үҙ иҫәбегеҙгә ремонтлауҙы талап итә ала.

***✓ Әле быға тиклем 2-се курс студенттарының тулы күләмле спектаклдәр әҙерләгәне булмаған. Был беренсеһе, шуға ла тарихи, дауамы булмай, тәүге һәм һуңғыһы булып ҡуймаһын.***



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ШАТЛЫҠ ОСҠОНДАРЫ

**Ут һүнде. Тамашасылар быны көтмәгәндәр, күрәһең, залда аңлашылмаған тынлыҡ урынлашты. Театрҙа бит, ғәҙәттә, ут яйлап ҡына тоногая барып һүнә. Ә бында, ауыл клубындағы кеүек, ҡапыл һүнде. "Сулпан" балалар театрының элекке бинаһында былай булмай торғайны шикелле. Яҡтылыҡтың шулай ҡапыл ҡараңғылыҡтан йотолоуы хатта хафаға һалғандай тойолдо.**



Хафаланырлыҡ та шул, сөнки залда республикала билдәле кешеләр ултыра. Улар Камил Вәлиев исемендәге Сибай сәнғәт колледжының театр бүлеге студенттары Наил Ғәйетбаев әҫәре буйынса ҡуйған "Ғашиҡтар көнө" исемле музыкаль-лирик комедияны ҡарарға килгән. Өфөнән пьеса авторы ла килеп еткән, әле генә халыҡ артистары менән ни тураһындалыр һөйләшеп ултыра ине. Студенттарҙың 2-се курста ғына уҡыуҙарын иҫәпкә алғанда, ҡапыл һүнгән ут һымаҡ, йәштәр ҙә ҡапыл балҡып һүнмәҫме, тиғән икеле уйҙар борсой, залда ултырған ата-әсәләре өсөн һаман да бала булып ҡалған буласаҡ артистар һынатмаҫмы?

Спектакль башланды һәм баяғы хафалар яйлап юҡҡа сыҡты, сәхнәлә барған ваҡиғалар, йәш артистарҙың ихлас уйыны үҙенекен итте - нәфис һүҙ, хәрәкәттәр, музыка, алҡыштар бергә тупланып, илаһи бер мәл бүләк итте. Сәнғәтте тойғандар өсөн бындай мәлдәр бик ҡиммәтле, матурлыҡҡа ынтылған күңел йыш талап итә шундай рухи аҙыҡты. Тамаша бөткәс, бер кем дә урынынан ҡуҙғалырға ашыҡманы, уй-хистәр, мөлдөрәмә тулған шатлыҡтар түгелеп китер һымаҡ ине.

Бына шулай Сибайҙа бик әһәмиәтле тарихи ваҡиға булып уҙҙы. Был һүҙ уйнатыу түгел, тәрән итеп хәтергә уйылырҙай мәлдәр көн дә булмай, хатта ай һайын да түгел, әллә нисә йылға бер булыуы ла ихтимал. Әле быға тиклем 2-се курс студенттарының тулы күләмле спектаклдәр әҙерләгәне булмаған. Был беренсеһе, шуға ла тарихи, дауамы булмай, тәүге һәм һуңғыһы булып ҡуймаһын. Спектаклде ҡуйыусы режиссер, студенттарҙың актер оҫталығы буйынса уҡытыусылары Денис Нурғәлин бик ҡыйыу аҙым яһаған, тәүгеһе булһа ла төйөнһөҙ килеп сыҡҡан. Йәштәргә лә афарин, тиергә ҡала, улар балалыҡтан сығып, буласаҡ һөнәрҙәренә ышаныслы аҙым яһаны - уңыштан баштары әйләнеп китмәһен, тип теләргә ҡала.

Хистәргә бирелеп, әллә үҙемдең дә баш әйләнеп киттеме, тип, билдәле режиссер Сәлихйән ағай Әфлтүновтан тәьҫораттарын һораштым.

- Һәйбәт, тик әлегә йәштәрҙең ҡыйыулығы етеңкерәмәй. Был ҡурҡыныс түгел, ваҡыт үтә килә, тәжрибә аша туплана бындай сифат, - тине күпте күргән оҫта.

Һаран ғына әйтте, әммә остаз күҙҙәрендә лә шатлыҡ осҡондары балҡый ине.

**Радик ӨМӨТҠУЖИН.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ҠУНАҠТАР КӨТӘБЕҘ

**Өфөлә 26-28 июндә етенсе тапҡыр "Евразия йөрәге" халыҡ-ара сәнғәт фестивале ойоштоторола. Open-air форматындағы форумдың Рәсәйҙә һәм сит илдәрҙә тиңдәше юҡ, ул илдең иң яҡшы 10 фестивале иҫәбендә. Башҡортостан сәнғәтендә иң сағыу, онотолмаҫ, үҙенсәлекле сараға Өфө амфитеатрында тамаша ҡылырға мөмкин.**

Мәҙәниәт министрлығының матбуғат хеҙмәтендә хәбәр итеүҙәренсә, форумдың мәҙәни программаһы бик бай. Классик һәм заманса, симфоник музыка һәм милли мотивтар, илебеҙ киноһы һәм башҡалар. Өс көн дауамында музыка байрамы ҡунаҡтарын бик күп сюрпризҙар көтә. Көтөлмәгән дуэттар, төрлө йылдарҙағы хиттар, популяр башҡарыусыларҙың сығыштары һәм сағыу тамашалар.

Беренсе көн, 26 июнь, кинематограф музыкаһы менән билдәләнә. Программала кино, эстрада йондоҙҙары совет һәм Рәсәй кинематографы йырҙары менән сығыш яһай.

27 июндә фестиваль программаһын "Славян баҙары" проекты дауам итә. Сара Милли кейемдәр парадынан башлана, шунан һуң ул Дуҫлыҡ әйлән-бәйләнәнә әүерелә.

"Рәсәй - Беларусь: беҙҙең көсөбөҙ - берҙәмлектә" концерт программаһында ике илдең төп ижади коллективтары һәм солистары ҡатнаша.



Минск, Могилев, Адыгея, Бүрәт, Төньяҡ Осетия-Алания республикалары, Мәскәү, Луганск, Ырымбур, Ҡурған, Брянск таланттары, Башҡортостандан Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле, республика ҡурайсыларының йыйылма ансамбле, Өфөнөң "Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамбле, "Бишбармаҡ" оркестры, Әбйәлил районының "Миләш" халыҡ фольклор ансамбле сығыш яһай.

28 июндә, "Симфоник төн"дә, амфитеатр сәхнәһендә иң яҡшы симфоник оркестрҙар, шул иҫәптән Башҡортостандың Милли симфоник оркестры, Рәсәй төркөмдәре һәм солистары сығыш яһай. "Евразия йөрәге" халыҡ-ара сәнғәт фестивален Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы ойоштора.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠАР ӨҪТӨНДӘ...

## ҡаҙан ҡайната бел!

Кешенең кем икәнен белгең килһә, төҫөнә ҡарама, дуҫына ҡара.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Үҙ һүҙенә тоғролого менән дан алған Мәхмүт солтан бер саҡ ҡала урамдары буйлап сығып китә. Шул саҡ ул бәләкәй арбаға ҙур таш тейәп, уны көскә тартып килгән бер кешене күреп ҡала. "Яфаланма улай, ташла ташыңды!" - тип бойора был кешегә Мәхмүт солтан. Арба тартып килеүсе кеше был ташты юл уртаһында ятыуы, хәрәкәткә ҡамасаулауы тураһында әйтергә тип ауыҙ аса, әммә солтан уға асыуланып ҡысҡыра: " Һин үҙеңдең хакимыңдың бойорғанына ҡаршы килергә батырсылыҡ итәһеңме? - ти ул. - Ташла ташыңды, ул ошонда мәңге ятырға тейеш. Минең бойороғом - ошо!" Арба һөйрәп килеүсе ташты шунда уҡ бушата һала. Солтан үҙенең ярандары менән артабан китә, ә таш барыһына ла ҡамасаулап, юл уртаһында ятып ҡала. Ташты бераү ҙә алып ташларға батырсылыҡ итмәй, сөнки уның ошонда ятыуы солтан бойороғо менән нығытылған бит. Солтандың вәзирҙәре уға был ташты алып ташлау тураһындағы һорау менән мөрәжәғәт итеп ҡарай. Әммә солтан: "Мин үҙ бойороҡтарымды үҙгәртмәйем. Әгәр ҙә хаким үҙ күрһәтмәһен үҙгәртһә, ул саҡта һеҙ бит был ҡарар осраҡлы ғына ҡабул ителгән, тип уйлаясаҡһығыҙ", - тип ҡырт киҫә. Солтан Мәхмүт донъя ҡуйғандан һуң да яңы вариҫ, вәзирҙәр хакимдарҙың ихтыярын хөрмәт итергә тейеш, тигәндән сығып, үҙенә тиклемге хакимдың бойороғон кисектерергә йөрьәт итмәй. Шулай тиҫтәләгән йылдар үтә. Был ваҡыт эсендә ҡалала бер нисә хаким алышына. Ҡала үҫешә. Ә теге таш хәрәкәткә ҡамасаулап, йәйәүлеләргә лә, һыбайлыларға ла, йөклөләргә, каруандарға ла ҡамасаулап, һаман да юл уртаһында ята бирә.**

**Бер саҡ юл уртаһында ятҡан ташҡа ҡарай-ҡарай, был тирәнән бер уҡытыусы үҙенең бик аҡыллы уҡыусыһы менән үтеп бара. Улар йөк тейәгән ике арбаның ошо таш эргәһенән үткәндә бер-береһенә эләгешеп, ысҡынып китә алмай ыҙаланыуын күҙәтә. Бына бер арбалағы ат өркөп, артҡы аяҡтарына үрәпсеп баҫа, шунда эргәләге сауҙа киоскыһы емерелеп төшә, ундағы ҡауындар юл буйлап тәгәрәп китә. Ҡауындарға эләгеп, бер кеше йығыла, икенсеһе, өсөнсөһө... Ишәктәр ҡысҡыра, аттар кешнәй, кешеләр ҡыҫҡырышып әрләшә, дөйәләр юлдан ситкә сығып өйөлөшә... "Уҡытыусым, - тип һүҙ башлай уҡыусы. - Ни өсөн ошоға тиклем был ташты бераү ҙә ситкә алып быраҡмаған?" "Был таш киләһе быуындарға һабаҡ булып ята бирә. Барыһы ла ул таштың солтан Мәхмүт бойороғо буйынса ошонда ятҡанын белә. Хәҙер был таш киләһе хакимдарға ла, ябай кешеләргә лә "Хакимдарҙың бойороғон кисектереү мөмкин түгел", йәғни хаким бер ҡасан да үҙ ҡарарын үҙгәртергә тейеш түгел, тигәнде раҫлау булып тора. Таш, халҡына зыян килтермәҫ өсөн хаким үҙенең бойороҡтарын уйлап бирергә тейеш, тигәнгә лә ишара ул. Таш шулай уҡ, хакимдың бойороҡтары дөрөҫ булмағанда ла уның вәзирҙәре был бойороҡто кисектерергә тейеш түгел, юҡһа, бойороҡто кисектереү хакимдың уйлап ҡарар ҡабул итеү һәләтенә ышанмау тыуҙырасаҡ, тигәнгә лә ишаралай. Тимәк, шундай һығымта яһайыҡ: таш ошонда тейелгеһеҙ булып ятҡанда ниндәйҙер уйҙарға этәрә. Ваҡыты-ваҡыты менән уйланып алыуҙан да файҙалыраҡ һәм әһәмиәтлерәк нәмә булыуы мөмкинме һуң?"**

**"Һин, һәр ваҡыттағыса, хаҡлыһың, уҡытыусым, - ти уҡыусы. - Ә шулай ҙа был хәлгә түҙеп тора алмаған хаким табылып, ташты юлдан алып ташларға бойорһа, нимә булыр? Ул саҡта был хакимдың вариҫтарына һәм вәзирҙәренә уйланыр сәбәп ҡалмаҫмы икән ни?" "Әлбиттә, ниндәйҙер буш урын да уйланыуға сәбәп була ала, - тип яуаплай уҡытыусы. - Бәлки, был буш урында борон-борон заманда бер таш ятҡандыр? Был уйландырыу сәбәбе була алмаймы ни?" "О, уҡытыусым, - ти уҡыусы. - Мин әлеге ваҡытта китап яҙам. Әгәр ҙә мин ул китабымда бер битте таҙа көйө ҡалдырһам, һеҙ ҡаршы килмәҫһегеҙме?.."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
23 июнь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3267
Заказ - 828